✓*Бер уҡыусы остазынан һорай икән: "Остазым, донъя ҡайғы-хәсрәт менән тулған. Ошондай заманда кеше ни менән йыуанырға, ҡайғы-хәсрәттән нисек арынырға тейеш?" "Ниндәй кеше тураһында әйтеүеңә ҡарап, яуап бирәм, - тигән остаз. -Аҡыллы кеше: "Яҙмышыма яҙылған икән, был хәсрәткә тарыр кеше мин булғанмын", - тип йыуана. Ахмаҡ иһә: "Бындай ҡайғы-хәсрәт мине урап үтәсәк, миңә ҡағылмаясаҡ", - тигән уйҙан йыуаныс таба".*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

24 - 30 АВГУСТ (УРАҒАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№34 (556)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Икенсе урындалар...**

әммә төшөп ҡалғандарҙан түгел!



5

**Ҡыҙҙар йыйнаҡ булғас...**

егеттәр тыйнаҡ булды



6

**Бер кемдән дә кәм түгелбеҙ...**



8-9 Мәскәүҙә уҡып, шуға инандыҡ

**Көрәҙәсегә ышанма...**

башыңа бәлә алма



13

14 ТВ-программа

### ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## РФ Дәүләт Думаһына, ата-әсәләренең пенсияһына өҫтәмәне балаларының эш хаҡынан алырға, тигән закон ҡабул итеү тураһында тәкдим индерелгәнен ишеткәнһегеҙҙер?

*Гөлсәриә ӘБИЛЕВА, Сибай телевидениеһы мөхәррире:* Был бик сетерекле мәсьәлә. Әлбиттә, бер яҡтан ҡарағанда, һәйбәт тәкдим кеүек. Раввин Зиновий Когандың фекерен тыңлағайным, бындай өҫтәмә индереү кешеләргә ата-әсәһе алдында яуаплылыҡ тойғолары өҫтәй, үҙенең ҡартлығы тураһында уйларға мәжбүр итә, тигәйне ул. Тик беҙҙең ил бит бик яҡшы тәкдимде лә бөтөнләй уйламаған яҡҡа әйләндереп ебәрә. Шуға ҡырҡа ғына әйтеп булмай. Әгәр дәүләт үҙенең бурысын ошо рәүешле башҡалар иңенә күсермәһә, был ыңғай күренеш кеүек. Бөгөнгө эшһеҙлек заманында иһә, был тәкдим эш таба алмағандарҙан, йәки бәләкәй хеҙмәт хаҡы алғандарҙан көлгән дә кеүек.

Бөгөн халыҡтың бар өмөтө, бар ышанысы ил етәкселегендә түгел, Аллаһы Тәғәләлә. Совет осоро менән сағыштырып ҡарайым да, киләсәккә пландар ҡороу, киләсәкте ышаныслы күҙаллау тигән нәмә бик һирәктәрҙә генә тороп ҡалды кеүек. Ил беҙҙең атайҙарҙы "тишек кәмә"гә ултыртты, шуға бөгөн иң тәүҙә үҙенде уйла, ҡартлығыңды ҡайғырт, тигән принципты һеңдерергә тырышаларҙыр ҙа.

Илдең үҫеш кимәлен белгең килһә, сабыйҙарҙың һәм ҡарттарҙың хәленә, көнитмешенә ҡара, тиҙәр. Бына миңә балалар һәм ҡарттар бик йәл. Сөнки балалар әле үҙҙәрен ҡарарға ҡул аҫтына инмәгән, ололарҙың иһә ҡеүәте киткән. Ә йәштәргә, һаулығы булһа, тырышырға була. Уларҙа көс бар. Сабыйҙар менән ҡарттар улар күҙенә ҡарап тора. Йөк аты вазифаһын бөгөнгө көн йәш кешегә һала. Ауырмы, еңелме - ҡарап тормайһың, тартаһың да тартаһың инде. Яуаплы кеше - балаһы алдында ла, ата-әсәһе алдында былай ҙа яуаплы, яуапһыҙы - әллә ниндәй закондар менән янағанда ла ситләшеү юлын таба ул.

*Әлиә ДӘҮЛӘТБАЕВА, йәш белгес:* Яңы тәкдимдең маҡсаты изге кеүек - эшләп йөрөүсе балалар эш хаҡының 2 процентын пенсиялағы ата-әсәһе иҫәбенә күсерәсәк. Законды уйлап сығарыусылар әйтеүенсә, был 2 процент пенсионерға әллә ни ҙур килем килтермәйәсәк, ул бары балаларға ата-әсәләре тураһында иҫтәренә төшөрөп, хәстәрлек күрергә саҡырасаҡ. Өлкәнәйеп бөткән кешеләргә, ата-әсәйеңә ярҙам ит, тип мәжбүр иткән ниндәй йәмғиәттә йәшәйбеҙ һуң беҙ? Ғаиләлә бындай проблема булырға ла тейеш түгел кеүек. Бына минең әлегә аҡсалата ярҙам итергә мөмкинлегем юҡ, бар тапҡаным фатир өсөн түләүгә, ашау-эсеүгә китә. Киреһенсә, ауылда йәшәгән атай-әсәйем миңә ярҙам итә, мин, үҙ сиратымда, ялдарын улар янына ҡайтып, ҡул ярҙамы күрһәтергә тырышам. Мин ата-әсәһенән баш тартып, йылдар буйына улар янына ҡайтмай йөрөгән кешеләрҙе бөтөнләй белмәйем дә. Ғөмүмән, халҡыбыҙҙа атайға, әсәйгә, оло кешеләргә ихтирам менән ҡарау бөгөн дә бар, шуға бындай тәкдимде ишетеүе беҙҙең өсөн бер аҙ сәйер ҙә.

Ә ғаиләлә, туғандар араһында үҙ-ара йылы мөнәсәбәт юҡ икән, быны бер ниндәй закон менән дә нығытып булмаясаҡ. Шуға ла яңы һалым уйлап сығарырға түгел, ә йәш быуынды дөрөҫ итеп тәрбиәләүгә күберәк иғтибар бүлергә кәрәк.

**(Дауамы 2-се биттә).**

### ШАҒИР ҺҮҘЕ




## "МИН- БАШҠОРТ!" ТИП ТАНЫШЫҒЫҘ!

***Яндырылған ауылдарҙың көлдәре беҙ,
Шул көлдәрҙең ҡалҡып сыҡҡан гөлдәре беҙ.
Ни үкенес: ҡыҫҡа булды көндәребеҙ -
Яндырылған ауылдарҙың көлдәре беҙ...***

***Яндырылған ауылдарҙың күмере беҙ,
Һеҙҙең хәйер-доғаларға тилмерәбеҙ.
Ил-ер өсөн фиҙа булды ғүмеребеҙ-
Яндырылған ауылдарҙың күмере беҙ...***

***Яндырылған ауылдарҙың төтөнө беҙ.
Онотмағыҙ беҙҙе, зинһар, үтенәбеҙ!
Илгә хаҡһыҙ ҡаныҡҡандың хөкөмө беҙ -
Яндырылған ауылдарҙың төтөнө беҙ...***

***Яндырылған ауылдарҙың ялҡыны беҙ.
Онотоға беҙҙе шулай хаҡлымы һеҙ?
Танымайбыҙ, ысын башҡорт халҡымы һеҙ?
Яндырылған ауылдарҙың ялҡыны беҙ...***

***Яндырылған ауылдарҙың йәндәре беҙ.
Сабыйҙар ҙа шәһит китте, йәлләмәгеҙ!
Хәйер, йәлләй беләме ни йәндәрегеҙ?
(Һеҙ бит хәҙер ғәфләт баҫҡан
хәлдәһегеҙ...)***

***Яндырылған ауылдарҙың һағышы беҙ -
Йәнебеҙҙе көлдән эҙләп табышығыҙ!
Беҙҙең алда таҙа булһын намыҫығыҙ:
"Беҙ бөтмәнек!
Мин-башҡорт!" - тип танышығыҙ!***

✓ *Яҙылмаған ҡанун нормаларын законға һыйҙырып булмаған кеүек, атайың, әсәйең алдындағы бурысыңды аҡсалата түләп бөтөп тә булмаясаҡ.*



БАШ ЙОРТТА



# ӨФӨ ТУРАҺЫНДА...

## Һиндостанда һөйләйәсәкмен

**Үҙебеҙҙең төркөм менән Өфөгә "Берҙәмлек" халыҡ-ара фестиваленә Һиндостандың Пенджаб (Pundjab) штатынан килдек. Беҙҙең сығышты халҡығыҙ бик йылы ҡабул итте.**

Минә донъяның төрлө ҡитғалары буйлап күп йөрөргә тура килә - Канадала ла, Бөйөк Британияла ла, АҠШ-та ла булдым, Африка илдәрендә лә сығыш яһаным. Бөтөн ерҙә лә музыкаға битараф булмаған кешеләр осрауы ҡыуандыра. Ә һеҙҙең илдәге халыҡ көйҙәренә етди мөнәсәбәт мине бөтөнләй әсир итте. Ғөмүмән, Башҡортостанға, Өфө ҡалаһына килеп төшкәс тә шундай нурлы йөҙлө, ихлас сырайлы кешеләр осраны беҙгә. Күңелгә ятҡан нәмәләр бының менән генә бөтмәне әле: бейә һөтөнән эшләнгән әскелтем генә эсемлегегеҙ оҡшаны. Исеме хәтерҙә ҡалмаһа ла, тәме тел осонда тора һаман.

Әйткәндәй, һеҙҙең ҡалала Һиндостандан килеп уҡыусы студенттарыбыҙ ҙа бар. Улар медицина университетында уҡый. Беҙҙең турала ишетеп, янымыҙға килеп тә киттеләр. Һеҙҙә белем алыу, һеҙҙең мәҙәниәт менән аралашыу һөҙөмтәһе яҡшы булырына, тыуған илгә ҙур белгес булып ҡайтырҙарына шигем юҡ. Нимәһе ҡыуаныслы, улар бында Һиндостандағы кеүек үк иркен йөрөйҙәр - ятаҡтарҙа бар шарттар, матур мөнәсәбәттәр булдырылған.

Һеҙҙә тағы нимә оҡшаны - кем менән генә аралашма, барыһы ла беҙҙең бейеүҙәр, йырҙар, беҙҙең кино сәнғәте тураһында яҡшы хәбәрҙар, актерҙарҙы ла исемләп беләләр. Сит илдә үҙ мәҙәниәтеңде белеүсе кешеләрҙе осратыу үҙе бәхет икән ул. Бындай аралашыу кешеләрҙе берберенә яҡынайта, әлбиттә. Ҡайтҡас, үҙемдең таныштарыма, туғандарыма хозур Башҡортостан, гүзәл Өфө, уның һоҡланғыс ҡунаҡсыл, ихлас тәбиғәтле халҡы тураһында һөйләйәсәкмен.

**Суквиндер НАТХ,**

**Һиндостандың "Пенджаб" халыҡ-ара милли музыка төркөмө солисы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## РФ Дәүләт Думаһына, ата-әсәләренең пенсияһына өҫтәмәне балаларының эш хаҡынан алырға, тигән закон ҡабул итеү тураһында тәкдим индерелгәнен ишеткәнһегеҙҙер?

**(Башы 1-се биттә).**

***Илнур ҺӨЙӨНДӨКОВ, юрист:*** Әхлаҡи яҡтан, был тәкдим, бәлки, дөрөҫтөр ҙә. Әлбиттә, атай-әсәйгә ярҙамды аҡса менән иҫәпләргә ярамай. Бөтөн кешелек өсөн уртаҡ әхлаҡи ҡиммәттәр бар, беҙҙең халыҡта ла ата-әсәгә ҡәҙерхөрмәт белдереү, изгелек күрһәтеү, мотлаҡ ярҙам итеү кеүек яҙылмаған ҡанундарҙы йәше-ҡарты үтәй, шөкөр. Шуға ла кем ата-әсәһенә былай ҙа ярҙам итә, ул һалымға ҡарамайынса, артабан да уларҙы хәстәрләйәсәк. Был закон тәү сиратта ата-әсәләренә битарафтарға ҡағылалыр.

Икенсе яҡтан ҡарағанда, Рәсәйҙә һалымдан күп нәмә юҡ. Хәтерегеҙгә төшөрөгөҙ, яңы закон буйынса 2013 йылда, мәҫәлән, шәхси эшҡыуарҙар, адвокаттар, нотариустар пенсия фондына ғына 35 мең һумдан ашыу иғәнә индерергә тейеш ине. Был ҡарар йәмғиәттә ҙур шау-шыу тыуҙырҙы һәм был түләүҙәрҙе 19 мең һумға төшөрҙөләр. Иҫәпләй башлаһаң, был да ҙур сумма, пенсияға сыҡҡас, был аҡсалар барыбер һиңә түләнеп бөтмәйәсәк. Шуны ла иҫәпкә алырға кәрәк, түрәләр юғарыраҡ һандар килтереп һөйләргә яратһа ла, Рәсәйҙә бөгөн эшләп йөрөүсенең уртаса эш хаҡы 6-8 мең. Уның эсенән 13 процент килемгә һәм башҡа һалымдар тотолоп ҡала. Шуға күрә, әгәр ҙә был яңы ҡарар тормошҡа аша икән, ул килемдәренең суммаһына ҡарап, төрлө кешегә төрлөсә билдәләнергә тейештер. Шулай уҡ, минең уйымса, дәүләткә бындай һалымдар уйлап табып, ул тиклем ғаилә эсенә ҡыҫылырға ярамайҙыр. Былайға китһә, башҡа түләүҙәр ҙә, әйтәйек, ата-әсәләргә балаларҙың киләсәге өсөн тағы бер-ике процент һалым уйлап сығарырға ла күп ҡалмай. Яҙылмаған ҡанун нормаларын законға һыйҙырып булмаған кеүек, атайың, әсәйең алдындағы бурысыңды аҡсалата түләп бөтөп тә булмаясаҡ. Әйҙәгеҙ, шуға ла әхлаҡи ҡиммәттәрҙән ситләшмәйек, шул саҡта бер ниндәй өҫтәмә ҡанун да кәрәкмәйәсәк.

**Ләйсән ДАЯНОВА яҙып алды.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ШӨКӨР ИТӘ БЕЛЕҮ...

## Хоҙай талабы

**"Бурысым ҡалғайны, биреп ҡуяйым әле. Бурыслы кешенең йәнен теге донъяға индермәйҙәр, был донъяла бурыс ҡайтара алмай, теге донъяла мәңге ҡаңғырып йөрөгөм килмәй", тип, бер танышым ун тин аҡса биреп китте...**

Моғайын, теге донъяға инә алмаған бурыслы кеше йәндәре бихисап булып, улар был донъялағы әҙәмдәргә лә ниндәйҙер кире йоғонто яһайҙыр, тип уйлайым. Шулай булмаһа, кеше тигәнең был тиклем дә негатив булмаҫ ине бит. Һүҙемде раҫлап, шулай тим: кешеләр бит хәҙер ыңғай күренештәргә иғтибар ҙа итмәй, баһаламай ҙа, шатланмай ҙа, ошолай булырға тейеш, тип ҡабул итә. Ә инде негатив күренештәрҙе һә тигәнсе иғтибар үҙәгенә ҡуйып, көнүҙәк мәсьәләгә әйләндерә һәм шунан ниндәйҙер ләззәт таба. Гәзит-журнал биттәренең, интернет селтәренең башлыса негатив хәбәрҙәр, ғәйбәт, енәйәти хәлдәр тураһындағы белдереүҙәр менән тулы булыуы кешеләр ҡылығының, уйҙарының, донъяға мөнәсәбәтенең нәтижәһелер, күрәһең. Моғайын, төрлө тәбиғәт катаклизмдары, һәләкәттәр Юғары көс тарафынан кешелектең был донъяһын кире йоғонтоларҙан арындырыр, таҙартыр өсөн ебәреләлер ул...

Нимә эшләргә һуң? Был мәңгелек һорауға кеше күптән инде яуап тапҡан. Булғанына ҡыуанып, шөкөр итеп, рәхмәттәр әйтеп, яҡшы теләктәр теләп йәшәргә кәрәк. Тәбиғәтте кешегә бойһондороп түгел, ә кеше тәбиғәткә бойһоноп йәшәргә тейеш. Кеше бит тәбиғәттең бәләкәй генә бер өлөшө. Шуныһы ҡыуаныслы: бик күп милләттәштәрем ошо хәҡиҡәтте, йәшәйештең мәғәнәһен төплө аңлай, белгәнен оран һалып ҡысҡырып йөрөмәй, һәүетемсә, донъя артынан ҡыумай ғына йәшәй бирә. Башҡа ҡәүемдәр беҙҙең ошо сабырлыҡты аңлап та етмәй хатта. Ә бит тәбиғәт биргәнгә шөкөр итеп, сабырлыҡта йәшәү - Хоҙай талабы...

**Рөстәм НУРЫЕВ.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Август аҙағына тиклем уҡыусыларыбыҙға 50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 2014 йылдың тәүге яртыһы өсөн 2013 йылғы хаҡтар менән, йәғни 378 һум 36 тингә яҙылыу мөмкинлеге бирелә. Сентябрҙән хаҡтар үҙгәрәсәк.**



● Шулай итеп, август айында 2014 йылдың тәүге яртыһы өсөн гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе тәүге 10 уҡыусыбыҙ - **Ноғман Мусиндың "Алдар батыр"**, 10 уҡыусыбыҙ - **2014 йылға "Башҡортса дини календарь"**, 10 уҡыусыбыҙ **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.

● **Әйткәндәй,** 2013 йылдың икенсе яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылырға әле лә һуң түгел: 17 сентябргә тиклем яҙылһағыҙ, гәзитебеҙҙе октябрҙән алдыра башларһығыҙ.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:** йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге **"Өфө-матбуғат"** киоскыһында 6 айға 330 һумға яҙыла алаһығыҙ - почта йәшниге юҡ, тип һылтанырға ла кәрәкмәй, аҙнаһына бер тапҡыр шәмбе көндө ошо киоскынан ғына сығаһығыҙ ҙа алаһығыҙ.

● **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru.** Беҙҙең блог: **blog. kiskeufa.ru.**

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Ишембай районының Ҡолғона ауылында булды, унда бер нисә социаль объектты, шул иҫәптән балалар баҡсаһын, урта мәктәпте һәм БР халыҡ яҙыусыһы Ноғман Мусиндың Ижад йортон ҡараны. Бөгөнгө көндә Ҡолғонала 350-гә яҡын йорт иҫәпләнә. Бындағы халыҡтың төп проблемаһы - ауылда бер генә яҡшы юл да юҡ. Юл булмағанлыҡтан, ололар ҙа, балалар ҙа йонсой. Йәнә бер мөһим проблема - ауылда элемтә юҡ. Шулай уҡ ауылдың һәр йортонда тиерлек бал ҡорто тотоп та, балды һатыу ҙур ауырлыҡ тыуҙыра. Был проблемалар тураһында республика Президентына еткерҙе ҡолғоналар.

✓ Рәсәй Президенты РФ Хөкүмәтенә ташҡындан зыян күргән төбәктәргә ярҙам күләмен ярайһы уҡ арттырырға ҡушты. Ошо көндәрҙә Алыҫ Көнсығыш, Башҡортостан һәм Силәбе өлкәһенең ташҡындан зыян күргән төбәктәренә РФ Хөкүмәтенең резерв фондынан средстволар бүлеү мәсьәләһе кесе йома Хөкүмәт ултырышында тикшереләсәк.

✓ Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов 2013 йылдың 22 һәм 23 ноябрендә "Урал аръяғы-2013" инвестиция форумын үткәреү тураһындағы бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Иҡтисади бәйләнештәрҙе үҫтереү, Урал аръяғы иҡтисадына инвестициялар йәлеп итеү форумдың төп маҡсаттары булып тора. Тәүге "Урал аръяғы" инвестиция форумы былтыр июндә Сибайҙа үткәйне. Дөйөм алғанда, унда Башҡортостан Хөкүмәте, район хакимиәттәре һәм инвесторҙар араһында йәмғеһе 7,6 миллиард һумға хеҙмәттәшлек тураһында 11 килешеү төҙөлдө. Бөгөнгө көнгә был проекттар сиктәрендә 830 миллион һум файҙаланылған, тип хәбәр иттеләр республика Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәтенән.

✓ Өфөнөң Октябрь проспектындағы "Үҫмерҙәр китапханаһы" туҡталышы янында йәйәүлеләр өсөн яңы ер аҫты үткәүеле асылды. Объектты асыу тантанаһында республика етәксеһе Рөстәм Хәмитов ҡатнашты. Төҙөлөш эштәре 2012 йылдың июлендә башланды. Үткәүелдең киңлеге - алты метр, оҙонлоғо 49 метр тәшкил итә. "Дан бульвары" туҡталышы янында йәнә бер ер аҫты үткәүелен төҙөү тамамланып килә, уны сентябрҙә файҙаланыуға тапшырыу планлаштырыла.

*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

# ЕРЕҢ ҺАТҺАҢ, АУЫЛЫҢА ҺАТ...

## бер ситенә үҙең барып ултырырһың

**Бер заман кеше организмына йәшәү биреүсе көстәр - телмәр, күреү, ишетеү, аҡыл, һулыш алыу һәләттәре араһында ҡыҙыу бәхәс ҡупҡан, ти. Уларҙың һәр ҡайһыһы: "Кеше ғүмере, уның организмы өсөн иң мөһиме мин булам", - тип үҙенең мөһимлеген иҫбатларға, башҡаларҙы инҡар итергә маташа, талашып ҡырталаша икән. Улар шулай талаша-талаша, бәхәстәренең осона сыға алмаған, ахыр сиктә, үҙҙәрен бар итеүсе Аллаһы Тәғәләгә мөрәжәғәт итергә мәжбүр булған. "Һәр ҡайһығыҙ алмашлап, бер-бер артлы кеше организмын ташлап китеп ҡарағыҙ. Кемегеҙ киткәндән һуң кеше өсөн үлем ҡурҡынысы килеп тыуһа, шул көс иң мөһиме булыр", тип бойорған уларға Хаҡ Тәғәлә.**



Иң тәүҙә кешене телмәре ташлап киткән. Ул бер йылдан һуң кире әйләнеп ҡайтҡан да:

-Һеҙ бында минһеҙ нисек йәшәнегеҙ һуң? - тип һораған.

-Телһеҙҙәр нисек йәшәһә, шулай көн иттек: иркен итеп һулыш алдыҡ, донъяны күреп һөҡландыҡ, ҡоштар һайрауын тыңланыҡ, тормош хаҡында фекер йөрөттөк, хатта һинең юҡлыҡты һиҙмәнек тә, - тип яуап биргән башҡа йәшәү көстәре.

Икенсе булып күреү һәләте организмды ташлап киткән. Ул да бер йыл ситтә йөрөгәндән һуң кире ҡайтып:

-Минһеҙ бында нисек көн күрҙегеҙ? - тип һораған.

-Һуҡырҙар нисек йәшәһә, шулай көн күрҙек инде. Һулап һауаға туйманыҡ, һөйләшеп һүҙҙәр бөтмәне, таңғы тынлыҡҡа ҡолаҡ һалдыҡ, донъя, тормош хаҡында фекер йөрөттөк. Һинең юҡлыҡты һиҙмәнек тә, - тип улар берҙәм яуап ҡайтарған.

Сират ишетеү һәләтенә лә килеп еткән. Ул да бер йыл ситтә йөрөп ҡайтҡан да:

-Минһеҙ нисек көн күрҙегеҙ? - тип һораған.

-Һаңғырауҙар нисек йәшәһә, шулай йәшәнек инде. Саф һауа һуланыҡ, үҙ-ара әңгәмә ҡорҙоҡ, донъяға һөҡландыҡ, йәшәйеш хаҡында фәлсәфәүи фекерҙәр йөрөттөк. Һинең юҡлыҡты һиҙмәнек тә, - тип яуаплаған башҡалар.

Артабан кешене аҡылы ташлап сығып киткән, ти. Ул да бер йылдан һуң кире әйләнеп ҡайтҡан да, инде йолаға әүерелеп бөткән шул уҡ һорауҙы биргән:

-Һеҙ бында минһеҙ нисек йәшәнегеҙ, аңһыҙҙар?

-Бер нисек тә түгел, ҡайғы белмәй йәшәнек. Аҡылы булмаған, зиһене үҫешеп етмәгән сабый нисек көн итһә, шулай йәшәнек инде: сафтан-саф һауалар һулап кинәндек, яңы асылып килгән телебеҙ менән тәтелдәй-тәтелдәй һөйләштек, сабый күҙебеҙ менән донъяға һөҡландыҡ, әсәйебеҙҙең бишек йырын тыңланыҡ, - тип яуап биргән кешенең башҡа һәләттәре.

Шулай итеп, һуңғы сират һулыш алыу һәләтенә лә килеп еткән. Әммә ул кеше организмынан сығып та өлгөрмәгән, башҡа барлыҡ йәшәү һәләттәренең ҡото алынған. Һулыштың организмдан бер генә секундҡа сығыуы ла башҡа барлыҡ көстәрҙе кешенән ҡутарып сығарып, уларҙы ғына түгел, кешенең үҙен дә һәләк итә яҙған. Шул сағында ғына кеше организмын йәшәтеүсе көстәр бер хәҡиҡәтте аңлаған: уларҙың араһында иң мөһиме һулыш икән.

-Хөрмәтлебеҙ, батшабыҙ, зинһар, беҙҙе бер ваҡытта ла ташлама. Һинһеҙ беҙ бер минут та йәшәй алмаясаҡбыҙ, - тип күҙ йәше менән илаған ти башҡа йәшәү көстәре...

Ер һатыуға бәйле мәкәләйтемдәр хаҡында һүҙ алып барғанда йәшәү көстәре тураһындағы был риүәйәт нимәгә кәрәк булды, бында һүҙ бөтөнләй башҡа юҫыҡта бара бит, сағыштырғыһыҙ миҫал, тип тә әйтер берәү. Риүәйәттең төп фекерен үҙебеҙгә кәрәкле йүнәлешкә бороп өсөн, әйҙәгеҙ, шартлы рәүештә булһа ла, йәшәү көстәренең һәр ҡайһыһын милләттең иң мөһим билдәләре менән сағыштырып ҡарайыҡ:

Беренсенән, телмәр йәғни һөйләү һәләте - ул, әлбиттә, милләттең бар мәғлүмәте яҙылған үҙенсәлекле коды, туған теле;

Икенсенән, күреү һәләте - ул милләттең күҙе, донъяға ҡарашы, донъяны үҙенсәлекле, образлы итеп ҡабул итергә һәм һынландырырға булышлыҡ итеүсе күңел күҙе;

Өсөнсөнән, ишетеү һәләте - ул милләттең донъяның сихри тауыштарын ишеттереүсе һәм шул тауыштарҙы үҙенең күңел моңона көйләргә ярҙам итеүсе ҡолағы;

Дүртенсенән, аҡыл йәки фекер йөрөтөү һәләте - ул милләттең аңы, зиһене, идеологияһы, фәлсәфәһе;

Бишенсенән, һулыш алыу һәләте...

Башҡорт теле лексиконында "һыуҙағы балыҡтай", "һауалағы ҡоштай", "һулар һауалай" тигән төшөнсәләр бар. Ә бит төптән уйлап ҡараһаң, ошо өс төшөнсә араһынан тыуған ерҙең әһәмиәтен билдәләргә йәйе мотлаҡ рәүештә "һулар һауалай" төшөнсәһенә тап килер ине. Әйтәйек, "тыуған еребеҙ һулар һауалай кәрәк".

Тап шулай, йәғни һулыш алыу һәләте кеше организмын ташлап киткәндән һуң башҡалары ҡутарылып сығып һәләк булған кеүек, тыуған ерһеҙ тороп ҡалған милләт тә үҙенең башҡа барлыҡ билдәләрен юғалта башлай. Иң беренсе нәүбәттә милләттең тыуған ерендә туған телендә аралашыу, йола-традицияларын башҡарыу мөхите ҡыйралыш кисерә. Туған тел ҡыйралғандан һуң милләттең күреү, ишетеү, фекер йөрөтөү үҙенсәлеге лә юғала...

Тыуған ауылымда шаһит булған күренеш тап ошондай ҡурҡыныс барлығын иҫкә төшөрҙө лә инде. Дөрөҫөн әйткәндә, ауылдарыбыҙҙың ҡапҡаһы милләттәштәребеҙҙең күңеле кеүек шарран асыҡ. Быға мин үҙ күҙҙәрем менән күреп, күңелем менән тойоп, ҡолағым менән ишетеп инандым. Беҙҙең ауылдарҙа төпләнеп йәшәргә теләүселәр ҙә бихисап. Һуңғы йылдарҙа, бигерәк тә сит тарафтарҙан илебеҙгә һәм республикабыҙға мигранттар ағылғанда ундайҙарҙың һаны бигерәк күбәйҙе.

Яҡыраҡ беҙҙең Баймаҡ районы ауылдарында булған бер төркмән ҡартының алдағы йылдарҙа ошо яҡтарға килеп төпләнеп йәшәргә теләк белдереүе һәм балаларына ла ошо яҡта йәшәүҙе васыят итеп әйтергә теләүе хаҡында һөйләгәйнеләр. Элек-электән Башҡорт иле башҡаларҙы үҙенә ымһындырып торған. Килеүселәрҙе халҡыбыҙ ҡабул иткән, йәшәргә ерен бүлеп биргән, әммә улар барыһы ла динебеҙҙе, телебеҙҙе, бер һүҙ менән әйткәндә, милләтебеҙҙе ҡабул иткән. Еребеҙҙең ожмахтай матур булыуы, башҡорт йәшәйешенең демократик принциптарға ҡоролоуы элек тә, хәҙер ҙә бик күптәрҙе ымһындырған һәм ымһындыра, тик элеккенән айырмалы рәүештә, хәҙер килеүселәр ауылдарыбыҙға үҙенең "уставы" менән үтеп инеп, үҙ милли йолалары менән йәшәргә теләй. Әгәр ҙә быға юл ҡуйһаҡ, һуңғы сиктә башҡорт милли мөхите зыян күрәсәк.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

**(Дауамы. Аҙағы киләһе һанда.)**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Өфөнөң Рус дәүләт академия драма театрында баш ҡаланың белем биреү учреждениелары хеҙмәткәрҙәре кәңәшмәһе булып үтте. Уҡытыусылар кәңәшмәһенең төп темаһы - заманса социаль-иҡтисади шарттарҙа ҡаланың мәғариф системаһы менән идара итеүҙең инновацион механизмдары. Кәңәшмә яңы форматта үтте. Унда 15 мәғлүмәт майҙансығы эшләне. Пленар ултырышта тармаҡ мәсьәләләренә һәм заманса идара итеү алымдарына арналған докладтар уҡып ишеттерелде. Фекер алышыу майҙансыҡтары форматында төп, мәктәпкәсә һәм өҫтәмә белем биреү мәсьәләләре тикшерелде.

✓Уңыш йыйыу өсөн уңайлы булмаған һауа шарттарына ҡарамаҫтан, Башҡортостан аграрийҙары бер миллион тонна иген һуғып алды. Башлыса өс миллион тоннанан ашыу иген йыйып алырға планлаштырылһа ла, яҙ аҙағында һәм йәй уртаһына тиклем 50 көн ямғыр яуамауы пландарға үҙгәрештәр индерҙе. Әле сәсеү майҙандарының 35 процентында иген урып йыйылған. Ҡалған майҙанда ла урып йыйыу эшен дауам итеп, барлығы 2 миллион 400 мең тонна күләмендә уңыш йыйып алырға ниәт итә ауыл хужалығы эшсәндәре. Республикаға был иген етәсәк, ти белгестәр: орлоҡҡа - яҡынса 500 мең тонна, фураж өсөн - бер миллион тонна, сәнәғәт эшкәртеүенә 80 мең тонна кәрәк. Ҡалғаны он, ярмалар өсөн эшкәртеләсәк һәм һатыуға сығарыласаҡ.

✓Өфөнән йәштәр делегацияһы Төркиәгә барырға йыйына. MULTI халыҡ-ара программа сиктәрендә өфөләләр визит менән Мерсин ҡалаһына барасаҡ. 10 көн эсендә MULTI программаһында ҡатнашыусылар Мерсин ҡалаһының ғына түгел, Тарсус ҡалаһының иҫтәлекле урындары менән танышасаҡ. Был программа Өфөлә 2009 йылдан башлап тормошҡа ашырыла һәм биш ил вәкилдәрен берләштерә. Улар - Рәсәй, Төркиә, Германия, Япония һәм Ҡытай. Программа йәштәргә сит илдәрҙән килгән тиҫтерҙәрен өйҙәрендә ҡабул итеп, аҙаҡ үҙҙәрендә ҡунаҡ булған кешеләргә барыу мөмкинлеген бирә.

✓Өфөлә 31 августа өсөнсө "Һөт иле-2013" Бөтә Рәсәй фестивале үтә. Йола буйынса, ул Ленин исемендәге майҙанда ойошторола. БР Ауыл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, малсылыҡ фермаһы, һөт кафеһы, сәләмәтлек һәм матурлыҡ академияһынан тыш, байрамда яңы майҙансыҡтар ҙа эшләйәсәк.

БЕЛЕМ УСАҒЫ

# УНИВЕРСИТЕТ ЙӨҘӨН ҮҘГӘРТӘ



**Быйыл 22 майҙа Мәскәүҙә ШОС (Шанхай хеҙмәттәшлеге ойошмаһы) Университетының База вуздары ректорҙары советында Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетын ошо составҡа индереү тураһында ҡарар ҡабул ителгәйне.**

Алда торған оло саралар һәм УШОС вуздары ректорҙарының советын лайыҡлы үткәреү алдынан был юғары уҡыу йорто хәҙер үҙенең йөҙөн генә түгел, биналар алдындағы майҙансығын да тулыһынса үҙгәртәсәк. Ошо көндәрҙә Өфө ҡалаһы округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов вузда алып барылған ремонт һәм төҙөлөш эштәре менән шәхсән танышты.

БДПУ-ны УШОС составына индереү тураһындағы ҡарар бөгөн вуздың төбәк буйынса алдынғы фәнни-мәғариф һәм инновацион үҙәк булыуына бәйле. Сөнки бында педагогика һәм психология буйынса юғары мәктәп уҡытыусылары әҙерләнә. Бынан тыш, юғары уҡыу йорттарының һөҙөмтәлелеген асыҡлау буйынса РФ Мәғариф һәм фән министрлығының былтыр үткәргән мониторингында БДПУ иң яҡшы 12 вуз иҫәбенә инә, ә Волга буйы федераль округында ул - берҙән-бер һөҙөмтәле уҡыу йорто. Яңы хеҙмәттәшлек БДПУ-ны киң халыҡ-ара аренала таныуҙарын раҫлай һәм төбәктең мәғариф системаһын глобаль үҫтереүгә ярҙам итә.

Әйткәндәй, бөгөн УШОС составына 75 вуз инә. Шуларҙың 23-ө - Рәсәй, 13-ө - Ҡаҙағстан, 20-һе - Ҡытай, 9-ы - Ҡырғыҙстан, 10-ы Тажикстан юғары уҡыу йорттары. ШОС Университеттары сиктәрендә кадрҙар әҙерләү төбәкте өйрәнеү, энергетика, иҡтисад, экология, нанотехнологиялар, IT-технологиялар, педагогика һәм ҡайһы бер башҡа йүнәлештәр буйынса алып барыласаҡ. Ошо программа буйынса белем алыусы талип артабан белемен партнер-вузда дауам итә аласаҡ һәм халыҡ-ара стандарттағы ике дипломға эйә буласаҡ.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ӨФӨБӨҘ - ЛИДЕРҘАР РӘТЕНДӘ

**"Жилфонд" күсемһеҙ милек агентлығының августа үткәргән мониторингында Өфө Рәсәйҙең иң күп төҙөгән төүге өс ҡалаһы иҫәбенә инген.**

Беренсе урында 100 мең кешегә 67 яңы төҙөлөш объекты менән Новосибирск торһа, икенсе урында шул уҡ халыҡ иҫәбенә 50 төҙөлөш тура килгән Силәбе. Өсөнсө урынды иһә Красноярск менән Өфө бүлешә. Уларҙа 100 мең кешегә 38 төҙөлөш объекты тура килә. Яңы төҙөлгән объекттар буйынса баш ҡалабыҙ Пермь (34), Екатеринбург (31), Омск (29), Мәскәү (26), Һамар (25), Ҡаҙан (24), Санкт-Петербург (21), Дондағы Ростов (20), Волгоград (11), Түбәнге Новгород (8) ҡалаларын уҙып киткән.

Бөгөн Өфөлә торлаҡ төҙөү тармағы үсеш кисерә. Былтыр Башҡортостандың баш ҡалаһында 770 мең квадрат метр торлаҡ төҙөлһә, быйыл, иҡтисад имен үсешкәндә, был күләмдең 815 мең квадрат метрғаса артыуы көҙаллана. Ә инде 2015 йылға ыңғай фараз - 925 мең квадрат метр. Был һандың миллион сиген дә үтеү ихтималлығы бар.

Күп фатирлы йорттар менән бер рәттән, шәхси төҙөлөш күләменең дә артыуы көҙаллана. Шулай уҡ социаль торлаҡ төҙөлөшө лә көҙ уңынан ситтә ҡалмаясаҡ.

# НЕМЕЦ БӨХТӘЛЕГЕ МЕНӘН...

**Ленин урамында яңы технология буйынса канализация коллекторын яңыртыу дауам итә. Әлеге ваҡытта эштәр Революцион урамынан Ибраһимов бульварына тиклем башҡарыла.**

Баш ҡаланың 1936 йылда уҡ төҙөлгән һәм бөгөнгә 70 процентҡа туҙған беренсе коллекторын тергеҙеү эштәре быйыл яҙғыһын уҡ башланып, ошо арауыҡта Киров - Достоевский, Достоевский - Революцион, Киров - Чернышевский урамдарында атҡарылды.

Ленин урамындағы эштәрҙе Екатеринбург ҡалаһынан килгән компания немец партнерҙары менән берлектә тормошҡа ашыра. Технологияның үҙенсәлеге шунан ғибәрәт: иҫке торбалар эсенә импорт материалдар ярҙамында яңы торба үрелә. Бында асфальтты асып тороу ҙа кәрәкмәй. Икенсе яҡтан, немец бөхтәлеге бында ла үҙен һиҙҙертә - ремонт барған участкалар махсус ҡоймалар менән уратыла, уларға иҫкәртеүсе билдәләр яҙыла, ваҡытлыса тиҙлекте сикләү ҡуйыла, ремонт зонаһында тәртип һәм таҙалыҡ булдырыла.Бындай тәжрибә күпселек Европа илдәрендә ҡулланыла һәм киләсәктә Өфөлә лә киң файҙаланыласаҡ.

# БЮДЖЕТ ХӘСТӘРҘӘРЕ

**Йыл башынан алып ҡала округы хакимиәте хеҙмәткәрҙәре һаны 100 кешегә, йәғни, район хакимиәттәрен дә индереп, муниципаль хеҙмәткәрҙәр һаны 10 процентҡа кәмегән. Был хаҡта ҡала бюджетының ярты йылға үтәлешен тикшереү буйынса оператив кәңәшмәлә белдерелде.**

Йылдың икенсе яртыһында бюджеттың муниципаль милекте һәм ер участкаларына муниципаль милек хоҡуғын тормошҡа ашырыу һөҙөмтәһендә һиҙелерлек тулыланыуы көтөлә. Быға асыҡ миҫал булып Октябрь проспектындағы - "Курсаҡ театры" районындағы элек трамвайҙар боролған ҡулса урынын һатыу тора. Был участкаһың аукциондағы башланғыс хаҡы 152 миллион һум булһа, ул 305 миллион һумға һатылған. Был участканың үҙ тарихы бар һәм ул бик оҙайлы. Заманында ул бик арзанға - ни бары 9 миллион һумға һатылған һәм ҡала бюджетына һиҙелерлек зыян килтерелгән. Ҡала хакимиәтенең яңы командаһы ошо ерҙе кире ҡайтара һәм уның менән спекуляцияны туҡтата алды.

Был ҡала бюджетын тулыландырыу булһа ла, аныҡ эштәрҙә инде социаль программаларҙы тормошҡа ашырыуҙа сағылыш табасаҡ. Ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов белдереүенсә, файҙаланылмаған һәм үҙләштерелмәгән ер участкаларын артабан да кире муниципаль милеккә ҡайтарыу буйынса эшмәкәрлек дауам итәсәк. Ҡала хакимиәте уларҙы ҡуртымға биреү йәки һатыу юлы аша ҡала бюджетын тулыландырасаҡ.

# КИЛЕР БЫУЫНДАРҒА МИРАҪ

**Бөгөн башҡарылған эштәрҙең ҡайһы берҙәре буйынса йәнебеҙ көйөп, ябай халыҡ өсөнмө ни инде улар, тип ҡәнәғәтһеҙлек белдерһәк тә, килер быуындар хаҡына, тип үҙебеҙҙе тынысландырабыҙ. Сөнки бөгөнгө эшмәкәрлек - тап киләсәк быуындарҙы күҙаллап, уларға йүнәлеш тота.**

Өфөнө төҙөкләндереү, баш ҡаланың архитектура йөҙөн яҡшыртыу, юлдарҙы һәм урамдарҙы ремонтлау, транспорт инфраструктураһын булдырыу, биналарҙың фасадын реконструкциялау йәһәтенән, ысынлап та, ҙур эштәр башҡарыла. Күптән түгел "Конгресс-холл" ДУП-һы, БДУ, "Кеско" ҡунаҡханаһы урынлашасаҡ территорияның төҙөклөгө мәсьәләләре буйынса күсмә кәңәшмә үтте. Ҡала хакимиәте башлығы һыҙыҡ өҫтөнә алыуынса, бөтөн эшмәкәрлек юғары кимәлдә, заманса төҙөлөш материалдары ҡулланып башҡарылырға тейеш. Үҙ эсенә бер нисә объектты алған был комплекстың 2014 йылдың сентябрендә яңы рәүештә файҙаланыуға тапшырылыуы көҙаллана.

# ТАУЫШҺЫҘ ТРАМВАЙ

**Әлеге ваҡытта Р. Зорге урамындағы трамвай юлдарын реконструкциялау бара. Яңы технологиялар ҡулланып һалынған юлдарҙан артабан трамвайҙар тауышһыҙ ғына елдерәсәк, ул ғына ла түгел, трамвай юлын киҫеп сыҡҡанда башҡа автотранспортҡа тиҙлеген кәметергә тура килмәйәсәк.**

Октябрь проспекты һәм Һ. Дәүләтшина бульвары араһындағы Володарский майҙансығында һәм Ульяновтар урамындағы яңы юлдарҙы төрлө төр транспорт хужалары һынап ҡараны ла инде. Тәьҫораттарҙың ыңғай булыуынан сығып, артабан да яңы технологиялар ҡулланып, трамвай юлдарын модернизациялау дауам итәсәк. Бынан тыш, Европаның реконструкция һәм үҫеш банкы инициативаһы менән Евросоюздың ҡатнашыусы-илдәренең грантын йәлеп итеү иҫәбенә ете вариант маршрут буйынса мониторинг һәм проект экспертизаһы үткәрелә. Был проекттың маҡсаты - ҡаланың көньяҡ һәм төньяҡ өлөшөн трамвай юлдары менән тоташтырыу, Октябрь проспектын автотранспорт ағымынан бер аҙ бушатыу.

# ЙОРТ ТУЙЛАЯСАҠТАР

**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов Интернациональ урамында йәшәүселәр менән осрашты.**

Ике ҡатлы 26-сы, 38-се, 40-сы йорттар уҙған быуаттың 40-сы йылдарында төҙөлә һәм бөгөн улар авария хәлендә. Бынан тыш, йорттарҙан 40 метр самаһы алыҫлыҡтан ғына тимер юлының үтеүе лә мәсьәләне ҡатмарлаштыра. Халыҡ бына тиҫтә йылдар инде ҡасан яңы йорттарға күсеүҙәрен көтә. Ирек Ишмөхәмәт улының шәхсән килеп, граждандар менән осрашыуы уларҙың күңеленә, ниһайәт, өмөт орлоҡтары һалғандыр. Сөнки ҡала башлығы 2014 йылдан был йүнәлештә эш башланасағын һәм авария торошондағы йорттарҙа йәшәүселәр баш ҡаланың Калинин һәм Орджоникидзе райондарында төҙөлгән яңы туғыҙ ҡатлы йорттарға күсереләсәген вәғәҙә итте. Ә әлегә ямғырҙар һәм һалҡындар ғәҙәттән тыш хәл тыуҙырмаһын өсөн авария хәлендәге йорттарға ремонт эшләнәсәк. Әйткәндәй, бөгөн баш ҡалала барлығы 500 самаһы иҫке йорт иҫәплә.

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡорт дәүләт медицина университеты проректоры, дөйөм хирургия кафедраһы мөдире, профессор Мәжит Нартайлаков республиканың төньяҡ-көнсығыш районындарына эшләгән табиптар өсөн оҫталыҡ дәресе үткәрҙе. Медицина хеҙмәткәрҙәренең осрашыуы Мәсетле районының Оло Ыҡтамаҡ ауылында үтте. Әлеге ваҡытта Дыуан районының Мәсәгүт ауылында яңы корпус асылырға тора, унда травматология һәм перинаталь үҙәктәр, ҡан таныштыру бүлеге урынлашасаҡ. Үҙәк заманса ҡорамалдар менән йыһазландырыласаҡ. Яңы корпус асылғандан һуң, Мәсәгүт үҙәк район дауаханаһы медицина университетының клиник базаһына әйләнәсәк.

✓Рәсәй йыйылма командалары өсөн спортсылар әҙерләү менән шөғөлләнгән спорт ойошмаларына адреслы финанс ярҙамы күрһәтеү маҡсатында йыл аҙағынаса республика ҡаҙнаһына федераль бюджеттан 4 миллион 623 мең һум аҡса күсереләсәк. Тейешле бойороҡҡа Хөкүмәт рәйесе Дмитрий Медведев ҡул ҡуйҙы. Был маҡсаттарға федераль үҙәктән Рәсәй төбәктәренә йәмғеһе 360 миллион һум аҡса бүленә. Финанс ярҙамы Олимпия һәм Паралимпия уйындарына индерелгән спорт төрҙәре буйынса күнекмәләр, Рәсәй беренселектәрен үткәреү, физик культура һәм спорт өлкәһендә эшләгән белгестәрҙең квалификацияһын күтәреү, спорт ҡорамалдары һәм инвентары һатып алыу буйынса төбәктәрҙең сығымдарын ҡушып финанслау өсөн ҡаралған.

✓31 августа Өфөнөң Затон биҫтәһендә II мәктәп велопарады үтә. Балалар "Тулҡын" паркынан алып "Йылғасы" стадионына тиклем ҙур колонналар менән үтәсәк. Сарала белем биреү учреждениелары уҡыусылары, шулай уҡ барлыҡ теләүселәр ҡатнаша ала, тип хәбәр иттеләр Өфө ҡалаһы Ленин районы хакимиәтенең мәғлүмәт-аналитика бүлегенән. Башлана - 12.00 сәғәттә.

✓14 сентябрҙә Өфөлә халыҡ-ара рок-фестивале үтә. Музыка байрамы open air форматында Ленин исемендәге майҙанда ойоштороло, тип хәбәр иттеләр БР Мәҙәниәт министрлығынан. Рок-концертта "Ария", "Смысловые Галлюцинации", "7Б", "Кнsзz ", "Animal Джаz", "Нервы", "Слот", "Год Змеи" кеүек билдәле төркөмдәр сығыш яһаясаҡ. Концертҡа инеү бушлай. Ойоштороусылар билдәләүенсә, сарала 50 меңгә яҡын тамашасының ҡатнашыуы көтөлә.

*АФАРИН!*

# ИКЕНСЕ УРЫНДАЛАР...

## әммә төшөп ҡалғандарҙан түгел!

**14-19 августа Канаданың Винздор ҡалаһында XXXXVII Йәйге халыҡ-ара балалар уйындары үтте. Унда 5 ҡитғаның 32 иленән, 84 ҡалаһынан балалар ҡатнашты. Өфө ҡалаһы спортсылары данын ҡыҙҙар волейбол командаһы һәм еңел атлетика менән шөғөлләнеүселәр - барлығы 11 бала - яҡланы.**



Ә инде делегацияны етәкләүсе өлкәндәр - Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Рәмил Дилмөхәмәтов менән хакимиәттең Физик культура һәм спорт буйынса комитеты рәйесе Сергей Степанов, уйындарҙы үткәреүсе ҡала вәкилдәре булараҡ, "ғаилә" ағзаларының конференцияһында ҡатнашты. КМДИ Президенты Торстен Раш Комитеттың һуңғы йылдарҙағы эшмәкәрлеге менән таныштырғандан һуң, Уйындарҙы үҫтереү йәһәтенән алдағы йылдарҙа ҡышҡы уйындарға иғтибар бүлеү зарурлығын һыҙыҡ өҫтөнә алды һәм миҫал итеп Өфөлә үткән IV Ҡышҡы халыҡ-ара балалар уйындарын килтерҙе. Башҡортостандың баш ҡалаһындағы уйындарҙың, Рәсәй Федерацияһында беренсе тапҡыр уҙғарылыуға ҡарамаҫтан, юғары ойошҡанлығы һәм ошо системаға яңы ҡалаларҙы, тәү сиратта, Рәсәй ҡалаларын, йәлеп итеүе менән айырылып тороуын билдәләне ул.

Комитеттың яңы етәкселеген һайлау ҙа Рәсәй тарихында яңы бит булды һәм был тарихты яҙыуҙы тап Өфө делегацияһы башланы. Комитеттың яңы ағзалдары йәшерен тауыш биреү юлы менән һайлана һәм уға ни бары 16 кеше инә. Һәҙәмтәлә, Наганолағы Олимпия уйындары ҡатнашыусыһы, Өфөлә уҙған МДИ-ның баш судьяһы Андрей Кривошеев етерлек күләмдә тауыш йыйып, Комитет составына инде. Шулай итеп, хәҙер МДИ Комитетында беренсе тапҡыр Рәсәй Федерацияһы вәкиле лә буласаҡ.

Уйындарға килгәндә, ул йәш спортсыларыбыҙ өсөн унышлы булды, тиергә мөмкин. Сөнки еңел атлетика буйынса Снежана Трофимова һәм волейболсыларыбыҙ ҙа көмөш миҙал яуланы.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# ТАШҠЫНДАН ҺАҠЛАР ДАМБА

**Көтмәгәндә-уйламағанда тәбиғәт үҙенең көсҡеүәтен күрһәтеп, кешене һынауҙар алдына ҡуйып ҡына тора. Быйыл яҙғы ташҡын ваҡытында республиканың бер нисә районында халыҡ төрлө кимәлдә ҡаза күрһә, күптән түгел генә көслө ямғырҙар Әбйәлил районы халҡына ла ҙур фажиғә булып әүерелде.**

Ошо ваҡиғалар фонында, Өфөнө һыу баҫмай, ул тау башында ултыра, тиһәк тә, баш ҡаланың төрлө райондарында ла үҙенең "нескә" урындары бар. Бөгөн 100 мең кеше йәшәгән Һупайлы биҫтәһе лә шундай урындарҙың береһе була торғайны. Торғайны, тибеҙ, сөнки киләһе йылдан башлап был биҫтәне яңы төҙөлгән ташҡынға ҡаршы дамба ышаныслы һаҡлаясаҡ. Был объект бөгөн иң ҙур инвестицион проекттарҙың береһе булып тора. 2007-2009 йылдарҙа уның беренсе сираты төҙөлһә, әлеге ваҡытта 3,52 километрға һуҙылған икенсе сираты төҙөлә. Проект гидротехник ҡоролманы төҙөүҙе генә күҙалламай, шулай уҡ дамба өҫтөнән үтәсәк, тротуарҙары, йылғаға төшөү урындары һәм күҙәтеү майҙансыҡтары ла булған урамды ла үҙ эсенә ала.

# ОЛИМПИАДАҒА, ЭШЛӘРГӘ!

**Сочиҙа 2014 йылда үтәсәк XXII Ҡышҡы Олимпия уйындарын һәм XI Паралимпия уйындарын хеҙмәтләндереү өсөн ваҡытлыса эшкә 8 мең кеше талап ителә. Ошо көндәрҙә баш ҡалала кандидаттарҙы һайлау буйынса вакансиялар йәрминкәһе үтте. Был сара "Сочи 2014 - һинең эшең" экспедицияһы сиктәрендә уҙғарылды.**

"Сочи 2014 - һинең эшең" экспедицияһы - оҙонлоғо 8 мең километр булған маршрут. Вакансиялар йәрминкәһе һәм саралар илдең 20-нән ашыу ҡалаһында үтәсәк. Ул 10 августа Сочиҙың Диңгеҙ портынан старт алып, артабан Краснодар-Ростов-Ставрополь-Волгоград-Һарытау-Тольятти-Һамар-Өфө-Ижевск-Ҡазан-Чебоксар-Түбәнге Новгород-Ярославль-Тверь-Тула-Орел-Курск-Мәскәү маршруты буйынса уҙасаҡ. Һәр ҡалала вакансиялар йәрминкәһе ойоштороласаҡ.

*ҺОРАУ - ЯУАП*

# ПЕНСИЯ АРТАМЫ, ӘЛЛӘ ХАҠТАР ҺӘМ ТАРИФТАРМЫ?

**1 августан эшләп йөрөүсе пенсионерҙарҙың пенсияны ҡайтанан иҫәпләнә. Ә ундайҙар илебеҙҙә 14 миллион самаһы - хеҙмәт пенсияһы алыусының һәр өсөнсөһө тип әйтерлек. Ҡайтанан иҫәпләүҙән баш тартыуҙың файҙаһы бармы, пенсия тәғәйенләү өсөн документтар туплауҙа кем ярҙам итер - РФ Пенсия фонды белгестәре ошо хаҡта аңлатма бирҙе.**

### Эшләгән һайын күберәк

**Рәсәй Пенсия фондында миңә ҡабаттан иҫәпләүҙән баш тартырға тәҡдим иттеләр, ә эшләп йөрөүсе пенсионер булараҡ, ул йыл һайын башҡарыла ине. Миңә бының файҙаһы бармы?**

- Ҡабаттан иҫәпләүҙән баш тартыу - һеҙҙең теләк буйынса уны икенсе датаға күсереү генә ул. Мәҫәлән, һеҙгә ҡабатлап иҫәпләүҙең ниндәйҙер сәбәптәр буйынса августа башҡарылыуы оҡшамай икән, был хаҡта Пенсия фондына ғариза яҙа алаһығыҙ. Шул уҡ ваҡытта хеҙмәт пенсияһы тәғәйенләнгән көндән йәки бынан алдағы корректировка мәленән теүәл 12 ай үткәс, ҡабатлап иҫәпләү хаҡында ғариза биреү хоҡуғығыҙ һаҡланып ҡала. Ҡабаттан иҫәпләү һөҙөмтәһендә пенсиягыҙ күпмегә артасаҡ - был һәр кемдеке үҙенсә. Уның күләме эшләп йөрөүсе пенсионерҙың эш хаҡына ғына түгел, йәшенә лә бәйле бит. Пенсияла булып та, ни тиклем оҙағыраҡ эшләһәгеҙ, түләнгән иғнәләр суммаһына бүленәсәк йылдар һаны шул тиклем аҙыраҡ була. Һөҙөмтәлә пенсияға өҫтәмә лә күберәк тейә.

### Һәр кемдең шәхси эше

**Тиҙҙән пенсияға сығам. Рәсәй Пенсия фондында мин уларға алып килергә тейешле документтарҙың исемлеген тотторҙолар. Был ҡағыҙҙарҙы Пенсия фонды үҙе юллап алырға тейеш түгелме ни?**

- Хеҙмәт пенсияһы тәғәйенләү өсөн документтарҙың күбеһе шәхси "архивта" һаҡлана. Закон буйынса буласаҡ пенсионер уларҙы, шулай уҡ стажды раҫлаусы документтарҙы Пенсия фондына үҙе алып килә. Кәрәк тип табылған хәлдә, Пенсия фонды хеҙмәткәрҙәре дәүләт архивтарына запрос эшләй һәм элекке эш биреүселәргә юллау ҡағыҙҙары ебәреүҙә ярҙам күрһәтә ала. Рәсәй Пенсия фонды шулай уҡ ҡайһы бер власть органдарына ла кәрәкле документтар һорап мөрәжәғәт итә. Мәҫәлән, эшһеҙлек буйынса пособие алған осраҡтарҙа йыш ҡына мәшғүллек хеҙмәтенән белешмәләр һорап алына.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА** әҙерләне.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Юл япрағы

*Баш әйләнеп яфалаһа, 1 стакан ҡайнар һыуға 1 ҡалаҡ ваҡланған юл япрағын һалырға, ярты сәғәт тәнәтергә һәм 1 балғалаҡ бал өҫтәргә лә бер тында эсергә. Был дауа фәҡәт йоҡлар алдынан башҡарыла. Ун мәртәбә эшләгәндән һуң, баш әйләнеүе бөтәр. Кәрәкһә, дауаны тағы ҡабатларға була.

### Аҙ ҡанлылыҡтан

*Организмға тимер етмәһә, алма һуты ярҙам итер. Һутын һығып алырға һәм төҫө үҙгәргәнсе стаканда 2-3 сәғәт тоторға, шунан эсергә. Йәки кистән алманы сәнскес менән тишеп ҡуйырға ла иртән ашарға. Былай эшләнһә, тимер яҡшыраҡ үҙләштерелә.

### Арыш икмәге

*Баш һәм быуындар ауыртҡанда, бил ыҙалатҡанда ярты литр һыуға 3 ҡалаҡ тоҙ һалырға, уға арыш икмәгенең табан өләшенән бер нисә киҫәк алып һалабыҙ, изәбеҙ һәм һығып алып, ауыртҡан ергә ябып, целлофан менән ҡаплап, дебет шәл менән бәйләйбеҙ. 40 минут мотлаҡ ятып торорға кәрәк булыр.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

### Кендек бүҫере

*Еүеш ҡыҙыл балсыҡтан "ҡоймаҡ" эшләп, уны бер ҡат марляға урарға, тән температураһына тиклем йылытырға һәм кендеккә һалырға. Балсыҡтың өҫтөнә полиэтилен ҡаплап, пластырь менән нығытырға. Балсыҡ кибә башлаһа, иплән кенә уны алырға, ә икенсе көнөнә процедураны ҡабатларға.

*Умыртҡа бағанаһы дискыһы бүҫеренә 6х15 см яҫылыҡтағы 1х3 см ҡалынлығындағы йылҡы майы һалырға була. Бының өсөн майҙы целлофан киҫәгенә төрөп, ауыртҡан урынға ҡуйырға, бинт менән бәйләргә, өс тәүлеккә ҡалдырырға. Бер нәмә лә күтәрмәскә, әйелеп эшләмәскә, киҫкен хәрәкәттәр яһамаҫҡа. Бер тәүлектән хәл яҡшыра.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

*БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ*

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ... дауалау һәм ҡурсалау магияһы

## Оло кешегә ҡот ҡойоу

1. Кеше ҡурҡһа, уның йөрәге урынынан күсә, ҡото оса. Ҡот осҡанда кеше ҡалтырап тора икән. Уға ҡыу төҫө инә. Был кешегә һылау, йөрәк ултыртыу ҙа ярҙам итмәй. Шуға уға ҡот ҡоялар.

2. Ҡотто аҡ ҡурғаштан, бәғзеләре балауыҙҙан ҡоя. Аҡ ҡурғашты майға һалып иретәһең дә, ҡурҡҡан кешенең башына аҡ яулыҡ ябып, баш өҫтөндә ҡурғашты һыуға һалаһың. Ҡурғаш шыжлап төшә. Төшкәндә төрлө һүрәткә инә. Кеше нимәнән ҡурҡһа, шул һүрәткә инә, тиҙәр. Әгәр аҙһа, тиҙ генә ҡот төшмәй. Уны бер нисә тапҡыр ҡоялар. Төшкән ҡурғашты ҡот төксаһына, ҡот һауытына һалып, ауырыуҙың муйынына тағып ҡуялар, һыуы менән бит-ҡулын йыуалар, һыуҙы әҙерәк эсһәң дә ярай. Ҡот ҡойоусыға хәйерен бирәләр. Ҡот ҡойғанда әпсенен дә әйтәләр.

**Ҡотто муйынға тағыу.** Ҡурғашты ҡот сүмесе менән иретәләр, ҡайнағас, һыуыҡ һыуға һалалар. Шунан уны бер ҡун нәмәгә тегеп, төксай һымаҡ итеп муйынға таҡҡандар.

**Ҡот һыуын эсереү.** Ҡот ҡойған һыу бик файҙалы. Шуны эсереп тә имләйһең. Күҙгә, биткә һөртәһең, һөрткәндә ошо әпсенде лә әйтәләр:

*Имен бир, йүнен бир, иҫәнлеген бир.*
*Елдән килһәң, елгә кит!*
*Һыуҙан килһәң, һыуға кит!*
*Ҡайҙан килһәң, шунда кит!*
*Тфү, тфү, тфү!*

**Ҡот осоуҙан өшкөрөү.** Ҡурғашты иретәләр, сынаяҡ ташын баш түбәһенә ултырталар, шунда ҡайнаған ҡурғашты ҡоялар. Нәмәнән ҡурҡһа, шул һүрәт төшә, ти. Һүрәтенә ҡарап өшкөрәләр.

**Ҡот саҡырыу.** 1. Эттән йә ҡоштан ҡурҡһа, кешенең ҡото оса. Йоҡлағанда һиҫкәнә, һаташа. Ҡот ҡойҙоралар. Ҡурғаш ирегәс, ҡот табаҡтағы һыуға йәнлек йә кеше булып төшә. Эттән ҡурҡһа, эт кеүегерәк, кешенән ҡурҡһа, кеше кеүегерәк була, нимәнән ҡурҡһа, шул төшә. Һыуынан шуның һыуы менән йыуындыралар ҙа, шул ҡурғашты муйынына тағып ҡуялар. Ҡотто өс ҡабат ҡоялар һәм: "Котом, кил, ҡотом, кил!" - тип, яулыҡ болғап, саҡыралар.

2. Ҡотто ҡойорға ҡурғаш кәрәк. Хәҙер ҡурғаш тәңкәләр юҡ инде. Һыуҙы табаҡҡа ҡойоп, ҡурғашты иретеп, сүмес менән шул һыуыҡ һыуға һалаһың. Баланың йөрәк формаһы төшкәнсе һыуға ҡояһың. Баланың ҡотон таҫтамал тотоп, ҡурғаш ирегәнсе:

*Кил, ҡотом, кил, ҡотом,*
*Таҙрәнән сыҡһаң, тәҙрәнән кил,*
*Ишектән сыҡһаң, ишектән кил,*
*Төнлөктән сыҡһаң, төнлөктән кил,*
*Бына Вәзимдең ҡото осҡан,*
*Ҡото, кил, ҡото, кил! -*

тип саҡыраһың. Артабан "Көлһоуалла" уҡып, һыуға ҡотто һалаһың. Шул ҡурғаш бәләкәй генә йөп-йөмро, ыҫпай булып, йөрәккә оҡшап төшә.

3. Ҡото ныҡ осһа, ҡурғаш бер ҙә йыйыла алмай, сәселеп тик тора. Һәйбәт булһа, килешһә, ыҫпай, йөп-йөмро булып төшә. Ҡот һыуын әҙерәк эсерәһең дә түгәһең.

**Ҡот ҡойғанда таң һыуы.** Ҡурғашты сүмескә һалып иретәләр. Элгәре ҡойоп эшләнгән тимер сүмес була торғайны, уны мунса сүмесе тип йөрөтәләр ине. Шуға таң һыуын алып, ирегән ҡурғашты һалып ебәрәләр. Ҡурҡып ауырыған кешенең ҡото эттән ҡурҡһа, эт булып, ҡоштан ҡурҡһа, ҡош булып, кешенән ҡурҡһа, кеше сифатлы булып төшә. Ә ҡото төшмәһә, килешмәне, ти торғайнылар. Ҡот төшмәһә, тәҙрәгә килеп: "Котом, кил, ҡотом, кил!"-тип саҡыралар ине. Ҡот йөп-йөмро тәңкә кеүек булып төшһә, бер ерендә тишеге лә ҡалһа, уны шул тишегенән еп менән ауырыу терелгәнсе муйынына тағып ҡуялар ине.

*Ҡот әпсене. Кер, ҡотом, кер, ҡотом,*
*Тәҙрәнән сыҡһаң, тәҙрәнән кер.*
*Ишектән сыҡһаң, ишектән кер.*
*Төнлөктән сыҡһаң, төнлөктән кер,*
*Кер, ҡотом, кер, ҡотом!*

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**

*ҺАБАҠТАР*

# ҠЫҘҘАР ЙЫЙНАҠ БУЛҒАС...

## егеттәр тыйнаҡ булды



**Мин Баймаҡ районының Буранбай ауылында тыуып үҫтем. Беҙ үҫкән саҡта ауылдарҙа ысын мәғәнәһендәге тормош менән йәшәгәнбеҙ кеүек тойола хәҙер. Кешеләр ҙә ихласыраҡ, улар араһындағы мөнәсәбәт тә эскерһеҙерәк, тәбиғиерәк булған. Хәҙер инде ул саҡтарҙы һағынып иҫкә алырға ғына ҡалды. Алыҫта тороп ҡалған бала, үҫмер саҡ хәтирәләренән бер сәхифә бәйән итмәксемен.**

Элек ауыл урамы йәм-йәшеллек менән ҡапланып, өй тирәһендә кейеҙҙәй тығыҙ, сабып алмалы бәпкә үләне үҫә торғайны. Ауылыбыҙҙа бер-ике кешелә генә сепарат булғанлыҡтан, кис беҙҙең өй янында һөт айыртырға сират теҙелә торғайны. Ошо мәлдә мин өй артындағы эскәмйәгә патефон сығарып ултыртам да, пластинка яңғыратып ҡуям. Фәриҙә Ҡудашеваның "Тауҙар юлы", "Агиҙел ҡаты аға", "Һин ҡайтманың", Хәбир Ғәлимовтың "Ҡолой кантон", "Ғайса" йырҙарын айырыуса яратып тыңлай инек. Йыр тауышы өй соланындағы сепарат гөүелдәүенә ҡушылып, үҙенсәлекле симфония барлыҡҡа килтерә һымаҡ ине.

Илленсе йылдарҙа беҙ ун-ун биш йәшлек үҫмерҙәр генә булһаҡ та, колхозға бесән сабырға сыға торғайныҡ. Звено етәксеһе вазифаһында бер өлкән апай йә еңгәй, ҡалғандарыбыҙ - йәш ҡыҙҙар. Әгәр ҙә норманы үтәһәк, беҙгә көндәлек ризыҡтан тыш, өҫтәмә ит, ҡымыҙ һәм плитәле ҡытай сәйе эләгә. Бар эште лә ҡул менән башҡарабыҙ. Хеҙмәт көнөбөҙ таң менән тороп, ҡояш ҡалҡҡансы, ысыҡ һирпелдереп бер һыуһын бесән сабып килеү менән башланып китә. Тәүҙә сабабыҙ, унан һуң кипкән бакуйҙарҙы күтәремләп сығып, күбәләйбеҙ, шунан егеттәр бригаданың аты менән беҙгә күбә тарттырып биргәс, кәбәнселәр бригадаһы менән бергә кәбән ҡоябыҙ. Ошо рәүешле звенолар араһында ярыш сәме ҡыҙғандан-ҡыҙа бара. Барыбыҙ ҙа еңеп сығырға тырышабыҙ. Шуның өсөн дә ауылға ҡайтып тормайбыҙ, ҡыуышта ятып йоҡлайбыҙ.

Аш бешереүсе инәйҙәрҙең көлгә күмеп бешергән батмустай сөсө икмәгенең тәме һис ҡасан да онотолоҡ түгел. Яңы бешкән, боҫрап торған сөсө икмәккә һары майҙы яғып ашайһың да, артынса һаумал ҡымыҙҙы һемереп ебәрәһең - донъяла ошонан да татлыраҡ ризыҡтың барлығын белмәйем. Беҙ иртәнге тәғәм менән әүкәтләнгән арала олатайҙар беҙҙең салғыларҙы саңҡылдатып күйәләр ҙә, аҙағынан беҙгә эҙүелдәтеп янып бирә. Беҙ иһә, ҡыр ҡаҙҙары кеүек теҙелешеп, йәм-йәшел, һутҡа тулышҡан үләнде сабырға төшөп китәбеҙ. Салғыларыбыҙ шул тиклем оҫта итеп тапалған, янылған, шуға ла сапҡан саҡта әллә ни артыҡ көс түгергә лә кәрәкмәй. Бер-бер артлы бригадир булып эшләүсе Мәһәҙей Ҡотоев, Рамаҙан Алтынбаев, Ғүмәр Үтәбаев ағайҙарҙың беҙҙә хеҙмәт дәрте тоҡандырыу өсөн тырышыуы, үҙҙәренең дә беҙҙең менән йәнәш баҫып, янып эшләп йөрөүҙәре хәҙерге етәкселәрҙә булһын ине, тием...

Кискә беҙҙең ҡыуыш янына бригаданың күбә тарттырыусы егеттәре килә. Усаҡ янындағы уйын-көлкө, йыр-бейеү таңға тиклем дауам итә. Ул саҡта ҡыҙҙар йыйнаҡ булғас - егеттәр тыйнаҡ, егеттәр итәғәтле булғас - ҡыҙҙар тотанаҡлы булды. Йәштәр араһында ғишыҡ-мишыҡ эштәре лә булмай тормай, әммә күмәк уйын ваҡытында бер егет тә ҡыҙҙарға ташланманы, ҡыҙҙар ҙа әрһеҙләшеп, егеттәр ҡосағына ясҡынманы. Тойғолар барыһы ла әйтелгән таҡмаҡтарҙың кинәйәһенә, башҡарылған йырҙарҙың моңона һалыныр ине. Беҙ теге йәки был йырсының йырына, бейеүенә ҡарап ҡына уның кемгәләр ғашиҡ булғанын тойомлар инек. Ул замандан һуң ярты быуат самаһы ғына ваҡыт үтеп китте, ә хәҙерге йәштәр бөтөнләй башҡа төрлөгә әүерелде...

Егеттәр араһында минең ағайҙарым, ағалы-ҡустылы Айрат һәм Ғиниәт Ғәйетбаевтар ҙа булды. Уларҙың ҡурайҙа, гармунда, мандолинола, скрипкала уйнауҙары, йырлауҙары һис кенә лә онотолоҡ түгел. Улар башҡарыуындағы башҡорт халыҡ йырҙары, заманса "Иҫтәлек", "Вәгәҙә", "Сәрмән" кеүек йырҙар әле булһын ҡолағым төбөндә яңғырап тора. Үкенескә күрә, икеүһе лә бик иртә яҡты донъянан китеп барҙылар. Ләкин уларҙың йырланмаған йырҙарын Ғиниәт ағайҙың уландары дауам итә. Дүрт улаңы ла, йыр-моңға әүәҫтәр. Өлкәндәре, Өфө ҡалаһында музыка мәктәбе директоры булып эшләүсе Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Әхиәт ҡусты менән Сибай филармонияһы солисы Ғаяз ҡусты Ғәйетбаевтар күптән инде республика кимәлендә танылыу яулаған сәнғәт әһелдәре.

Кешеләр араһындағы шундайын ихлас һәм самими мөнәсәбәт, шундайын тыйнаҡлыҡ һәм ябайлыҡ, шундайын ярһыу хеҙмәт дәрте инде ултырып илаһаҡ та тормошобоҙға кире әйләнеп ҡайтмаҫ төҫлө. Хәҙерге тормошобоҙға күҙ һалам да, күңелгә һағыш, күҙҙәргә йәштәр эркелә. Заман башҡа, заң башҡа, тип әйтәләр ҙә ул, барыбер бер генә көнгә булһа ла шул заманға кире ҡайтҡы килә. Ысын тормош тап шул саҡтарҙа тороп ҡалған кеүек...

**Фәриҙә АБЫҘГИЛДИНА.**

**РЕДАКЦИЯНАН:**
**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, "Матур хәтирә" тигән рубрика асҡанда һеҙҙән ошондайыраҡ рухтағы мәҡәләләр алырбыҙ, тигән өмөт ҙур ине. Кемдеңдер ошондай үткән тормош хәтирәләре һабаҡтары йәштәребеҙҙең, балаларыбыҙҙың да ҡолағына инер, күңеленә һеңер, фәһем бирер, матур сифаттар тәрбиәләр, моғайын, тигән уйҙа инек. Өмөтләнеүҙә дауам итәбеҙ һәм һеҙҙән фәһемле хәтирәләр көтәбеҙ.**

*АҒИНӘЙ ҺҮҘҘӘРЕ*

# АЛМАҺЫ БӨТҺӘ...

## ағасын һелкетмәйҙәр

- Самаһыҙ аҡыллылыҡ аҡылдан яҙҙыра.
- Емтекте - себен, бөлгән илде наҙан баҫа.
- Эт күҙе төтөн күрмәҫ, һөмһөҙ туғанын белмәҫ.
- Алмаһы бөтһә, ағасын, аҫыллыңы бөтһә, кешене һелкетмәйҙәр.
- Алға баҡмағандар арттағы соҡорға тәгәрәй.
- Күп тыңла, әммә һығымтаны үҙеңсә яһа.
- Барлыҡ шаштыра, юҡлыҡ асыҡтыра.
- Белекһеҙҙән - әҙәп, наҙандан - белем, ҡарундан аш өмөт итмә.
- Ғүмер үткән һайын аҡыл тәрәнәйә, ахмаҡлыҡ ҡына үҙгәрмәй - йәш көйө ҡала.
- Үҙеңә биргән вәғәҙәне боҙоу - быуынһыҙ ергә балта сабыу ул.
- Кеше хәлен аңламаған - үҙен дә төшөнмәгән ахмаҡ ул.
- Һаҡһыҙ һалдат - дошман ҡоло, яңғыҙ себеш - ҡарға еме.
- Кеше һоло һол булмаҫ, етем ашы һис ҡунмаҫ.
- Нәфсеңде тый: ул мәлгүн тауҙы ла йоттора, затыңды ла ҡороттора.
- Аҙҙы ла күп һоғоноп, күпте лә бер генә йотоп була.
- Мең саҡрым бер аҙымдан, ҙур уныштар бәләкәй генә эштән башлана.
- Тел тыймаһаң - янаһың, ҡул тыймаһаң - батаһың.
- Түтәлдәге әле муллыҡ түгел, келәттәге генә ҙур байлыҡ.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*ХӘҠИҠӘТ БЫЛ!*

**Урта быуат сығанаҡтарының бер төрө булып карталар тора. Бигерәк тә Көнбайыш Европа илдәрендә эшләнгән карталар йәки уларҙың йыйынтыҡтары ҡыҙыҡлы. Шундай йыйынтыҡтарҙы бөйөк фламанд картографы Герард Меркатор беренсе тапҡыр "Атлас" тип атай. Ул атама Ливия иленең мифик батшаһы Атлас хөрмәтенә бирелә.**

# УРАЛ ТАУЫН ТАНЫУСЫ



## Меркатор картаһында Өфө ҡалаһы урынында Башҡорт ҡалаһы күрһәтелгән

Герард Меркатор 1512 йылда Көнсығыш Фландрияның Рупель-монде ҡалаһында тыуа. Уның ысын исеме Герард Кремер, ләкин ул уны латин вариантына үҙгәртеп, Меркатор тип ала. Герард Меркатор астрономия һәм геодезия ҡоралдарын, глобустар, ә һуңынан географик карталар эшләү менән шөғөлләнә. Ул Лувен университетын тамамлап, Лувен ҡалаһында йәшәп ала. Реформация яҡлы булғаны өсөн тыуған илендә эҙәрлекләнә башлағас, 1552 йылда немец ҡалаһы Дуйсбургка күсә. География ғилемен өйрәнгәндә Меркатор антик ғалимдарҙың ҡараштарының яңы географик асыштарға ҡаршы килеүен аңлай. Шуға күрә ул барлыҡ географик мәғлүмәттәрҙе туплап, донъяның ысынбарлыҡ картинаһын тергеҙеп, кешелеккә күрһәтеүҙе үҙенә маҡсат итеп ҡуя.

Был ҙур эшкә Меркатор әүҙем тотона һәм 1569 йылда 18 биттән торған донъя картаһы баҫып сығара, айырым илдәрҙең карталарын берҙәм принципҡа һала. 1585 йылда 51 картанан торған атластың беренсе өлөшө нәшер ителә. Ә 1589 йылда икенсе өлөшө донъя күрә, унда 22 карта тупланған була. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был сикһеҙ эште Герард Меркатор тамамлап өлгөрә алмай, 1594 йылда үлеп китә. Ул эшләгән яңы 28 карта тороп ҡала. Әммә Герард Меркаторҙың Румольд исемле улы тағы ла бер нисә карта төҙөй. Румольд атаһының 107 картанан торған атласын Дуйсбургта 1595 йылда нәшер итә. Г. Меркатор Атласының икенсе баҫмаһы 1604 йылда сыға.

Башҡортостан иле лә Г. Меркаторҙың карталарында һәм атласында үҙ урынын биләй. Мәҫәлән, уның 1554 йылғы Рәсәй (Russia) картаһында Урал тауҙары (Rhymnici montes) һүрәтләнгән, Өфө ҡалаһы урынында Башҡорт (Pascherti) ҡалаһы күрһәтелгән. Бында шуны әйтеп китергә кәрәк: урта быуат, хатта XVIII быуат башы Көнбайыш Европа карталарында Өфө ҡалаһы, ул ерҙә йәшәгән халыҡ исеме Башҡорт формаһында бирелә. Меркаторҙың атласында бер нисә картала Башҡортостан ере, Көньяҡ Урал һүрәтләнә. Унда Кама, Ағиҙел, Яйыҡ, Ырғыҙ, Һамар йылғалары, Башҡорт ҡалаһы һүрәтләнгән.

1517 йылда Краков ҡалаһында поляк тарихсыһы һәм географы Матвей Меховскийҙың "Трактат о двух Сарматиях, Азиатской и Европейской, и о находящемся в них" ("Tractatus de duabus Sarmatiis, Asiana et Ebropiana, et de contentis in eis") тигән хеҙмәте нәшер ителә. Меховский унда "Урал тауҙары ысынбарлыҡта юҡ, мин быны асыҡ беләм" тип яҙа. Ул китап Европала бик популяр була. Уны төрлө илдәрҙә һәм төрлө телдәрҙә күпләп баҫтырып сығаралар. М. Меховскийҙың шул китабына ышанып, Көнбайыш Европала эшләнгән күп кенә карталарҙа Урал тауҙарын күрһәтмәй башлайҙар. Герард Меркатор үҙенең Атласында Урал тауҙарын сағылдыра һәм шуның менән хаталы фекергә юл яба. Тап шуның менән бөйөк фламанд хеҙмәте беҙҙең өсөн мөһим.




**Айбулат ПСӘНЧИН,**

**география фәндәре докторы, профессор.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

XX быуат башында ағас һабанды тимер һабан ҡыҫырыҡлап сығарған. Башҡорттарҙа һабан төрлө маркалы һәм төрлө дәүмәлдә булған. Улар менән ҡуш ат, өс ат, хатта дүрт ат егеп ер һөргәндәр. Дүрт ат егергә кәрәк булғанда ярлы башҡорттар ерҙәрен бергәләп эшкәртеү маҡсатында "супряжка"лар ойоштороғандар.

Ерҙе яндырып эшкәртеү системаһы булған урындарҙа сәсеү өсөн эшкәртелгән участкалар ағас тырма менән тырматылған. Бындай тырма шыршы ағасының уртаға киҫелгән олондарынан яһалған. Улар ике тәртә араһына ике һайғау менән оҙон (50 сантиметр самаһы) ботаҡтар алға, бер яҡҡа ғына ҡарап торорлоҡ итеп тоташтырылған.

Башҡорттарҙа һирәк осраған ағас тешле тырманы миңә Башҡортостандың үҙәк һәм төньяҡ-көнбайыш төбәгендә күрергә тура килде. Бындай типтағы тырма һайғауҙарҙан тора, ә шына формаһындағы тештәре һайғауҙар киҫешкән урында тал сыбыҡтары менән нығытылып бәйләп ҡуйыла. Бындай тырма, нигеҙҙә, квадрат формаһында һәм 25 тешле була. Уның алғы өлөшөнә йыуан сыбыҡтан йәйә бәйләнә. Был яңы баҫыуҙарҙы тырматҡанда тырма ағас төпһәләренә эләкмәһен, ә уларҙы урап үтһен өсөн эшләнә.

Башҡорттарҙа иң киң таралған ағас тырма 20 йәки 25 тимер тешле була. Бындай тырма дүрт йәки биш дүрт үҙ-ара арҡыры бурса менән нығытылған бурсанан тора. Уларҙың бырау менән тишелгән тишектәренә дүрт ҡырлы, осло тимер тештәр ҡағылған. Тырманың оҙонлоғо - 1,4-2 метр, киңлеге 1-1,2 метр булған.

Атҡа егеү өсөн тырманың алғы, арҡыры нығытылған өлөшөнә тимер йәки ҡарама, имән йәки муйыл ағасынан ишелгән ҡулса ҡуйылған. Был ҡулсаға валек бәйләнгән, ә уға - тәртә йәки мисәү.

Башҡорттарҙа уңыш йыйыу ураҡ ярҙамында башҡарылған. Һолоно салғы менән сапҡандар, әммә бөтөн ерҙә лә түгел. Игенде уңыш күп булмаған йылдарҙа ғына салғы менән сапҡандар, сөнки ул бик һирәк үҫкән, сүп үләндәре менән ҡатнашҡан һәм уны урыу файҙалы булмаған. Башҡорт урағы рус урағынан бер нәмәһе менән дә айырылмаған. Салғылар ҙа шундай уҡ булған, әммә уларҙың терәгенә (пятка) өс-биш оҙон ағас тырма теше беркетелгән (һүрәттә). Һәр тештән сабылған иген салғы һабы аша китмәһен һәм тигеҙерәк ятһын өсөн бау тарттырылған. Рус крәҫтиәндәре менән күрше йәшәгән бай башҡорттарҙың ҡайһы берҙәрендә бесән сапҡыстар, ат тырмалары һәм урғыс машиналары күренә башлаған.



Урылған игенде көлтәгә бәйләгәндәр һәм ҡаҙғанатҡа ултыртҡандар, һуңынан уларҙы ырҙын табағындағы ҙур келәттәргә һаҡлауға һалғандар.

Башҡорттарҙың иген киптереү әүендәре булмаған йәки бик һирәк кенә "шиш"тар осрай. Ул тирә-яғы таштар менән нығытылған, балсыҡ менән һыланған һәм яндырылған түңәрәк соҡорҙан ғибәрәт. Соҡорҙоң тирә-яғы буйынса өс метр оҙонлоҡта һәм остары конус формаһына килтереп бергә бәйләнгән һайғауҙар урынлаштырылған. Соҡор эсенә ут яғылған, ә соҡор өҫтөндә торған конус формаһындағы ҡыуыш өҫтөнә көлтәләр һалынған.

✓ *Әгәр ҙә мин үҙем алған һөнәрем буйынса Башҡортостанда эшләй алмаған хәлдә лә, башҡорт ҡыҙына өйләнеп, башҡорт милләтенә балалар үҫтереп, халҡыма хеҙмәт итә алам.*



# БЕР КЕМДӘН ДӘ

## Мәскәүҙә уҡып,

**Берҙәм дәүләт имтиханының иң ыңғай яғы шундалыр: хәҙер иң төпкөл ауылдарыбыҙҙағы мәктәп уҡыусылары ла Мәскәү, Санкт-Петербург кеүек илебеҙҙең эре ҡалаларындағы юғары уҡыу йорттарында белем алыу бәхетенә эйә. Һуңғы йылдарҙа Хәйбулла районының Әбеш урта мәктәбен тамамлаусы дүрт уҡыусының илебеҙҙең баш ҡалаһы Мәскәүҙә юғары белем үҙләштереүе быны аныҡ миҫалы булып тора. Улар: Мәскәү дәүләт дизайн һәм технологиялар университетының III курс студенты Айгөл Мөхәмәтйәрова, Мәскәү авиация-технология университетының III курс студенты Усман Юнысов, Рәсәй дәүләт спорт, туризм һәм йәштәр университетының IV курс студенты Фаягөл Юнысова һәм Рәсәй дәүләт геология-разведкалау университетының I курс студенты Фаил Илембәтов. Йәйге каникул осоронда студенттарҙың өсөһөн: Айгөлдө, Усманды һәм Фаягөлдө бергә тап иттек һәм улар менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**

**▸ Өфөнән 600 саҡрымдан ашыу алыҫлыҡтағы ошондай матур тәбиғәтле, сағыштырмаса тыныс, һил төпкөлдә тыуып үҫкәндән һуң шаулап торған Мәскәү мегаполисына өйрәнеп китеү ҡыйын булманымы?**

**Айгөл:** Тәүге аҙналарҙа тыуған яҡты һағынмай торғайным. Сөнки шундай ҙур ҡала ла барыһы ла яңы, ҡыҙыҡ, күңелле булып тойолдо. Әммә сентябрь аҙаҡтарында иһә ауылды һағынып илай башланым. Уҡыуҙы ташлап ҡайтып китерҙәй саҡтар ҙа булды. Мәскәүгә барғанға тиклем районыбыҙ үҙәге Аҡъярға барып, иң күбе аҙна самаһы ғына өйҙән, ата-әсәйемдән ситтә була торғайным. Һағыныуыма түҙә алмай, бер көндө "Әллә ҡайтайым да ҡуяйыммы?" тип шылтыратһам, атайым: "Ҡайт та, Аҡъярҙағы колледжға уҡырға ин, аҙна һайын ауылға ҡайтып йөрөрһөң", - тип кинәйәле яуап бирҙе. Шунан тындым, тешем ҡыҫып түҙергә тырыштым...

**Фаягөл:** Ауылда тормош аҡрын ғына үтә һымаҡ, унда тәбиғәт менән аралашып йәшәп, тормоштоң тәрәнлеген тояһың, тәмен нығыраҡ beләһең. Ә Мәскәүҙә шундай ҙур тиҙлек ҡосағына инеп китәһең: ваҡиғалар эргәңдән тиҙ генә үтә лә үтә һәм һин бер нәмәгә лә өлгөрмәй ҡалаһың кеүек тойола башлай. Унда һин йә ошо тиҙлеккә ҡушылып, тормош менән бергә атлайһың, йә ауылдағыса, үҙ фиғелеңдәгесә яйлап атлап, тормоштан төшөп ҡалаһың. Икенең береһе инде. Шуға күрә миңә Мәскәүгә барғас, нисек кенә ауыр булмаһын, уның ритмына ҡулайлашырға, башҡаларҙы ҡыуып етергә тырышыр өсөн күп уҡырға тура килде. Мәскәүҙә, эш юҡта эш булһын, тип, ҡул ҡаушырып ҡына йөрөп булмай. Унда үҙеңдең маҡсатыңды билдәләйһең дә, уның ғәмәлгә ашырыу өсөн кешеләр ағымына ҡушылаһың.

**Усман:** Яңы йәшәү урынына, бигерәк тә шундай ҙур ҡалаға өйрәнеү һәр кемгә ауыр инде ул. Мин бала саҡтан уҡ тыуған ауылым Бүренән килеп, Әбеш мәктәбе интернатында йәшәп уҡығанлыҡтан, Мәскәүгә килгәс, атай-әсәйҙән, туғандарҙан айырылыу һағышын әллә ни ауыр кисермәнем. Бына әле каникулда Мәскәү тиҙлегенән, уның шау-шыуынан рәхәтләнеп ял итәбеҙ. Бында, Фаягөл әйтмешләй, шундай тынлыҡ, тормош туҡтап ҡалған һымаҡ. Ошондай мөхиттә тәнебеҙ ҙә, йәнебеҙ ҙә ял итә. Был ял ауылға киләһе ҡайтҡанға тиклем етер, моғайын.

**▸ Һуңғы йылдарҙа Мәскәүгә уҡырға китеүсе башҡорт йәштәре бик ныҡ артты, унда бер-берегеҙ менән аралашып, хатта ниндәйҙер саралар үткәреп, әүҙем тормош менән йәшәйһегеҙ, тигән хәбәр килеп етеп тора беҙгә лә...**

**Фаягөл:** Эйе, Мәскәүҙәге башҡорт йәштәренең үҙ-ара аралашып йәшәүе беҙгә үҙебеҙҙе яҡлаулы һәм һаҡлаулы итеп тойорға ярҙам итә. Был йәһәттән Усманыбыҙ алыштырғыһыҙ ойоштороусы, уның компьютерҙы яҡшы белеүе, ойоштороу эшенә интернеттағы социаль селтәрҙәрҙе ҡулланыуы, бик оҫта дизайнер булыуы - ярты уңышыбыҙҙы тәшкил итә. Мәскәүгә барып төшкәс тә башҡорт студентынан "Ҡайҙа Усман?" тип һорағыҙ, күптәр һеҙгә уны табып бирә алыр. Хәҙер ҡайһы бер уҡыу йорттарында белем алыусы башҡорт йәштәре үҙҙәре бер община, ауыл булып йәшәйҙәр хатта.

**Айгөл:** Ҡыҙыҡ ҡына килеп сыға: Сибайға йә Өфөгә уҡырға инһәң, һин иң тәүҙә үҙеңде ҡайғыртаһың, үҙең тураһында күберәк уйлайһың. Ә Мәскәүҙә, тыуған ерҙән, ата-әсәләрҙән йыраҡта, киреһенсә, бер төркөмгә ойошоп, шул төркөм мәнфәғәтен беренсе урынға ҡуйып йәшәй башлайһың. Сөнки һин шул коллективҡа таянаһың һәм ауыр саҡта уның һиңә терәк булырын беләһең. Шуға күрә Мәскәү, Санкт-Петербург юғары уҡыу йорттарында белем алыусы башҡорт йәштәре Башҡортостандағы студенттарға ҡарағанда ойошҡаныраҡ, берҙәмерәк тигән уйҙамын. Мәҫәлән, Өфөләге студенттар менән аралашҡанда был айырма ныҡ һиҙелә.

**Усман:** Үткән уҡыу йылында беҙҙең университетта уҡыусы башҡорт йәштәре алтмыштан ашып китте. Беҙҙә күберәк Баймаҡ, Учалы, Хәйбулла, Йылайыр райондарынан килгән йәштәр уҡыйҙар. Дөйөм ятаҡта ла беҙ үҙебеҙҙекеләр менән бер бүлмәгә урынлашырға тырышабыҙ. Мәҫәлән, беҙҙең секциялағы һигеҙ бүлмәнең алтауында башҡорттар йәшәй.

**▸ Сит яҡтарға сығып ғибрәт ал, тип тә әйтәләр. Ошо юҫыҡтан ҡарағанда, Мәскәүҙә йәшәгән арала башҡаларҙан заманға ярашлы ниндәй сифаттар үҙләштерә алдығыҙ? Бер кемгә лә сер түгел: үҙебеҙҙең мөхиттә күркәм булып тойолған сифаттарыбыҙ ситкә сыҡҡанда кәмселеккә әүерелә лә ҡуя...**

**Фаягөл:** Ысынлап та, Кавказ халыҡтары менән сағыштырғанда беҙгә ҡыйыулыҡ етешмәй һымаҡ. Баҙнатһыҙбыҙ, белгәнебеҙҙе лә әйтмәй ҡалырға мөмкинбеҙ.

**Усман:** Башҡа милләт йәштәре менән аралашып, уларҙың ҡайһы бер заманға тиҙерәк яраҡлашырға ярҙам итеүсе сифаттарын күреп, белеп йөрөйбөҙ йөрөүгә. Әммә уларға ҡарап, башҡорт кешеһенең асылы үҙгәрмәй һәм үҙгәрергә тейеш тә түгелдер. Беҙ ҡайҙа йәшәһәк, ҡайҙа ғына йөрөһәк тә, башҡорт булып ҡалабыҙ, ҡаласаҡбыҙ.

**Айгөл:** Мин Айгөл тигән башҡорт ҡыҙы менән ятаҡта бер бүлмәлә йәшәнек. Төркөмөбөҙҙәге башҡа ҡыҙҙар бүлмәбеҙгә килһә, уларға иң тәүҙә сәй эсергә тәҡдим итәбеҙ. Башҡалар беҙҙең йомартлыҡты белеп ҡалды ла, һәр ҡайһыһы сәй, шәкәр, башҡа төрлө әйбер йә ризыҡ һорап, беҙҙең бүлмәгә йышлай башланы. Тәүҙә барыһына ла, нимә һораһалар ҙа, бирҙек, аҙаҡ иҫебеҙгә килдек: ауыҙҙан өҙөп бирәбеҙ ҙә, үҙебеҙгә бер ни ҙә ҡалмай икән. Ә башҡалар "ҡышын ҡар алып та булмай" торғандарҙан. Шулай йомартлыҡ буйынса арыу ғына һабаҡ алдыҡ. Уҡыуға килгәндә инде, Айгөл дә, мин дә, бер дәресте лә ҡалдырмай лекцияларға йөрөйбөҙ. Сессия етә башлағайны, дәрес ҡалдырған төркөмдәштәребеҙ беҙҙән арттан йүгерә башланы. Беҙ тағы уларға ярҙамға ташландыҡ. Аҙаҡ иһә лекция яҙылған дәфтәрҙәребеҙ юғала башлағас, иҫебеҙгә килдек. Йәғни беҙҙең башҡорт менталитеты ошо рәүешле башҡаларҙыҡы менән "аңлашты".

Башҡаларҙың ыңғай сифаттарын үҙләштереүгә килгәндә иһә... Ауылдан килеп, университетта уҡый башлағас, "Бында бер мин генә наҙандыр инде ул" тигән ҡурҡыу бар ине. Дәрестәрҙә уҡытыусылар биргән бар һорауҙарҙың да яуабын беләм булып сыҡты. Тик тәүҙәрәк ҡул күтәреп, яуап бирергә ҡыймай инем, башҡалар өлгөрөрәк була торғайны. Ошондай өлгөрлөккә өйрәнеүе ауырыраҡ булды инде.

Күрше бүлмәбеҙҙәге рус ҡыҙы Оля бөтә нәмәгә өлгөрә, бер көн эсендә бар Мәскәүҙе урап сыға ала. Ә Айгөл менән мин күберәк бүлмәлә тыуған яҡты һағынып көн үткәрә инек. Берҙән-бер көндө Оля беҙгә ысын Мәскәүҙе күрһәтте, баҡтиһәң, Мәскәү Ҡыҙыл Майҙандан һәм Кремлдән генә тормай икән.

Һәм тағы... Мордовиянан килгән бүлмәләш Вера тигән ҡыҙ, мәҫәлән, үҙен генә уйлай. Уның хатта һауыт-һабаһы ла айырым, ул ашарға ла үҙенә айырым әҙерләй. Шундайҙар ҙа бар икәнен белдек хәҙер.

**Тәүҙә барыһына ла, нимә һораһалар ҙа, бирҙек, аҙаҡ иҫебеҙгә килдек: ауыҙҙан өҙөп бирәбеҙ ҙә, үҙебеҙгә бер ни ҙә ҡалмай икән. Ә башҡалар "ҡышын ҡар алып та булмай" торғандарҙан. Шулай йомартлыҡ буйынса арыу ғына һабаҡ алдыҡ. Уҡыуға килгәндә инде, Айгөл дә, мин дә, бер дәресте лә ҡалдырмай лекцияларға йөрөйбөҙ. Сессия етә башлағайны, дәрес ҡалдырған төркөмдәштәребеҙ беҙҙән арттан йүгерә башланы. Беҙ тағы уларға ярҙамға ташландыҡ. Аҙаҡ иһә лекция яҙылған дәфтәрҙәребеҙ юғала башлағас, иҫебеҙгә килдек. Йәғни беҙҙең башҡорт менталитеты ошо рәүешле башҡаларҙыҡы менән "аңлашты".**

**▸ Һеҙҙең киләсәктә әле уҡыған юғары уҡыу йорттарында алған һөнәрҙәрегеҙ буйынса, әйтәйек, тыуған ауылдарығыҙ Әбештә, Вәзәмдә, Бүрелә, Хәйбулла районында, республикала хеҙмәт итеү мөмкинлегегеҙ булмауы ла бар. Ә бит әҙәм балаһына шундай бурыс һалынған: ул үҙенең тыуған еренә, халҡына, үҙен кеше иткән ата-әсәһенә хеҙмәт итергә тейеш. Был бурысығыҙҙы нисегерәк тормошҡа ашырырға уйлайһығыҙ?**

**Усман:** Алған һөнәребеҙ буйынса тыуған яҡта хеҙмәт итеү мөмкин булмаған осраҡта ла, беҙ атай-әсәйебеҙгә, тыуған яғыбыҙға бурысыбыҙҙы бер ваҡытта ла онотмаясаҡбыҙ. Әгәр ҙә мин үҙем алған һөнәрем буйынса Башҡортостанда эшләй алмаған хәлдә лә, башҡорт ҡыҙына өйләнеп, башҡорт милләтенә балалар үҫтереп, халҡыма хеҙмәт итә алам.

**Фаягөл:** Мин тыуғандан алып рухлы башҡорт мөхитендә йәшәнем һәм артабанғы тормош юлым Мәскәү тарафтарына боролғас, дуҫтарым: "Тимәк, һиңә Хоҙай халҡыңа күберәк файҙа килтереү мөмкинлеге бирә", - тигән фекер әйтте. Шул һүҙҙәр минең аң төбөнә инеп ултырҙы. Шул мөмкинлекте, йәғни халҡыма нығыраҡ файҙалы булыу мөмкинлектәрен үҙләштереү өҫтөндәмен. Унан һуң, башҡорт ҡыҙы икәнһең, һин иң тәүҙә милләт әсәһе икәнеңде иҫтән сығармаҫҡа тейешһең. Мин дә иң тәүге сиратта был мөҡәддәс бурысымды үтәйәсәкмен.

**Айгөл:** Халҡыбыҙ алдында үтәй торған иң тәүге бурысыбыҙ ошо инде: милләт әсәһе булыу. Урыҫ кешеһенә кейәүгә сыҡҡан бер башҡорт апайының: "Эх, ирем үҙгемә үтте, уның менән хатта рәхәтләнеп башҡортса әрләшеп тә булмай", - тигәне иҫтә ҡалған. Мин иремде башҡа милләт кешеһе итеп күҙ алдына ла килтерә алмайым, сөнки башҡа милләт балаларына әсәй булғым килмәй. Башҡа милләткә балалар үҫтергән ҡыҙҙарыбыҙ, апайҙарыбыҙ бик йәл миңә. Ошондай яҙмышҡа дусар булмабыҙ, тигән фекер нығынған күңелдә. Ул хаҡта үҙ-ара осрашҡанда ла йыш һөйләшәбеҙ. Үҙебеҙҙең йәштәр менән генә аралашарға тырышабыҙ. Аллаға шөкөр, Айгөл, Усман кеүек әүҙем йәштәребеҙ төрлө саралар ойоштороп, башҡорт йәштәрен бергә осраштырып, аралаштырып, таныштырып тора.

**▸ Һеҙ барығыҙ ҙа Берҙәм дәүләт имтиханы буйынса уҡырға ингәнһегеҙ. Бала саҡтан кем булырға хыяллана торғайнығыҙ, әле һайлаған һөнәрегеҙҙе осраҡлы тип иҫәпләмәйһегеҙме?**

Усман: Мин мәктәпте тамамлағанда Мәскәүгә уҡырға барырымды күҙ алдына ла килтерә алмағайным. БДИ һөҙөмтәләре буйынса документ-

***✓ Беҙ үҙебеҙҙең һәләтебеҙ буйынса ниндәйерәк һөнәр һайларға тейеш икәнлегебеҙҙе аңлап бөтөрмәйбеҙ. Ауыл мәктәптәрендә уҡыған балаларҙың үҙләштерергә теләгән һөнәрҙәр исемлеге бик бәләкәй.***

тарымды БДУ-ға, аграр университетҡа һәм өлкәндәрҙең кәңәше буйынса Мәскәүҙәге авиация университетына биргәйнем. Йәрәбә Мәскәүгә төштө. Мин һайлаған һөнәр буйынса уҡытҡан уҡыу йорттары Рәсәйҙә бик һирәк, шуға күрә уның киләсәге ҙур. Был һөнәргә ихтыяж һәр саҡ ҙур буласаҡ. Шуға ла мин үҙем хыялланғандан тайпылғаныма бер ҙә үкенмәйем. Хәҙерге заманда хыялдан бигерәк, юғары уҡыу йортонда алған һөнәрең буйынса ҡайҙалыр эш урының булыуы мөһимерәк бит. Хыялың нисек кенә татлы, уҡып алған дипломың ниндәй генә төҫтә булмаһын, әгәр ҙә шул һөнәрең буйынса эш урыны таба алмаһаң, алған белемеңдең дә әһәмиәте юҡҡа сыға.

**Фаягөл:** Мин бала саҡтан юрист булырға хыяллана инем. Хатта уҡыу программаһынан тыш, юрист һөнәре буйынса китаптар уҡый торғайным. Әммә әле һайлаған һөнәремде һис тә осраҡлы тип кәрәк. Әйтәйек, беҙҙеке кеүек төпкөл Хәйбулла районында үҙ эшеңде ойоштороу өсөн бер нисә факторҙы тап килтереү мөһим. Фаягөл әйткәнсә, туризм ойошторам, тиһәң, был төбәккә туристарҙы йәлеп итеү өсөн донъя стандарттарына тап килерлек шарттар тыуҙырыу фарыз. Әгәр ҙә был мөмкин түгел икән, әйтәйек, этнотуризмға тотонорға була.

**Айгөл:** Үҙ эшеңде ойоштороу өсөн характер кәрәк. Мин кешеләрҙе йәлләйем, шуға күрә киләсәктә үҙемде етәксе урынында күрмәйем. Әгәр ҙә үҙ

**Усман:** Аллаһы Тәғәләнең барлығын, уның ҡөҙрәтле булыуын танығам да, дин юлында түгелмен. Дингә килеүселәр һәр ваҡыт был юлға баҫыуының сәбәбен аңлата. Ошоғаса мин дингә килмәгәнмен икән, тимәк, мөҙҙәтем етмәгән.

**Айгөл:** Миңә ғаиләбеҙҙә бәләкәй саҡтан доғалар, аяттар өйрәттеләр. Үҫә төшкәс, тиңдәштәрем менән клубҡа, дискотекаға йөрөй башланым. Ә был мөхит миңә бәләкәй саҡтан өйрәтелгән доғаларҙы, аяттарҙы ҡабул итерлек түгел ында тормошто үҙгәртергә теләгән аңлы кешеләр ҙә барлығын беләбеҙ.

**Усман:** Кемдер митингтарға ҡыҙыҡ күреп, кемдер - эт һуғарырға, кемдер "ҡаш төҙәтәм" тип сыға. Митингтарҙың ниндәйҙер файҙаһы барҙыр ҙа, әммә тормошто был юл менән генә үҙгәртеп булмайҙыр, тип уйлайым.

**Айгөл:** Мәскәүҙә "День единства России" байрамы булғайны. Унда беҙ ҙә барҙыҡ. Стадион тулы Урта Азия һәм Кавказ халыҡтары булды. Шунда бер нәмәне күреп иҫем китте:







киңерәк, мөмкинлектәре күберәк. Әйттем инде: үҙем аша башҡортомдо танытыр башҡа мөмкинлектәр эҙләү өҫтөндәмен.

**Айгөл:** Әгәр ҙә уҡыусыларҙа, Мәскәүгә уҡырға барам, тигән ҡыҙыҡһыныу һәм дәрт булһа ла, атай-әсәйҙәрҙең финанс мәсьәләһен сәбәп итеп, үҙ ынтылышын кәртәләп ҡуйыуы бар. Шундайҙарға әйткем килә: финанс мәсьәләһен сәбәп итеү бик үк дөрөҫ түгел. Сөнки Мәскәүҙә лә Сибай, Өфөлә уҡығандағы кеүек үк аҡса тотонола. Атай-әсәйе матди яҡтан ярҙам итә алмаҫын белгән бер ҡыҙ йәй буйы ауылда һатыусының ярҙамсыһы булып эшләп, өҫ-башын бөтәйтеп, Мәскәүгә уҡырға килгәнен беләм. Мәҫәлән, беҙҙең уҡыу йортонда уҡыған күп ҡыҙҙар ҡайҙалыр эшләп йөрөй. Әлбиттә, өйҙән дә аҡса килеүе яҡшы, әммә үҙең эшләп тапҡан аҡса ҡәҙерлерәк, бәрәкәтлерәк.

**Усман:** Мәскәүгә йәки башҡа ҙур ҡалаларға уҡырға барыуҙан ҡурҡырға ярамай. Әйтелде бит инде: хәҙер беҙҙекеләр Мәскәүҙә лә, Санкт-Петербургта ла бик күп, бергә ойошоп, аралашып йәшәйбеҙ. Унан һуң, Азат ағай Бадранов кеүек ҡурсыусыларыбыҙ, хата юлға төшөп ҡуймаһындар, тип күҙәтеп, иҫкәртеп тороусыларыбыҙ ҙа бар.

# Кәм түгелбеҙ...

## шуға инандыҡ

иҫәпләмәйем һәм үкенмәйем. Бала саҡ хыялы - бер нәмә, ә тормош ысынбарлығы - бөтөнләй башҡаса.

**Айгөл:** Мин бала саҡта журналист йә табиб һөнәре һайлармын, тип уйлай инем. Шулай килеп сыҡты: мин Өфөгә барып еткәнсе журналистика факультетына документтар ҡабул итеү тамамланғайны. Ә мединститутҡа инер өсөн балдарым етмәне. Артабан Мәскәүгә юлландым һәм әлеге уҡыу йортона уҡырға индем. Был йәһәттән ауыл мәктәптәренең бер проблемаһын әйтеп үткем килә. Ул да булһа, беҙ үҙебеҙҙең һәләтебеҙ буйынса ниндәйерәк һөнәр һайларға тейеш икәнлегебеҙҙе аңлап бөтөрмәйбеҙ, уҡытыусылар ҙа был мәсьәләгә иғтибар биреп еткермәй. Ауыл мәктәптәрендә уҡыған балаларҙың үҙләштерергә теләгән һөнәрҙәр исемлеге бик бәләкәй, тип әйтмәксемен.

**▸ Хәҙер күп кенә уҡыу йорттары "Эшҡыуарлыҡ технологияһы" тигән бүлектәр һәм факультеттар асып, студенттарҙы үҙ эшен ойошторорға өйрәтә. Был йәһәттән һеҙ уҡып сыҡҡас, үҙ эшегеҙҙе асыу мөмкинлеген күҙ уңында тотаһығыҙмы?**

**Фаягөл:** Мин үҙемде күберәк дәүләт хеҙмәтендә йөрөгән кеше итеп күҙ алдына килтергәнгә күрә, үҙ эшемде асыу тураһында уйланғаным юҡ әлегә. Әгәр ҙә инде ниндәйҙер эш ойошторорға тура килһә, мин уны тыуған яғымда туризм өлкәһендә күрәм.

**Усман:** Үҙ бизнесыңды булдырыу өсөн иң тәүҙә идея эшемде асырға тура килһә, мин уны ғаилә бизнесы өлкәһендә күрәм.

**▸ Һуңғы ваҡытта йәштәребеҙ, әлхәмдүлиллаһ, күпләп дингә килә башланы. Әммә был тәңгәлдә бер проблеманы ла әйтеп үтеү урынлы булыр: дингә килеүсе ҡайһы берәүҙәр өсөн ниндәй милләт вәкиленә кейәүгә сығыу йә өйләнеү мөһим булмай башлай. Ғөмүмән, һеҙҙең дингә мөнәсәбәтегеҙ нисек?**

**Фаягөл:** Аллаға шөкөр, мин дин юлындамын. Был юлға Аллаһы Тәғәләнең барлығына инаныу аша килдем. Дингә ҡарашым ыңғай, тик дин эсендәге төрлөсә ҡараштарҙың, секталарҙың булыуына оло хәүефләнеү менән ҡарайым. Бындай бүлгеләнеүҙәр беҙҙе милләт булараҡ тарҡатыу өсөн махсус рәүештә уйлап сығарылған. Йәштәрҙең үҫешеп, формалашып бөтмәгән аңы өсөн бындай бүлгеләнеүҙәр бик зарарлы. Минеңсә, беҙҙең илдә һәм беҙҙең халыҡта дини һабаҡтар биреү, аңлатыу эше яйға һалынмаған. Шуға ла ислам динендәге йәштәребеҙ араһында ла берҙәмлек юҡ һымаҡ. Ҡайһы берәүҙәр төрлө характерҙағы китаптар уҡый ҙа, үҙенең хаҡлығын иҫбат итергә, башҡаларҙың фекерен инҡар итергә тотона.

Милләт мәсьәләһенә килгәндә, шулай тим: Аллаһы Тәғәлә кешеләр бер-береһен таныһын өсөн беҙҙе төрлө милләт кешеләре итеп яралтҡан, төрлө тел биргән. Шуға күрә дин юлына килгән кешенең үҙ милләтенән ситләшеүен ислам диненең Конституцияһы һаналған Ҡөрьәнгә ҡаршы килеү тип ҡарайым.

ине, шуға күрә ул белемем бер яҡ ситтә тороп ҡалды. Әгәр ҙә шул ваҡытта беҙҙең ауылда мәсет булһа, эргәмдә Аллаһы Тәғәләгә ышанған, намаҙ уҡыған бер генә кеше булһа, бәлки, мин дә дин юлына баҫыр инем. Бының менән нимә әйтергә теләйем? Дини тәрбиә ғаилә тәрбиәһенең, милли тәрбиәнең айырылғыһыҙ бер өлөшө булған осраҡта, ул беҙҙең халыҡта тәбиғи булып ҡабул ителер ине. Әлегә ошо тәрбиә алымдары араһында бәйләнеш юҡ. Шуға ла дини тәрбиә ныҡлап үтеп инмәгән әле көнитмешебеҙгә. Ә былай, Хоҙайға ышанам, Мәскәүҙә лә мәсеттәргә йөрөйөм, хәйер бирәм.

**Фаягөл:** Шул да күҙәтелә ҡайһы бер йәштәребеҙ араһында: кемдәрҙер динлелекте, мәсеткә йөрөүҙе мода һымағыраҡ ҡабул итә. Ә мода тиҙ генә үтеп китеүсән. Шуға ла әле генә һаҡал үҫтереп, намаҙ уҡый башлаған бәғзе берәүҙең икенсе ҡарағанда эсеп йөрөп ятыуы йәнде әрнетә.

**▸ Мәскәүҙә митингтар күп булып тора. Шундай йыйылыштарға сығаһығыҙмы, ғөмүмән, был мәсьәләгә нисек ҡарайһығыҙ?**

**Фаягөл:** Мәскәүҙә башҡорт йәштәрен ойоштороусы, ҡурсалаусы Азат ағай Бадранов бар. Ул беҙгә митингтар менән илдәге һәм республикалағы хәлдәрҙе үҙгәртеп булмауы, быға фәҡәт тырышып уҡып, кәрәкле һөнәр алып, республикаңа һәм халҡыңа файҙа килтереү юлы менән генә өлгәшеү мөмкин булыуы хаҡында күп тапҡырҙар аңлатҡаны булды. Шуға беҙ митингтарға сыҡмайбыҙ. Әммә митингтарға сығыусылар араһ-

Мәскәүҙәге барлыҡ ресторан хужалары Урта Азия һәм Кавказ халыҡтары вәкилдәре икән. Рәсәйҙең иң төп байрамын мәскәүлеләр түгел, ә шул халыҡтар билдәләне. Ғөмүмән, Мәскәүҙә ниндәй генә митингтар булмаһын, унда сығыусыларҙың күбеһе мәскәүлеләр түгел. Улар бындай йыйындарҙа ҡатнашмай, ә тамаша ҡыла. Беҙҙең ятаҡта ла митингҡа саҡырып йөрөүселәр булды. Унда сыҡҡан һәр студентҡа 500-әр һум аҡса бирергә лә вәғәҙәләнеләр. Аҡса тәҡдим итерлек булғас, бындай йыйылыштар ойоштороусыларҙың ниндәйерәк көстәр икәнлеге лә асыҡ төҫмөрләнә.

**▸ Ауыл мәктәптәрендә өлкән кластарҙа уҡыусы балаларға ниндәй теләктәр әйтер инегеҙ? Кем белә, бәлки, улар ҙа һеҙҙең кеүек ун беренсене тамамлағас, Мәскәүгә юлланыр...**

**Фаягөл:** Мәскәү кеүек ҡалаларҙың юғары уҡыу йорттарын яуларға ҡурҡмаһындар, баҙап ҡалмаһындар, тәүәккәл булһындар. Беҙ бер кемдән дә кәм түгел. Ысынында иһә, беҙ кемдәндер кәм икәнбеҙ, тигән уй ҙа, тойғо ла юҡ беҙҙә. Беҙ Мәскәүҙә уҡып, йәшәп, башҡортобоҙҙоң тиңдәр араһында тиң булыуына тағы ла нығыраҡ инандыҡ. Мин үҙем ауылда мәктәптә, Өфөлә 1-се һанлы Башҡорт республика гимназия-интернатында уҡығанда башҡорт телендә ҡобайырҙар яҙып, улар менән сәхнәлә сығыш яһап, үҙемде раҫланым, үҙемде күрһәттем, үҙемдең нимәнелер эшләй алыуыма инандым. Мәскәүҙә, әлбиттә, ҡобайырҙар һөйләп йөрөп кенә үҙеңде раҫлап булмай, бында донъяның офоҡтары

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Йәштәр менән әңгәмәне ошо ҡорҙо ойошторорға ярҙам итеүсе кеше -Хәйбулла районы Әбеш мәктәбе уҡытыусыһы Камил Илембәтов һүҙҙәре менән тамамлайым: "Был йәштәргә беҙҙең мәктәптә уҡыған саҡтарында уҡ хайран инем. Улар мәктәбебеҙ коллективының йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтермәй, Мәскәү вуздарында ла шәп итеп уҡып алып киттеләр. Мәктәптә беҙ уҡыусыларға талапты икенсерәк итеп ҡуябыҙ, әлбиттә. Ул матур яҙырға, тәртипле, тыңлаусан булырға тейеш һ.б. Мәҫәлән, Фаилдың яҙыуы бик насар ине, тәнҡитләй башлаһаң, ул: "Мин үҫкәс түрә булам, мин яҙмайым, секретарым яҙасаҡ", - тип әйтә торғайны. Мәскәүгә уҡырға барғайны, үҙе уҡыған Рәсәй дәүләт геология-разведкалау университетының маҡтаулы студентына әйләнде. Усманыбыҙ, Фаягөлөбөҙ ҙә, ана, шулай уҡ бар башҡорт студенттары араһында лидер булып йөрөй. Нисек ғорурланмайһың инде улар менән!**

**Һуңғы ваҡытта балалар һанын сәбәп итеп, ауыл мәктәптәрен яба башланылар. Мин быға бик ныҡ ҡаршымын. Сөнки ауыл мәктәптәренә финансты экономиялау күҙлегенән ҡарау бөтөнләй дөрөҫ түгел. Балалар һаны аҙ булғанға ғына беҙ насарыраҡ эшләмәйбеҙ бит. Быны Мәскәүҙең юғары уҡыу йорттарында белем алыусы һәм һәр ҡайһыһы үҙ тиҫтерҙәре араһында шәхес булыуға өлгәшкән ошо уҡыусыларыбыҙ иҫбатлай. Әйткәндәй, мәктәбебеҙгә урта мәктәп статусы бирелеүенә 60 йыл булды быйыл."**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

***✓ Ирем менән киленең юл фажиғәһенә эләккәндәр. Әле улар дауаханала. Ирле-ҡатынлы икәндәр, тип икеһен бер бүлмәгә һалып ҡуйғандар. Инде хәҙер белмәмеш тә күрмәмеш булып йөрөй алмаҫһың, Хаят инәй…***





**Сәғит Агиш исемендәге хикәйәләр конкурсы**

Таңһылыу ҒӘЙНУЛЛИНА

# КАРТЫМДЫ ЮҒАЛТҠАС

(Хикәйә)



Уйҙарым менән мауығып ултырған мәлдә, Азатымдың үҙ бүлмәһенә инеп киткәнен һиҙмәй ҙә ҡалғанмын. Ҡатыны менән ҡайһылай күтәренке кәйеф менән берсә өй яңғыратып көлөшәләр, берсә тып-тыныс ҡалалар. Шул һиҙелә: киленем тырышып-тырышып нимәлер аңлата. Азаттың тауышы һанда-һаяҡ сығып ҡала. Һағынышҡандарҙыр ...

Әнер төшөр алдынан ихатаға сыҡһам, "Сирмеш" һыйырымдың мөгөҙөн арҡанлап бәйләп маташа. Мин иҫәр кеше һымаҡ уның арҡанына йәбештем. Азат:

- Әсәй, был ни эшләүең, һинә енеллек булһын өсөн тырышам бит мин...

- Малдан бик ҡотолғоң килгәс, әйҙә, һинеңсә булһын, тик уларҙы Сафураға һатайыҡ. Ул мал йәнле.

- Ҡәйнәм ҡыҙыҡ ҡына инде, кем алһа ла ярамағанмы? Аҡса булһа - булды. Сафуралар ҡайҙан алһын аҡсаны? - ти киленем.

-Ире Әксән дә Себерҙә мул аҡса эшләй, Сафура ла икене өс итергә әҙер... Мал һатыу тураһындағы тәүге етди һөйләшеү ошолайыраҡ тамамланды.

Беленер-беленмәҫ йәйге таң һыҙыла. Тәҙрә төбөндә үҫкән муйылдарға бер-бер артлы сыр-сыу булып ҡунған ҡоштар тыуаһы көндөң ҡояшлы, йәмле булыуына ишаралай.

Күңелемдә әрнеткәнә шул: бер туҡтауһыҙ һыйырым баҡыра. Ҡулымда көсөм булһа, шыуышып барып һауыр инем дә бит. Йәш саҡта йоҡонан туйған мәлдәр була микән? Бигерәк тә таңғы йоҡо тәмле. Киленем дә йәш түгел. Ҡыркты уҙған. Йоҡлап ята микән ни?

Һуҡырҙың теләгәне ике күҙ тигәндәй, "Инәй, биҙрәләрең ҡайҙа?" - тигән тауыш ишетелде. Мин ятҡан килеш: "Сиңдектә, сиңдектә", - тип ҡысҡырам, тик тауышым сыҡмаған һымаҡ. Тора алмай аҙапланам үҙем. Мин илләаллаға тороп баҫҡанда, һыйырҙы гөбөрҙәтеп һауып ултыра ине инде Сафура .

Йәшкә тулды күңелем. Сафура: "Инәй, ирем Әксән Себерҙә вахтала, уның менән кәнәшләшмәйенсә, һатып ала алмайым малыңды. Теүәл бер айҙан һуң ҡайта, ә былай малдарыңды ҡарашырмын",- тип йыуата.

Шул саҡ киленем ҡатаһын ҡарп-ҡорп һөйрәп, туҙған сәсен тәҙәтә-тәҙәтә, ихатанан сығып барған Сафураны ҡыуып етеп әрләргә керешә.

- Йәшлегеңдә ярай алмағаныңды, хәҙер килештерә алмаҫһың... - Уның ҡулын болғай-болғай тағы ниҙәр һөйләгәнен ишетмәнем. Ә шулай ҙа: "Һыйырҙы һинә һатмайбыҙҙыр инде?" - тип һуҡранғаны ҡолағыма ап-асыҡ салынды. Был ни ғәжәп, тормош арбаһын бер төптән тарта инек тә баһа. Доньябыҙҙың ҡотон ҡартым үҙе менән алып китте микән әллә?

Киске сәй мәлендә, киленем башын түбән эйеп, шымтайып сәй эһаны. Айырыуса минә йүнәлтте иғтибарын. Әле тегенеһен, әле быныһын эргәмә өйөп: "Ауыҙ ит, ҡәйнәм, Себер күстәнәсен", - тине.

- Әсәй, Сирмештәргә һатайыҡ малды бесән-уты менән. Хаҡын да арттырып түләмәкселәр, - тине улым Азат.

- Әсе булһаң - төкөрөрҙәр, тәмле булһаң - йоторҙар, тигәндәй, өҙөп кенә әйтә алмайым. Ҡайтһын әле Сафураның ире Себерҙән...

Килен ҡулындағы сынаяғын сайпылдыра-сайпылдыра, саҡ-саҡ түкмәй ултыртты батмусҡа. Әйтерһең, кәүҙәһен ташлап осто йәне. Түңәрәк матур йөҙө аҡлы-ҡыҙыл тимгелдәр менән ҡапланды.

- Әксәнде вахтала мин алмаштырам бит. Ул ҡайтыуҙы көтһәк, бик оҙаҡ булыр. Сафураның доньяһы ҙур. Бүлгеләнә алмаҫ ике яҡҡа,- ти улым.

- Кем-кем, Сафура өлгөрә ул. Малымдың тоҡомон илле йыл үрсетәм, шуға ла йәнем кеүек күрәм. Тик ире Әксән аҡса эшләп ҡайтһын. Минең өсөн көнөнә ике тапҡыр Сафура менән аралашыу күңелемә дауа. Һөйләнә - һүҙе килешле, эшләнә - эше ырамлы...

Малдарым бөтөнләйгә Сафураға эйәләште: ҡойроҡ-мойроғон да һелтәмәй, хатта аяҡтарын да алмашлап баҫмай, нисек торған - шулай һауҙыра. Мал да аңлайҙыр үҙ хәлен.

Ниһайәт,Сафураның ире Әксән Себерҙән аҡса эшләп, имен-аман әйләнеп ҡайтты, ә Азатым уның урынына вахтаға юлланды. Балалар итәктә һөйҙөрә, итәктән төшһә - көйҙөрә тигәндәре бермә-бер раҫтыр. Бына хәҙер һәр береһенең үҙ юлы, үҙ маҡсаты, үҙ ғәме.

Ейәнем Хамматтың доньяға килеүенең тәүге минуттарынан алып һыу индерҙем, доғалар уҡып, аҡ биләүгә һалып үҙем биләнем. Элек-электән кемде һөйләһәм, йәки уйлаһам, шул күренә торған. Хаммат ҡайтып инде.

- Тәмле, яңы бешкән икмәк еҫтәре таралған өйгә. Өләсәй, һин булмаһаң, ни эшләр инем был донъяла?

- Ҡуй, улай тимә. Мин инде оло, бөгөн бармын - иртәгә юҡ. Һинең иң яҡын кешеләрең - әсәйең һәм атайың. Әйткәндәй, фатиха әсәйҙәрҙең аяҡ аҫтында, тигәнде һис бер ҡасан да онотма, улым.

- Минең әсәй, атай өйҙә булмаһа, көтөп алған ҡунаҡ...

Ейәнем үҙен ныҡ яратҡанымды һүҙһеҙ ҙә тоя, ахырыһы. Шуға ла күргән белгәнен, оҡшаған-оҡшамағанын түкмәй-сәсмәй һөйләп ала торған ғәҙәте бар. Һәр ваҡыт түгел, әлбиттә. Бер көндө һис уйламағанда шаҡ ҡатырлыҡ хәбәр ысҡындырмаһынмы:

- Әсәйем эшкә китһә лә, ҡайтһа ла, һәр ваҡыт таксиҙа елдерә.

- Ҡала ситендә йәшәгәс. Уның ни ғәйебе?

- Атайым Себергә юлланыуы була, әсәйем Әксән ағайҙың иномаркаһында үҙенекендәй күреп ултырып йөрөй.

- Улар элек-электән яҡшы таныштар ҙа...

- Эй, өләсәй, бер ҡатлы бала һымаҡ, кем нимә әйтә - шуға ышанаһың. Быны аңлауы еңел һәм ҡыйын. Шул уҡ ваҡытта ҡурҡыныс...

Элегерәк Сафураның әсәһенән ишеткәнем бар ине. "Киленең йәш сағында башта Әксәндең, һуңынан Азаттың башын әйләндерҙе", тигәнен ҡолағыма элмәгәйнем. Үҙемдең дә Азат менән Сафураның бергә булмауына ҡыҙылышым булғас, иғтибар бирмәнем уның һүҙҙәренә. Уйлаһаң, уй ысынға әйләнә икән. Сәғәте, минуты менән Әксәндең өр-яңы еңел машинаһы беҙҙең ҡапҡа төбөнә туҡтамаһынмы. Киленем йәһәт-йәһәт йүгерә-атлай өйгә килеп инде лә:

-Төшкө ашҡа бер сәғәт ваҡыт бирелә, һис бер нәмәгә өлгөрөп булмай, - тип һөйләнә-һөйләнә залдағы көҙгө алдына баҫты. Ҡояш яҡтыһында күҙҙең яуын алырҙай нур балҡытҡан зиннәтле ташлы алтын алҡа, шундай уҡ балдаҡ кейеп, ҡәнәғәтлек тойғоһонан көҙгө алдында бер-ике зыр әйәрәлеп алды. - Такси яллап бер аҙ ҡапҡылап китергә ҡайттым, - тип өҫтәп ҡуйҙы ла. - Бөгөн етәксебеҙҙең юбилейын билдәләйбеҙ.

Һуңғы һөйләмә, мин һуңлабыраҡ ҡайтырмын, тигәнде аңлатҡандыр, моғайын. Осрашыуға йөрәкһеп ашҡынған еткән ҡыҙ кеүек сығып йүгерҙе. Ауыҙын асып ябырға онотҡан кеше һымаҡ, ни уйларға белмәй тороп ҡалдым. Төҫ тиһәң - төҫ, һын тиһәң - һын, аҡыл тиһәң -аҡыл, типһә тимер өҙерҙәй үҙекәйенә өлтөрәп торған Азатты һанға һуҡмай йөрөүе микән ни был? Әгәр мин уйлағанса булһа, ояты ни тора. Тоҡомәкрәбәлә булмаған хәл. Юҡтыр, юҡтыр, ҡайһылай ҙа йүнһеҙ уйҙар ағыла ҡарт башымдан.

Иртә менән Сафура һыйыр һауырға тағы килде. Йоҡоһо туймаған, күҙҙәре ҡып-ҡыҙыл. Күҙгә ҡарап һөйләшмәй. Һәр ваҡыттағыса, кәйефте күтәрерлек хәбәрҙәр һөйләмәй. Алдымда бөтөнләй башҡа зат. Күренеп тора: күңеле ғауғалы. Шулай булһа ла әкрен генә һүҙ ҡатты: Сафура, бер аҙ көтөп тор. Һөттө айыртып, иртәнге ҡаймаҡты биреп ҡайтарам. Ирең ҡайтҡан икән, төрләндерерһең өҫтәлеңде.

- Юҡ, бер нәмәгеҙ ҙә кәрәкмәй. Һеҙгә ярҙам булһын өсөн ваҡытлыса ғына йөрөйөм бит мин. Уны үҙегеҙ ҙә беләһегеҙ ҙә инде.

Эшен ашыҡ-бошоҡ бөтөрҙө лә, ҡайҙалыр һуңлағандай сығып йүгерҙе. Әй әттәгенәһе, малды ҡасан алаһығыҙ, тип әйтергә өлгөрмәй ҡалдым. Борсолам, икеләнәм, әлеге лә баяғы теге уйҙарым бирмәй тынғылыҡ. Кеше ышанмаҫтай хәбәрҙе дөрөҫ булһа ла һөйләмә тигәндәй, ейәнемә лә ҡәйҙә йәнем.

Ана, Хамматым бүлмәһенән атлығып килеп сыҡты. Трюмола ятҡан хаҡтар күрһәтелгән кескәй ҡағыҙ киҫәктәрен тотҡан:

- Былдай аҡсаны эшләр өсөн бер тонна тир түгеү аҙ . Бриллиантлы алтын алҡа - алтмыш мең, бриллиантлы алтын балдаҡ - илле өс мең һум. ... Ҡабаланып йөрөгәнендә алтындарының хаҡтары тырым-тырағай көҙгө эргәһендә сәселеп ятып ҡалған. Былдай әйберҙе һатып алырлыҡ аҡсаны ҡайҙан алған икән беҙҙең әсәй?

-Улым, аңлышаһыңдыр, ундай хаҡ булмай. Атайың алып биргәндер.

- Юҡ, атайым әсәйемә бик ҡиммәтле шәшке туны алып биреп китте. Ул да йөҙ мең һум тирәһе.

Килендең бүлмәһенә яңылыш та ингәнем юҡ. Ике ҡатлы йортта кемдең ҡайҙа йөрөгәне беленмәй шул. Тормошомдағы һәр миҙгелде, һәр хәл-вәҡиғаны күңел иләгенән үткәреп, уландарымды күҙ алдына баҫтырам: Алмасым - Мәскәүҙә, Булатым- Өфөлә. Уларға бәләкәй ҡала тәҫ түгел хәҙер. Ҙур уҡыуҙы тамамланылар. Инде хәҙер үҙҙәренең ейәндәре бар. Бер ҡыйыш хәбәрҙәрен ишетмәнем. Бәлки, алыҫта йәшәүҙәре яҡшыраҡтыр. Барыны өсөн нисек түҙәләр бер йөрәк?

Көн кискә һарыҡты, тау артына тәгәрәгән ҡояш һуңғы нурҙарын сәсә. Тағы ниҙәр килтерер икән уҙып барған көн - билгеһеҙ. Күңел шулай ҙа нимәлер һиҙә. Бөгөнгә йәшем юғарылығынан фекер йөрөткәндә, яҙмышыма үпкәләргә хаҡым юҡ. Тик кеше ишетмәҫлек хәбәр йөрәгемде әрнетте, күпте күргән күҙем күрәгарауға әйләнде, йәғни күҙҙәрем, ҡараһа ла, күрмәй. Күпте кисергән күңелем, әйтерһең дә, минеке түгел. Бер уйлаһаң, ғәжәп. Әле лә моң тулышҡан мөлдөрәмә һағышлы күҙҙәрҙең минә төбәлгәнен шәйләмәйем дә. Дөрөҫөрәге, күрмәйем, танымайым. Мин уны тәүге тапҡыр күрәм кеүек...

- Атаҡ-атаҡ, Сафура, ниңә өндәшмәйһең? - тием. Сараһыҙлыҡтан, меҫкен хәленә төшкән Сафурам:

- Ниндәй гонаһтарым өсөн донъя минә ныҙты менән тора икән? Йәнем минең мәңге яралы...

Үкһеп-үкһеп илай. Күпме илаһа ла тынысланa алманы. Тышҡа сығып, битен һалҡын һыу менән йыуып килде лә:

- Ирем менән киленең юл фажиғәһенә эләккәндәр. Әле улар дауаханала. Ирле-ҡатынлы икәндәр, тип икеһен бер бүлмәгә һалып ҡуйғандар. Инде хәҙер белмәмеш тә күрмәмеш булып йөрөй алмаҫһың, Хаят инәй...

Йөрәгем алҡымыма килеп төйөлһә лә, һорай ҡуйҙым:

- Имендәрме, иҫәндәрме?

- Хәлдәре бик ауыр. Эргәләренә бер кемде лә индермәйҙәр.

- Әй әттәгенәһе, һау ғына булһындар. Үҙ балаларын үҙҙәре көтһөндәр...

Бейә кешнәмәһә, айғыр тешләмәй икәнен бик яҡшы беләм мин. Тик улемдән оят көслө. Кемдеке - шуныҡы. Бәләкәй ҡалала хәбәр тиҙ тарала. Етмәһә, ул ҙур түрәнең секретары. Киленем шул етәксенең белеше аша Себергә эшкә урынлаштырғайны йылдар буйы эшһеҙлектән йонсоған Азат менәт Әксәнде. Хеҙмәт хаҡы алып, кешесә йәшәй генә башлағайнылар ҙа бит. Уңдың да тиҫкәреһе була тигәндәй, тарттылар бит кирегә. Бер ус ҡылғандан кәбән өйөргә әҙер булған әрнеҙҙәрҙең береһе Себергә, Азатыма хәбәр итеп өлгөргән инде.

Төн уртаһы. Күңелдәге ут гәрәсәте бөтә булмышымды ялмап алған. Нисек йоҡлап ятмаҡ кәрәк былдай хәлдә. Тәҙрәләрҙән таң һарыһы ағыла. Нисек ойоп киткәнмен, белмәйем. Ул хәтлем оҙаҡ та серем итмәнем, ә шулай ҙа асыҡ һәм аныҡ төш күреп, һиҫкәнеп уянып киттем. Имеш, ҡартым иҫән... Кескәй генә Азатын, алтыным, нигеҙ ташым минең, тип яратып һөйә.

-Ҡасан кәләш алаһың? - тип шаяртҡан була үҙен. Уныһы:

-Бөгөн, хәҙер...

-Кемде?

-Сафураны.

Ул өндәшмәй, әммә мин уның ни әйткәнен күңелем менән тоям. Ҡартым:

- Сафураның сәсен аҡ таҫмалап, икенән үр, иң матуры булып йөрөһөн баҡса балалары араһында, ти. Ап-аҡ кейемен баштан-аяҡ ҡулдары менән һыпырып төшөрҙө. Кәфендең кеҫәһе юҡ, мин дә алып китмәнем донъя малын, ҡыҙғанма, тип аңғартыуы булғандыр, бәлки. Артабан ҡылмаһын ҡылып йөрөгән әлеге киленемдең тәүге тапҡыр йортобоҙға килеп ингән мәле пәйҙә булды.

Ҡурсаҡтай матур, елбәҙәк ҡыҙҙың әлегә торор ерем дә, һөнәрем дә, эшем дә юҡ, тигәс, йәлләпмелер, әллә ылыҡтырғыс төҫ-башы,буй-һыны әсир итте инде беҙҙе. Уны сит-ят күҙҙәрҙән ҡурсалап, күрше әбейгә фатирға индергәйнек. Төш тиһәң, төш тә хәтәр икән. Киленем беҙҙеке түгел, ә күршеләрҙеке, имеш. Уянып киттем дә, тәрән уйға ҡалдым: төш түгелдер, өндәр, өндәр был...

**(Аҙағы. Башы 33-сө һанда).**

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҒЫ

# КИНОСТУДИЯ...

## яңы фильм төшөрә

**"Башҡортостан" киностудияһы Башҡортостан Президентының мәҙәниәтте үҫтереүгә тәғәйенләнгән биш миллионлыҡ Грантына лайыҡ булды. Был Грант аҡсаһы режиссер Булат Йосоповтоң "Визит" исемле нәфис фильмын төшөрөүгә йүнәлтеләсәк.**

Фильмдағы ваҡиға Өфөлә, 1977 йылда бара. Данлыҡлы яҡташыбыҙ, балет артисы Рудольф Нуриев хаҡында бер һүҙ ҙә өндәшергә ярамаған саҡта, Иордания королеваһы Дина бин Абдель Хәмид (Фатима) рәсми визит менән Өфөгә килә. Әммә уның бында килеүенең төп сәбәбе - билдәле бейеүсенең әсәһе менән осрашыу була. Францияға эмиграцияға киткән Нуриевтың үҙенең туғандары менән осрашыу мөмкинлеге булмай, шуға ла королева үҙенең дипломатик бәйләнештәре менән файҙаланып, егерме йыл буйына улын күрмәгән әсәгә унан сәләм хәбәре алып килә. Королева үҙе бейеүсе менән балетта бейергә өйрәнеүсе ҡыҙҙары аша таныша. Ошондай үҙенсәлекле һәм мауыҡтырғыс тарих тураһында был ваҡиғаларҙың уртаһында йөрөүсе арҙаҡлы милләттәшебеҙ, визит мәлендә тәржемәсе итеп тәғәйенләнеүсе отставкалағы ФСБ полковнигы Йәүҙәт Исҡужин үҙенең "Туҡмаҡҡарандан Кандагарға тиклем" тип аталған хәтирәләр китабында һөйләй.

Фильмдың ижади коллективы 40 минутлыҡ был фильмды 15 көн эсендә төшөрөп, декабрь айында уны тамашасы хөкөмөнә сығарырға иҫәп тота. Ғөмүмән, кинорежиссер Булат Йосоповтоң был проекты эш башлауға тулыһынса әҙер булыуы ла был Грантты яулауға мөмкинлек бирә. Киностудия директоры Азамат Хужахмәтов әйтеүенсә, бындай Гранттар милли киноны үҫтереүгә булышлыҡ итәсәк.

**Зәһрә БУРАҠАЕВА,**
**"Башҡортостан" киностудияһы мөхәррире.**

ЙӘҮКӘ ТЕЛЕФОН

# ӘЛЛӘ ЗАМАНДАН АРТТА ҠАЛҒАНМЫН,

## әллә уны үтеп киткәнмен...



**Вәхит Хызыров үҙе юморлы кешеме, әллә юмор үҙе Вәхитлеме, әллә икеһе лә бер юлымы, һәр хәлдә, уның үҙен шул тиклем етди тотоп һөйләгән етди хәбәре лә эс ҡатып көлөрлөк булып сыға. Үҙе хаҡында, ниндәй юморист әрәм булып йөрөй, тип тә уйлап ҡуяһың. Юҡ, мин уны насар йырсы тип әйтмәйем, юморын һөйләп, сәхнәгә сыҡһа ла, ике жанрҙы берыңғай апарыр ине бит, тием.**

**Бер көндө ул йәүкә телефон аша шылтыратып, түбәндәге мәҙәк һүҙен бәйән итте.**

-Яңыраҡ тыуған ауылыма ҡайтҡайным. Машина менән урам буйлап үтеп барһам, өйө янындағы эскәмйәлә ултырған Һәнеүәт инәйҙе күреп, хәлен белешергә туҡталдым. Ике ҡуллап һаулыҡ һорашып, янына ултырҙым. Ул минең һорау биргәнде лә көтмәй, үҙ алдына һөйләнеп ултырғандай, ҡолаҡҡа шул һүҙҙәрҙе шыбырҙаны: "Кейәү ҡыҙын Сибайға алып китте. Көртүк насар сыға. Мунсаның иҙәне серегән. Кисәге Кәримә инәң менән сәй эстек. Пенсияң күберәк була, тине Путин телевизорҙан. Төнөн мотоцикл менән урам буйлап йөрөнөләр. Йоҡтап буманы. Нәғим Аҫҡарҙа. Әпсәң менән аятҡа барҙыҡ. Мәфрүзә киленгә. Ямғыр юҡ. Марсель үлде..."

Ошоларҙы әйтте лә, инәй, ҙур эш башҡарғандай, тынып ҡалды. Мин уға нимә тип яуап ҡайтарырға, әйткәндәренә ниндәйҙер баһа бирергә лә белмәйенсә: "Ярай, улайһа, инәй, латны", - тинем дә, хушлашып китеп барҙым. Шулай ҙа үҙемдән өс йәшкә өлкән Фәриҙә апайыма шылтыратып, Һәнеүәт инәйҙең әйткәндәрен һүҙмә-һүҙ еткергәйнем, апайым уның һүҙҙәрен йөпләп:

-Шулай инде, ҡалайтаһың, - тине лә, аҙағына урыҫсалап: "Так и положено", - тип өҫтәп ҡуйҙы.

Һаман да инәйҙе аңлап бөтмәйем: әллә замандан артта ҡалғанмын, әллә алға сығып киткәнмен инде? Заман, тигәндән, заманында атайымдың бер туған ағаһы Ҡужабай апам (Әбйәлилдә "бабай" тигәнде "апа" тиҙәр) ауылыбыҙҙың иң принципиаль һәм намыҫлы кешеһе булды. Коммунист ине, РСФСР Юғары Советына депутат булып һайланды. Уның берҙән-бер һәм иң ҡаты һүгенеү һүҙе "безобразие" ине.

Бер йылды беҙҙең ауылға газ үткәрергә булып киттеләр. Ауылыбыҙ урамы буйлап үҙәктәге магистралгә тоташтырып, ике метр тәрәнлегендә бер нисә саҡрымға һуҙылған траншея ҡаҙҙылар. Торба һалып күмгәнсе, траншея бер нисә көн асыҡ килеш ятты. Иртәнсәк һыйырҙарын көтөүгә ҡыуыусы Ҡужабай апам шул соҡорға төшкән дә киткән. Эй, йөрөгән апам траншея буйлап, эй, йөрөгән, әммә өҫкә сығырлыҡ баҫҡыс тапмаған. Төшкә тиклем йөрөгән ул берҙән-бер һүгенеү һүҙе "безобразие"һын ҡабатлап. Кемдер ишетеп ҡалып, өйөнән баҫҡыс алып килеп, өҫкә сығарғандар апамды. Шул саҡта ул: "Траншея ҡаҙыуын ҡаҙғас, өҫкә сығырға баҫҡыс һөйәһәләр ни була, халыҡты бөтөнләй уйҙамайҙар, безобразие", тип әйткән, имеш...

Х Х Х

**"Ҡотлағыҙ, дуҫтарым, мин олатай булдым!" тип шатлығын ҡайҙа ҡуйырға белмәйенсә, әле күптән түгел тағы ярһып шылтыратты редакцияға Башҡортостандың халыҡ артисы Вәхит Хызыров.**

Шунан ул халыҡ йырын башҡарырға әҙерләнгәндәй тәрән итеп тын алып, тынысланып, һүҙен шулай дауам итте:

-Ниндәй оло шатлыҡ, эсмәйенсә генә иҫерерлек ҡыуаныс икән ул олатай булыуы, егеттәр. Бер юлы ике бәләкәскә олатаймын бит! Мин уларға алдан уҡ исем әҙерләп ҡуйғайным инде. Малай тыуһа, Абдрахман, ҡыҙ тыуһа, Бибисара тип атармын тип ниәт иткәйнем. Бына һиңә -мә, игеҙәктәр донъяға килде, берәһе - малай, икенсеһе - ҡыҙ. Һе, егеттәр игеҙәктәр тыуҙырыуҙың серен дә таптым. Баҡтиһәң, бының өсөн алдан уҡ ике исем әҙерләп ҡуйыу ҙа етә икән. Өс исем уйлаһаң, өсәү тыуалыр инде. Юғиһә, ҡайһы бер аҡыллы баштар, ҡәләмшендә оҙаҡ итеп ятһаң, игеҙәк тыуа, тигән булалар. Буш һүҙ ул, юҡ һүҙ...

Сабыйҡайҙарҙың икеһе лә Маша өләпсәләренә оҡшап, күмгүк күҙле. Абдрахмандың тәне лә, сәсе лә һарғылт. Бибисара иһә, өс төҫлө: күҙе күмгүк, сәсе ерән, тәне ҡар-ҡара төҫтә, ҡыҫҡаһы, унда көнсығыш менән көнбайыш һыҙаттары бергә ҡушылған...

Эйе, өй эсе менән ҡыуанып бөтә алмайбыҙ ғаилә ағзаларыбыҙҙың бер юлы ике йәнгә артыуына. Сабыйҡайҙарҙы ҡулыбыҙҙан төшөрмәйбеҙ. Әсәләренең һөтө етмәй башлаһа, магазин һөтө эсерәбеҙ. Филармонияла бергә эшләүсе коллегаларыма ла олатай булыуым хаҡында ауыҙ һыуым ҡороп һөйләйем. Бер көн Наталья Дмитриева, йөйге канипулда сабыйҙарҙы ҡайҙа алып бараһығыҙ, тип һорағас, мин уға Абдрахманды - Ғафуриға, Бибисараны Әбйәлилгә ебәрәм тинем. Ә ул: "Как можно их разделить, как не жалеть свою кровинушку и отправить куда-то?" - тип бот сабып аптыраны. Артабан мин уға сабыйҙарҙы йәйгелеккә түгел, Ғафури менән Әбйәлилгә бөтөнләйгә оҙатам, тигәс, уларҙы йәлләп, күҙҙәренә йәш алды хатта...

Баландың балаһы балдан татлы, тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәр икән, егеттәр. Әле бына Абдрахман менән Бибисараның әсәләре Катя уларҙы ялай-ялай "йыуындырып" алды, аҙаҡ мин Катяның үҙен фитошампунь менән душта йыуындырып сығарҙым. Сабыйҙарымдың атаһын ғына күргәнем юҡ. Күрше подъезда йәшәүсе Бесмәтулла тиҙәр...

Бына шундай шатлыҡ та, мәшәҡәт тә алып килде беҙҙең йортҡа ошо бесәй балалары...

Шулай тип тамамлап ҡуйҙы һүҙен Вәхит Хызыров. Ә мин уның һүҙен ысынға алып, аҙаҡҡа тиклем уның "ейәнейәнсәре" өсөн ҡыуанып, ихлас тыңлап ултырған булдым...

**Һөйөндөк АҪЫЛОВ**
**тыңлап торҙо.**

МӨҒЖИЗӘЛЕ ХӘЛ

# ҠЫР ҺЫЙЫРҘАРЫ...

## параллель донъянанмы?

**Донъяла һүҙ менән аңлатып булмаҫлыҡ мөғжизәле хәлдәр булып тора бит ул. Хәйбулла районының Йәнтеш ауылында йәшәүсе Миҙхәт Илембәтов тә бынан өс йыл элек бер ғәжәйеп тә, сетерекле лә хәлгә тарый. Уның сәбәптәрен әле лә аңлап бөтә алмай Миҙхәт.**

Еңел автомашинаһы менән урман араһындағы юлда китеп барған саҡта юлыға ул был хәлгә. Ҡапыл уның ҡаршыһына унлаған һыйыр көтөүе килеп сыға ла, алда килгән эре мөгөҙлө мал, машинаһының капотына ҡаҡлыһып, машинаның алдағы маңлай тәҙрәһен ярып, кабинаның башы аша осоп үтә. "Ярай әле, һыйыр капотҡа бәрелгәс тә тиҙлекте шәбәйтеп өлгөрҙөм. Йүгиһә, мал маңлай тәҙрәмде ярып, салонға килеп инеп, үҙемде лә иҙә ине", тип иҫләй был хәлде Миҙхәт.

Юлдағы ҡараусыһыҙ малдың транспорт менән тәкөшөүҙәре бик йыш булып тора. Миҙхәт, һәр бер водителгә хас тиҙлек менән, шундуҡ машинаһын туҡтатып, һыйыр ҡазаланып ҡолаған урынға йүгерә. Был арала бер нисә секунд ҡына ваҡыт үтеп өлгөрә. Бындай осраҡта йүнсел ирҙәр ҡазаланған малды тиҙерәк салып ҡалырға, бының менән мал хужаһының күңелен күрергә лә ашыға бит инде. Әммә ул машинаһының арт яғында ла, юлдың ике яҡтағы соҡоронда ла, ғөмүмән, шул тирәләге ике йөҙ метр диаметрҙағы урман эсендә лә ҡазаланған һыйыр малын ғына түгел, ул ҡуша йөрөгән көтөүҙе лә таба алмай. Бик оҙаҡ шул тирәне ҡыҙыра ул.

"Һыйыр рәүешен алған ен-шайтандар менән тәкөшкәнмендер, күрәһең. Был хәлгә башҡа төрлө аңлатма таба алманым", тип көләмһөрәй Миҙхәт машинаһы кабинаһы башында малдан ҡалған тояҡ эҙҙәрен ныйпай-ныйпай.

Үкенескә күрәме, бәхеткә күрәме, беҙ үҙебеҙ йәшәгән донъяны ғына күреү һәләтенә эйәбеҙ. Малик Ибраһим үҙенең "Параллель донъя" тигән китабында тағы ла беҙгә параллель ете донъяның барлығын бәйән итә. Ҡөрьәндең "Ендәр" сүрәһе лә тап шуның иҫбаты булып тора. Аңлауыбыҙса, Ҡөрьән һынлы Ҡөрьәндә булмаған донъя хаҡында яҙылмаҫ та ине. Баҡтиһәң, ана шул параллелдәрҙең береһендә мышыларҙың һәм бөркөттәрҙең бер төрө йәшәй икән. Мышылар бигерәк тә ҡыш көндәре автомобиль трассаларына сығып, йәй ҡына үтеп барыусы транспорт аҫтына ҡалып ҡазалана. Был хәлдә шул өлкәнә өйрәнеүсе ғалимдар түбәндәгесә аңлата:

-Автомобиль беҙ йәшәгән донъяла оло тиҙлектә урман араһынан үткән трассала елдереп бара һәм ҡаршыһында ҡапыл пәйҙә булған мышыға бәрелә;

-был осраҡта үҙенең параллель донъяһында автомобиль юлын арҡырыға сығып барыусы мышы юғары тиҙлектә килеүсе транспорттан ҡапыл өркә;

-мышының ҡапыл өркөүе уны беҙ йәшәгән донъяға алып сығыусы сигнал булып тора ла инде;

-бөтә осраҡта ла көтөлмәгән ваҡиғаның бәрелеш менән тамамланыуы осраҡлы ваҡиға була алмай.

Ә бөркөттәрҙең үҙҙәренең параллель донъяһынан беҙҙең күктә ҡапыл пәйҙә булыуына беҙ бынан бер нисә йыл элек Салауат районында уҙған "Салауат йыйыны"нда күп тапҡырҙар шаһит булдыҡ инде. Майҙанда барған театрлаштырылған тамаша йөрәкте тетрәтер мәлгә еткәндә, һауала һәр ваҡыт бөркөттәр өйөрөлә башлауын иҫләйһегеҙҙер, моғайын...

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Миҙхәт тарыған сетерекле хәлдең аңлатмаһы ла тап ошондалыр. Кем белә, бәлки, Миҙхәт мышыларҙың бер төрө һаналған ҡыр һыйырҙары менән йорт һыйырҙарын бутаған ғыналыр. Булмаҫ, тимә...**

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

ИНТЕРНЕТТАН



# МУЗЫКАНЫ...
## күҙеңде йомоп тыңла

■ Алма һөйәктәрҙе нығыта, улар умыртҡа һөйәге проблемаларынан яфаланыусыларға һәм остеопороз буйынса хәүеф төркөмөнә инеүсе ҡатын-ҡыҙға ярҙам итә. Алмалағы күп күләмдәге антиоксиданттар һөйәк туҡымаһын нығыта. Ғалимдар әйтеүенсә, һөйәктәрҙең ныҡлығы ике төрлө күҙәнәктәрҙең - һөйәк туҡымаһын формалаштырыусы остеобластарҙар һәм уларҙы емереүсе остеокластарҙың эшмәкәрлегенән тора. Әгәр уларҙың икенселәре әүҙемерәк икән, һөйәк туҡымаһы яңырып өлгөрмәй һәм көсһөҙләнә башлай. Алма составындағы антиоксиданттар остеокластарҙың кире тәьҫирен нейтралләштерә. Эксперттар оло йәштәге ҡатын-ҡыҙға мотлаҡ алма ашарға ҡуша. Бынан тыш, һөйәктәр торошона түңәрәк формаһындағы башҡа емештәр ҙә яҡшы тәьҫир итә. Бигерәк тә ҡыҙыл төҫтәгеләре файҙалы. Улар, ҡағиҙә булараҡ, ликопин, флавоноид, ресвератрол һәм башҡа матдәләргә бай. Ҡыҙыл һәм зәғферән төҫөндәге емештәрҙән тыш, кальцийға бай һөт аҙыҡтарын ҡулланырға кәрәк.

■ Косметологтар белдереүенсә, тәүлек циклдары бит тиреһенең торошона төрлөсә йоғонто яһай, мәҫәлән, көндөң икенсе яртыһында биттәге һырҙар күберәк күренә. Ә иң шыма тире иртән була, сөнки төнгө ялдан һуң организм токсиндарҙан ҡотола. Шуға ла тире матур һәм саф күренә, бигерәк тә кисен дымландырыусы крем һөрткәндән һуң күҙәнәктәр кәрәкле матдәләр менән тулылана. Көн дауамында кешенең хәрәкәт итеүе, туҡланыуы, тирләүе һөҙөмтәһендә биттәге һырҙар тәрәнәйеп китә, был осраҡта һалҡын һыу менән йыуынып алыу бит тиреһен сафландырып ебәрәсәк, ти ғалимдар.

■ Музыканың психотерапевтик тәьҫирен көсәйтергә теләһәгеҙ, уны күҙҙәрегеҙҙе йомоп тыңлағыҙ, тип кәңәш итә Тель-Авив университеты (Израиль) ғалимдары. Эксперимент барышында ябыҡ күҙҙәр менән музыка тыңлағанда баш мейеһенең әүҙемләшеп китеүе билдәләнгән. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусыларға фильмдарҙан алынған популяр музыка тыңлатҡандар. Улар композицияны күҙҙәрен йомоп тыңлағанда баш мейеһенең әүҙемлеге үҙенең иң юғары кимәленә еткән. Ғалимдар фекеренсә, музыкатерапия йомоҡ күҙҙәр менән үткәрелергә тейеш. Әйткәндәй, музыканың баш мейеһен сәләмәтләндереүе лә табиптар тарафынан раҫланған.

■ Род-Айленд университеты (АҠШ) ғалимдары, шәкәрһеҙ һағыҙҙар ябығырға ярҙам итә, тип белдерә. Улар 35 ир-егет һәм ҡатын-ҡыҙ ҡатнашлығында һынауҙар үткәреп ҡараған. Был кешеләр көнөнә ике тапҡыр лабораторияға килеп ашаған. Уларға иртәнге һәм төшкө аш алдынан 20-30 минут алда һағыҙ сәйнәткәндәр. Һуңынан ғалимдар ашалған порцияны һәм метаболизм процесы әүҙемлеген үлсәгән. Баҡтиһәң, төшкө аш алдынан һағыҙ сәйнәүселәр әҙерәк ашаған һәм көн дауамында ҡапҡылап алыу ғәҙәтен онотҡан. Шуға ла һағыҙ ябығырға теләүселәрҙең яҡын дуҫына әүерелергә тейеш, тип иҫәпләй белгестәр.

"КИСКЕ ӨФӨ" - ИНТЕРНЕТТА

# МӘҒЛҮМӘТ ЯЛАНЫНА...
## аҡыллы һүҙ ҙә сығарайыҡ




**Интернет донъяны яулай икәнен беләбеҙ. Шул сәбәпле ҡағыҙ баҫмаларҙың ҡәҙере китә, уларҙы уҡыусылар һирәгәйә, тигән күҙаллауҙар ҙа таныш. Әммә ул күҙаллауҙарҙың дөрөҫкә сыҡмаҫын да беләбеҙ: ҡағыҙ баҫмаларҙы уҡыусылар һәр ваҡытта ла буласаҡ, тимәк, гәзиттәр, журналдар, китаптар ҙа баҫылыуын дауам итәсәк. Ә интернетҡа килгәндә… Ул, әлбиттә, шәп нәмә. Дөрөҫлөгө-дөрөҫ түгеллеге өсөн берәү ҙә яуап бирмәй биреүгә, ә шулай ҙа секунд эсендә теләһә ниндәй мәғлүмәт, һорауыңа яуап табып була. Ә бына аҡ ҡағыҙ битенә ҡара менән яҙылған һүҙ иһә барыбер ҙә хаҡлыҡҡа дәғүә итә. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, бөгөн бар донъя интернет "ауында". Балаларыбыҙҙы һәм йәштәребеҙҙе интернет менән мауығыуҙарҙан айырып алыу әлегә мөмкин түгел. Бәс, шулай икән, был мәғлүмәт яланында рухлы, аҡыллы һүҙ ҙә урын алырға тейеш. Шулай уйлаған булып, интернет селтәрендә "Киске Өфө" сайтынан тыш, айырым "Киске Өфө" блогы", унда "Киске Өфө" ҡунағы", "Аҡыл - ҡаҙна" биттәре астыҡ. Баҡтиһәң, интернет селтәрендә кеше аҡыллы һүҙ һөйләмәй икән, тигәнгә инандыҡ шунан. Ни тиһәң дә, бөгөн унда башлыса балалар һәм йәштәр ултыра, уларға төрлө уйындар, мажаралар, хатта әрләшеү, мәғәнәһеҙ бәхәсләшеүҙәр ҡыҙығыраҡ. Әммә улар ҙа үҫер, аҡыл туплар һәм… берҙән-бер көн килеп, улар интернетты үҙ-ара мәҙәни аралашыу, асылыбыҙ тураһында фекер алышыу майҙанына әүерелдерер, тип уйланыла. Шуға ышанайыҡ. Ә хәҙер "Киске Өфө" блогы"на ҡуйылған һорауҙарға анда-һанда ғына инеп, фекер ҡалдырған кешеләрҙең яҙғандарына күҙ һалайыҡ әле.**

▸ **"Киске Өфө" һорауы: "Ниндәй бюрократик ғәҙәттәр ҡаҡшата һеҙҙе? Уларҙы ниндәй юлдар, саралар менән бөтөрөп була?"**

**Әнүәр ШӘЙХЕТДИНОВ:** "Һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә лә бюрократия нығынғандан-нығына бара. Мин 2009 йылдан йөрәккә операция яһатҡандан һуң III группа инвалидымын. Йылына ике тапҡыр стационарҙа ятып дауаланырға, тиеп кәңәш ителгәйне табиптарҙың үҙҙәре тарафынан. Ләкин беҙҙә,Мәләүездә, ауырып китһәң дә, дауахананың кардиология бүлексәһенә эләгеүе бик ҡыйын, поликлиникала хәҙер инде 5 йыл кардиолог-табиб юҡ, участка табибы йүнәлтмә бирергә ҡурҡа, урын юҡ, ти. Бик төбәшһәң, һине комиссияға ебәрә, ул аҙнаһына бер генә көн ҡабул итә. Сирләп китһәң, көтәһең инде бер аҙна. Былтыр кардиология бүлексәһенә реанимациянан һуң ғына барып эләктем. Күҙҙәрем әҙерәк асылғандан һуң тирә-яҡты байҡап ҡараһам, 4 кешелек палатала бер үҙем ятам икән. Аяғыма баҫып йөрөй башлағас, күрҙем: башҡа палаталар ҙа ярымбуш. Дауахананан сыҡҡас, республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығының электрон ҡабул итеү бүлмәһенә "Ни өсөн Мәләүез дауаханаһы стационарына, урын юҡ, тип ауырыуҙарҙы һалмайҙар, урындар бар бит?" тип яҙып ебәрҙем. Минең һорауҙы Мәләүез дауаханаһының баш табибына ебәргәндәр, ул үҙенең яуабында былай тип яҙа:"Кардиология бүлексәһенең койка фонды 2011 йылда 50-нән 32-гә тиклем кәмене. Буш койкалар ғәҙәттән тыш хәлдәр өсөн резервта тотола..." Аптырарлыҡ хәл. Һаулыҡ һаҡлау системаһы һуғышҡа әҙерләнеп ята, тиерһең.

Әлбиттә, оптималләштереү тигән нәмә лә мәжбүр итәлер беҙҙең дауахананың ошондай режимда эшләүенә. Бер көндө кардиология бүлексәһенең ике посыһын береһен ҡыҫҡарталар, тип йүгерешә башланылар. Шул уҡ ваҡытта былтыр Мәләүездә 90 кеше йөрәк сиренән вафат булған, тинеләр. Бына һиңә оптималләштереү емештәре..."

▸ **"Киске Өфө" һорауы: "Һинең, минең һәм уның тәбиғәткә булған мөнәсәбәтте нисек баһалайһығыҙ?"**

**Рияз МӘСӘЛИМ:** "Бына ни хәтерләйем мин. 1974 йылдың йәйе. Совет Армияһы сафында хеҙмәт итеп йөрөгән сағым. Көнсығыш Ҡаҙағстандың көньяғында, СССР менән Ҡытай сигенән алыҫ булмаған ерҙә, Тарбағатай һырты янында булырға тура килде. Урджара (Үрьярамы икән беҙҙеңсә?) тигән ҡасабанан сығып китеп, шул уҡ атамалы йылғаның Тарбағатайҙан башланған, ғәмәлдә, бер кем дә йәшәмәгән, хатта кеше аяҡ та баҫмаған өлөшөндә булдыҡ. Тәбиғәт һәм тау-ҡалҡыулыҡтар формаһы беҙҙең Уралдыҡынан ныҡ ҡына айырыла. Әммә йылғаның инеше лә, Тарбағатай һырты ла, алыҫта күгәреп мөһабәт ҡалҡып торған һырттың өс километр бейеклектәге (2992 м) түбәһе Тастау ҙа (йәғни, Таштау) - барыһы ла миңә үҙебеҙҙең Әүәләк һыртын, унан башланып киткән Ағиҙелкәйҙе, ә Тастау - Әүәләк артынан мәғрур ҡалҡып торған Ирәмәлде хәтерләтте. Армияла тыуған яҡтарҙы айырыуса һағындыра шул. Ят ерҙәр булһа ла, мине бындағы тәбиғәттең хозурлығы, сафлығы, кеше ҡулы теймәгәнлеге таң ҡалдырҙы. Тау биттәре зәп-зәңгәр күгәрсен күҙе сәскәләренән тора, осоҡырыйы юҡ! Иҫ киткес! Иптәштәрем палаткаларҙа ял итә, ә мин ҡарауылда торам, тирә-яҡты байҡап, ят тәбиғәттең шул тиклем гүзәллеге менән ләззәтләнәм. Аҙаҡ ҡына, йылдар үткәс, миндә шундай фекер тыуҙы: миңә был ерҙең шундай мөғжизәле урынында булырға тура килмәгән икән, ти, мин бындай хозурлыҡты күрмәнем икән, ти, кеше күрмәгәс, кеше файҙаланмағас, был тәбиғи-илаһи матурлыҡты бушҡа яралтҡан булып сығамы инде Хоҙай? Кеше фекеренсә шулай бит: ул файҙаланмағас, ул тамаша ҡылмағас, Тәбиғәт-Әсәбеҙ юҡҡа ғына көсөн тәләф ҡылған булып сыға, йәнәһе. Бына шундай антропоцентризм кешенең аңы аҫтында йәшерен эш итә, Ерҙә, Донъяла, Йыһанда бар нәмә кеше өсөн, ул ҡулланһын өсөн, тигән инаныс тыуҙыра. Бындай антропоцентризм шәхестең эгоцентризмы кеүек дөрөҫ йүнәлешкә һалынырға тейештер. Сөнки кешелек донъяһы элекке "Тәбиғәт кеше өсөн" тигән ҡалыптан икенсе, нигеҙҙә, иң ғәҙел "Кеше Тәбиғәт өсөн" тигән принципҡа күсә бара. Көн кеүек асыҡ, Тәбиғәт булмаһа, кеше лә булмай. Ә Тәбиғәт, Ер, Йыһан кеше булмаһа ла булған, бар һәм буласаҡ..."

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Киске Өфө"блогы"на бик йыш инмәй интернет байҡаусылар. Ә беҙ унда ҡуйылған һорауҙар буйынса бергәләп фекер алышырға, ул фекерҙәрҙе гәзит биттәрендә лә сағылдырырға бик теләр инек. Саҡырабыҙ һеҙҙе "Киске Өфө" блогы"ндағы "Киске Өфө" ҡунағы", "Аҡыл - ҡаҙна" биттәренә сәйәхәт ҡылырға.**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1434 һижри йыл.*

| Август-сентябрь | Иртәнге намаҙ | Ҡояш сыға | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 26, дүшәмбе | 5:43 | 7:13 | 14:30 | 19:51 | 21:21 | 22:51 |
| 27, шишәмбе | 5:45 | 7:15 | 14:30 | 19:48 | 21:18 | 22:48 |
| 28, шаршамбы | 5:47 | 7:17 | 14:30 | 19:46 | 21:16 | 22:46 |
| 29, кесе йома | 5:49 | 7:19 | 14:30 | 19:43 | 21:13 | 22:43 |
| 30, йома | 5:51 | 7:21 | 14:30 | 19:41 | 21:11 | 22:41 |
| 31, шәмбе | 5:52 | 7:22 | 14:30 | 19:39 | 21:09 | 22:39 |
| 1, йәкшәмбе | 5:54 | 7:24 | 14:30 | 19:36 | 21:06 | 22:36 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

**Һуңғы йылдарҙа кешеләрҙең ышаныусанлығынан, берҡатлылығынан файҙаланып, сирҙәрҙе дауалайбыҙ, яҙмыштарҙы күҙаллайбыҙ, тип, күрәҙә һәм сихыр менән шөғөлләнеүсе һәм шул юл менән мал йыйыусы ялғансылар күбәйҙе. Был шөғөл халыҡҡа бик ҙур зыян килтерә. Сөнки сихыр һәм күрәҙәлек - Аллаһҡа һәм Уның Бәйғәмбәренә ышанмау, Уларға итәғәт итмәү, тигән һүҙ.**

# КҮРӘҘӘСЕГӘ ЫШАНМА...

## башыңа бәлә алма



Әлбиттә, исламда төрлө халыҡ дауалары менән дауаланыу рөхсәт ителгән. Ләкин мосолман кешеһе тейешле белеме, тәжрибәһе булған, шәриғәт рөхсәт иткән саралар ҡулланған ысын халыҡ табиптарына ғына мөрәжәғәт итергә тейеш. Аллаһы Тәғәлә ауырыуҙарҙы бар иткән һәм уларға ярашлы дауаларҙы ла яратҡан. Ысын халыҡ табиптары был турала хәбәрҙәр, ә мал йыйыу өсөн генә был эшкә тотонған наҙан кешеләр был хаҡта белмәй. Шуны беләйек: Аллаһ Үҙе хәрәм ҡылған ялған дауалар, күрәҙәлек итеү ҡолдарына шифа бирмәй. Шуға күрә беҙ хәләл менән хәрәмде айыра белергә тейешбеҙ.

Динебеҙ буйынса, күрәҙәселәр һүҙенә, улар еткергән мәғлүмәткә ышанырға ярамай. Сөнки улар ен-шайтандар менән эш итә, был турала хәҙистәрҙә етерлек һәм аныҡ әйтелгән. Ләкин кемдәрҙер күрәҙәселәрҙе, сихырсыларҙы "Уларға шундай талант бирелгән" тип маҡтап бөтә алмай. Иң оло гонаһтар, яңылышлыҡтар ҡыҙыҡтырғыс һәм мауыҡтырғыс тойола. Әммә былар Аллаһ Сүбхәнә үә Тәғәлә тарафынан тыйылған.

Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт салаллаһу ғәләйһиссәләм әйткән: "Күрәҙәсегә барып, унан ни ҙә булһа һораған кешенең 40 көн доғаһы (намаҙы) ҡабул булмаç". Шулай уҡ: "Күрәҙәсе һәм күрәҙәсегә мөрәжәғәт итеүсе - беҙҙең аранан түгел. Күрәҙәсегә барып, уның һүҙҙәренә ышанған кеше Мөхәммәт Бәйғәмбәр (с.ғ.с) өммәтенә ингәндәргә (ислам диненә) ышанмаусы була", - тигән.

Хәҙерге ваҡытта ниндәй генә гәзит-журналды асып ҡарама, улар күрәҙәсе, экстрасенс һәм төрлө бағымсылар рекламалары менән тулған. Ә халыҡҡа етә ҡала: кемуҙарҙан, юҡ аҡсаларын бар итеп, маҡталған күрәҙәсе-экстрасенстарға ағыла. Мәҙәк әҙләүме, сараһыҙлыҡтың сигеме, әллә наҙанлыҡмы был?

Сихыр - хәрәм ҡылынған һәм көфөрлөккә илтә торған эштәрҙең береһе. Аллаһы Тәғәлә Ҡөрьәндә әйткән: "...һәм улар Сөләймән батшалығында шайтандар уҡыған нәмәгә эйәрҙеләр. Сөләймән кафырҙарҙан түгел ине, ә Бабилда Һарут менән Марут тип аталған ике фәрештәгә төшөрөлгән нәмәне һәм сихырҙы кешеләргә өйрәтеп, шайтандар иманһыҙ булды. Әммә был икәү: "Беҙ фетнә-һынау ғына, иманһыҙ була күрмә!"- тип алдан иҫкәртмәйенсә тороп, бер кемде лә өйрәтмәне. Улар шул ике фәрештәнән ирҙе һәм ҡатынды нисек айырырға икәнлеген өйрәнделәр. Әммә улар Алланың рөхсәтенән башҡа бынын менән берәүгә лә зарар килтермәнеләр. Улар, үҙҙәренә зарар килтереп, файҙа бирмәй торған нәмәгә өйрәнделәр, һәм улар быны һатып алған кешенең киләсәк тормошта өлөшө булмауын беләләр ине. Үҙ йәндәре бәрәбәренә һатып алған нәмәләре насар булды. Әгәр улар быны белһә ине!" ("Әл-Бәҡара" сүрәһе, 102-се аят).

Аллаһы Тәғәлә Үҙенең Бәйғәмбәре аша ҡолдарына сихыр зәхмәтенән нисек арынырға, дауаланырға өйрәткән. Сихырҙан һаҡланыуҙың иң көслө сараһы - доға һәм Аллаһҡа зекер әйтеү, "Аятел Ҡөрси", "Ихлас", "Фәләҡ" һәм "Нәс" сүрәләрен уҡыу. Хаҡ мосолман булған кеше үҙен ауырыу йә насар итеп тойһа, иң тәүҙә күрәҙәсегә һәм бағымсыға йүгермәç, ә Аллаһтан шифа һорап, доға ҡылып, табиптан диагнозын белешеп, Бәйғәмбәребеҙ өйрәткәнсә дауаланырға тырышыр. Мөхәммәт (с.ғ.с) үҙенең өммәтенә күбенсә үләндәр, емештәр менән дауаланырға кәңәш иткән һәм дауаның сығанағы итеп Ҡөрьән һәм балды билдәләгән. Аяҡ аҫтында үсеп ултырған һәр үләндә төрлө ауырыуҙарға шифа бар. Был әллә ҡасан уҡ иҫбат ителгән. Әммә кешеләр дауаланыуҙың еңел ысулын эҙләпме, әллә үҙ-үҙенә ышанмау арҡаһындамы, үҙенең һаулығын, хатта булмышын сихырсыкүрәҙәселәр иркенә тапшыра.

Сихырҙы дауалау өсөн шәриғәт тарафынан рөхсәт ителгән дауалар бар. Бәйғәмбәребеҙ ғәләйһиссәләмгә боҙом ҡылынған ваҡытта Аллаһы Тәғәлә уны был яуызлыҡтан ҡотҡарған. Бары тик сихырсы эшләгән боҙомдо табып, уны юҡҡа сығарғандар. Шуның менән Аллаһ Үҙенең Бәйғәмбәренә шифа биргән. Ғәҙәттә, сихырсылар ептән төйөндәр яһап йәки башҡа ерһәнә беркетеп, шуға өрәләр һәм һүғалар. Әгәр был әйберҙәрҙе табып юҡ итһәң, Аллаһ ихтыяры менән сихыр зәхмәте лә бөтә.

Әгәр ауырыу үҙ аҡылында булһа, ҡайһы ваҡыт уның үҙенән Ҡөрьән уҡытып та дауалайҙар. Ә ҡайһы саҡта кемдер берәүҙең доға уҡып, ауырыуҙың күкрәгенә йәки башҡа ерен өрөүе генә лә шифа бирә. Был ваҡытта "Фәтиха", "Аятел Ҡөрси", "Әғраф", "Юныс" һәм "Тәһә" сүрәләренең мәғлүм аяттарын, "Кәфирүн" һәм Ҡөрьәндең һуңғы 3 аятын уҡырға кәрәк. "Ихлас", "Фәләҡ", "Нәс" сүрәләре өсәр тапҡыр уҡыла. Һәм Аллаһҡа дауаланыуға өмөт менән доға ҡылырға кәрәк. Дауалаусы - Аллаһ Үҙе. Ул һәр нәмәгә ҡөҙрәтле. Бәйғәмбәребеҙ (с.ғ.с.) әйткән:

"Дауаһын барлыҡҡа килтермәйсә, Аллаһы Тәғәлә бер сирҙе лә барлыҡҡа килтермәгән. Белеүселәр - был хаҡта белә, белмәгәндәр - белмәй".

**Айгизә АСҠАРОВА әҙерләне.**

ХӘҘИСТӘРҘӘН

# АЛДЫҠ - УЛ ШИКЛӘНЕҮ

Әбү Мөхәммәт Талиб Аллаһ Илсеһе (салаллаһу ғәләйһи үә сәләм) һөйләгәндәрҙән ишеткән һүҙҙәрҙе әйтеп ҡалдыра: "Шик тыуҙырған нәмәләрҙән баш тарт. Ысынлап та дөрөҫлөктә генә тыныслыҡ, ә алдыҡ - ул шикләнеү".

Әхмәд бин Ханбалдың "Мөснәд"ендә яҙылғанса, Хәсәндән: "Бәйғәмбәр әйткәндәрҙән иҫеңдә нимә ҡалды?" тип һорағастар, ул ошо хәҙисте килтергән. Шикле нәмәне айыра белеү өсөн диндар йөрәк тауышына ҡолаҡ һалырға тейеш. Дөрөҫлөк уға тыныслыҡ бүләк итер, алдыҡ күңел тынысһыҙлығы килтерер. Ошо уҡ хәҙистең икенсе вариантында Бәйғәмбәрҙән (салаллаһу ғәләйһи үә сәләм): "Шик тыуҙырған нәмәне нисек айыра алырмын?"- тип һорағандар. Ул былай тип яуап биргән: "Күлыңды йөрәгеңә һал. Тыйылғандан ул берсә лепелдәр, берсә тымыр, ә рөхсәт ителгәндән йөрәк тыныслаһыр".

Хаҡ иманлы ихлас ышаныу талап итә. Ихлас ышанып әйтелгән һүҙҙәр йә ҡылынған эштәр дөрөҫ булыу-булмауында шик тыумаçҡа тейеш. Шикләндергән нәмә менән булышыу хәрәм сигендә тороуҙы аңлата, унан баш тартыу - төпһеҙ упҡын ситенән артҡа сигенеүгә тин.

Бигерәк тә бөгөнгө көндә, ялған азатлыҡ рөхсәт ителгән һәм тыйылған нәмәләр араһындағы айырманы йыуып бөтөрөп барғанда, шикле әйберҙәргә сетерекле ҡараш "хәләл" һәм "хәрәм" төшөнсәләрен һаҡлап ҡалырға ярҙам итә. Шиктәрҙән арыныу мосолмандарҙы гонаһ ҡылыуҙан һаҡлай.

**Хәҙистән алынған дәрестәр:**

*Хәрәмдән һаҡланыу өсөн шикле нәмәләрҙән алыҫ торорға, тик хәләл - дин рөхсәт иткән эштәр ҡылырға кәрәк.

*Мосолман йөрәге ҡабул итмәгән нәмәләргә һаҡ ҡарарға, күңеленә хуш килмәгәнде башҡармаçҡа тейеш.

*Диндар мосолмандар оло гонаһ ҡылыуҙан ҡурҡа, кеселәренән йыраҡ йөрөй.

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## "Мега тормош". 30 көнлөк программа

### Етенсе көн.

**Беренсе бүлек: аҡыл. Фотографик хәтер**

Һәр кеше лә үҙендә "тәрәнгә" йәшерелгән фотографик хәтер булыуын белмәй. Иң мөһиме - уны уятып, уны файҙаланырға кәрәк. Моғайын, нимәнелер шул тиклем иҫегеҙгә төшөрөргә тырышып та иҫләй алмайынса, һуңынан ул үҙенән-үҙе хәтерегеҙгә төшкәне барҙыр. Быныҡ сере хәтерегеҙҙең үҙенсәлегендә - ул бары тик йоҡомһорап ятҡан һәм уны уятырға ғына кәрәк булған. Ҡасандыр кисергән ваҡиғалар, әһәмиәтһеҙ кеүек күренгән мәлдәренә тиклем, хәтерегеҙҙең иң төбөнә һалынған һәм бары тик хәтерҙең ошо үҙенсәлеген хәрәкәткә килтереү өсөн ниндәйҙер мәл генә кәрәк.

Хәтерҙең ысын ҡеүәтен хәрәкәткә килтереү өсөн аңығыҙ әҙерлек торошонда булған ваҡытта уға тейешле бойороҡ биреү кәрәк. Быныҡ өсөн иң тәүҙә үҙегеҙҙе тулыһынса тынысландырырға тейешһегеҙ. Тыныс урында арҡағыҙға ятығыҙ. 20 тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ һәм тынды сығарығыҙ. Тынды сығарған ваҡытта үҙегеҙҙән эске көсөргәнештең дә сығып китеүен күҙаллағыҙ.

Һуңынан уйығыҙҙа ғына аяҡтарығыҙҙан башығыҙға табан тәнегеҙгә тулыһынса көсөргәнештән арынырға бойороғоҙ. Мәҫәлән, аяҡ табандарынан башлап, үҙегеҙгә: "Аяҡ табандарым ауыр, мин уларҙың ауырлығын тоям", - тиегеҙ. Һуңынан яйлап ҡына өҫкә күтәрелегеҙ. Тиҙҙән тотош тәнегеҙҙең йылыныуын һәм көсөргәнештән арынғанын тойорһоғоҙ. Был ваҡытта иҫ китмәле ҡеүәткә эйә төпкө аң һеҙҙең бойороҡтарығыҙҙы ҡабул итергә әҙер. Биш минут дауамында түбәндәге бойороҡто ҡабатлағыҙ: "Хәтерем бик яҡшы, мин үҙемә кәрәк бөтөн нәмәне иҫләй алам. Ихтыяр көсө иҫәбенә хәтерем ныҡ яҡшы һәм ул минә хеҙмәт итә". Был күнекмәне 21 көн дауамында эшләгеҙ һәм тиҙҙән иҫ киткес үҙгәрештәр тойорһоғоҙ.

**Икенсе бүлек: тән. Дөрөҫ тын алыу көсө**

Тәрән итеп тын алыу көсөргәнештән арындырып, йәшәү дәрте һәм энергия бирер. Тәрән тын алыу күҙәнәктәрҙең һәҙәмтәләрәк эшмәкәрлеген тәьмин итеп, үҙенә күрә организмдың "каналдар системаһы" булып тороусы лимфа системаһының эшмәкәрлеген әүҙемләштерә. Тәрән тын алыу ҡанды кислород менән байыта, был инде дөйөм сәләмәтлекте нығытырға ярҙам итә.

**Күнегеү.** Тәрән тын алыуҙы түбәндәге график буйынса эшләргә кәрәк: 2 - 8 - 4. Тын алыу яҡынса ике секундта башҡарылырға тейеш. Артабан һигеҙ секундҡа тынды тотоп торорға кәрәк. Тынды дүрт секунд эсендә сығарып бөтөрөргә. Был күнекмәне сериялап - көнөнә 10 тапҡыр тын алып өс тапҡыр ҡабатлағанда, һеҙ хәл-торошоғоҙҙо ла, сәләмәтлегегеҙҙе лә яҡшыртасаҡһығыҙ.

**Өсөнсө бүлек: характер. Ныҡышмалылыҡ уңыш килтерә**

Һәр бөйөк кеше данға күмелгәнсе һәм уңышҡа өлгәшкәнсе бер нисә тапҡыр уңышһыҙлыҡ кисергән. Эдисон электр лампаһын уйлап тапҡанға тиклем 10 мең уңышһыҙ тәжрибә үткәргән, тиҙәр. Уңышы серҙәре менән бүлешеүен һорағас, ул: "Мин бик күп тапҡыр уңышһыҙлыҡ кисерҙем, артабан инде уңыш ҡаҙаныуҙан башҡа юлым юҡ ине. Мин бары тик уңышһыҙлыҡтың барлыҡ запасы аша үтеп бөттөм", - тип яуаплаған. Ныҡышмал кешене бер нәмә лә һайлаған юлынан тайпылдырырға тейеш түгел. Быны ни тиклем иртәрәк аңлайһығыҙ - шул тиклем яҡшыраҡ. Беҙҙе уратып алған кеүек тойолған проблемалар өҫтөндә йәш туккансе, уларҙы һынау тип ҡабул итегеҙ һәм характерығыҙҙы ныҡлыҡҡа тикшереп ҡарау мөмкинлеге, үҫеү һәм камиллашыу өсөн этәргес көс тип ҡарағыҙ. Яҙмыш һынауҙары һеҙҙең юлығыҙҙа даими осрап торор, әммә еңеүсе уларҙы яратырға, уларҙан һабаҡ алырға һәм уларҙы хәл итергә интылырға тейеш.

**Робин ШАРМА.**



## 26 АВГУСТА ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым" (12+)
13.45 "Истина где-то рядом"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Женский доктор-2". Сериал (16+)
16.10 "Последний герой" (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Террористка Иванова". Сериал (16+)
23.30 "Джо". Сериал (16+)
00.25 "Мужество в бою". Драма
02.35, 03.05 "Девушка номер 6" (16+)
03.00 Новости
04.30 "Контролная закупка"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан"
09.00 "1000 мелочей"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50, 14.50 "Вести. Дежурная часть"
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.00 "Особый случай" (12+)
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
15.00 "Тайны института благородных девиц", 158-я серия. Сериал
16.00, 17.30 "Всегда говори "всегда-5". Сериал (12+)
17.10 "Вести - Башкортостан"
18.30 "Прямой эфир" (12+)
19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Склифосовский-2". Сериал (12+)
23.40 "Измеритель ума. IQ" (12+)
00.40 "Девчата" (16+)
01.25 "Кино про кино" (16+)
03.15 "Закон и порядок-17" (16+)
04.00 "Комната смеха"

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
09.30 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.50 "Замандаштар". Вәкил Ильясов (6+)
10.15 "Башҡортостандың ете мөғжизәһе". "Ҡурай" (6+)
11. 10 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (6+)
11.30 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.45 "Наза". Башҡорт халыҡ бейеүҙәре (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Сыңла, ҡумыҙ". Концерт. 2011й. (6+)
21.00 "Урал моңо - 2008" (12+)

### БСТ
**07.00 "Сәләм!" (12+)**
**10.00 "Новости недели" (на баш. яз) (16+)**
**10.30, 12.30, 14.35, 17.10, 17.40, 02.10, 06.15 "Выборы-2013" (16+)**
**10.45 "Семәр"**
**11.00 "Городок АЮЯ"**
**11.15, 02.00 "Замандаштар" (6+)**
**11.30 "Новости недели" (на русс. яз.) (16+)**
**12.00 "Ура, каникулы!"**
**12.40 "Учим башкирский язык"**
**12.45, 06.45 "Весело живем" (12+)**
**13.00 "Уңған килен" (16+)**
**13.30, 00.30 Новости (на башк. яз.)**
**13.40 "Песни композитора С. Низаметдинова"**
**14.45 "Создай свое дело" (12+)**
**14.55 "Кубок Республики Башкортостан по хоккею". В перерывах: Новости**
**17.15 "Доброе сердце" (6+)**
**17.50, 02.15 "Эдера" (12+)**
**18.45 "Церемония открытия. Кубок Республики Башкортостан по хоккею. Прямая трансляция**
**21.30, 03.00 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Следопыт"**
**22.30, 03.30 Художественный фильм (16+)**
**01.00 "Единое время" (16+)**
**06.30 "Полезные новости" (12+)**

## 27 АВГУСТА ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым" (12+)
13.45 "Истина где-то рядом"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Женский доктор-2" .Сериал (16+)
16.10 "Последний герой". Ток-шоу (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Террористка Иванова". Сериал (16+)
23.30 "Джо". Сериал (16+)
00.25 "Американский пирог: свадьба". Комедия (16+)
02.10, 03.05 "Сухое прохладное место" (12+)
03.00 "Новости"
04.10 "Контрольная закупка"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан"
09.00 "Ауаз"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Выборы-2013"
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50, 14.50 "Вести. Дежурная часть"
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.00 "Особый случай" (12+)
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
15.00 "Тайны института благородных девиц", 159-я серия. Сериал
16.00, 17.30 "Всегда говори "всегда-6". Сериал (12+)
17.10, 19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
18.30 "Прямой эфир" (12+)
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Склифосовский". Сериал (12+)
23.40 "Битва за соль. Всемирная история"
00.50 "Выгодный контракт"
03.30 "Закон и порядок-17" (16+)
04.25 "Комната смеха"

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Дарман" (6+)
08.15 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Кәмит". Юмор (6+)
08.30 "Йәштәр тауышы" . Йырҙар (6+)
09.15 "Замандаштар". Ғәзим Ильясов (6+)
09.30 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн". Йырҙар (6+)
11.45 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.45 "Наза". Донъя халыҡтары бейеүе (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Урал моңо-2010" (6+)
20.00 "Кис ултырып". Фәрүәз Урманшин. Концерт (12+)

### БСТ
**07.00 "Сәләм!" (12+)**
**10.00 "Круизы в мир открытий" (16+)**
**10.30, 12.30, 14.35, 17.10, 02.10, 06.15 "Выборы-2013" (16+)**
**10.45 "Зеркальце" (6+)**
**11.00 "Царь горы"**
**11.15, 17.00, 02.00 "Замандаштар" (6+)**
**11.30 "Здоровое решение" (12+)**
**12.00 "Ура, каникулы!"**
**12.40, 16.15 "Учим башкирский язык"**
**12.45, 01.45, 06.45 "Весело живем" (12+)**
**13.00 "Уңған килен"**
**13.30, 00.30 Новости (на башк. яз.)**
**13.40 "Мелодии лета"**
**14.10 "Тәмле" (12+)**
**14.45 "Автограф. М. Гиляжев"**
**15.15 "Книга сказок"**
**15.30 "Гора новостей"**
**15.45 "Борсак"**
**16.00 "Йырлы кәрәҙ"**
**16.30, 21.30, 03.00 "Новости (на русс. яз.)**
**16.45 "Криминальный спектр" (16+)**
**17.50, 02.15 "Эдера" (12+)**
**18.45 "Кубок Республики Башкортостан по хоккею. Прямая трансляция"**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+)**
**22.30, 03.30 Художественный фильм (16+)**
**01.00 "Единое время"**
**06.30 "Полезные новости" (12+)**

## 28 АВГУСТА СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым" (12+)
13.45 "Истина где-то рядом" (16+)
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Женский доктор-2". Сериал (16+)
16.10 "Последний герой" (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.45 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Террористка Иванова". Сериал (16+)
23.30 "Джо". Сериал (16+)
00.25 "Скала". Боевик (16+)
03.00 Новости
03.05 "Замороженная планета" (12+)
04.00 "Вячеслав Зайцев. Всегда в моде"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан"
09.00 "1000 мелочей"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50, 14.50 "Вести. Дежурная часть"
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.00 "Особый случай" (12+)
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.50, 04.45 "Вести. Дежурная часть"
15.00 "Тайны института благородных девиц", 160-я серия. Сериал
16.00, 17.30 "Всегда говори "всегда-6". Сериал
17.10 "Местное время. Вести - Башкортостан"
18.30 "Прямой эфир" (12+)
19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Склифосовский-2". Сериал (12+)
23.50 "Один в океане". Док. фильм (12+)
00.55 "Выгодный контракт"
02.15 "Закон и порядок-17" (16+)
04.00 "Комната смеха"

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
09.45 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (6+)
10.45 "Онотолор тимә...". Ретро (6+)
11.10 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
11.45 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.20 "Байыҡ". 1-се тур (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Хазина". Риф Бикбаев. Концерт (6+)
19.00 "Елғыуар". Фильм (6+)
21.00 "Кис ултырып". Зилә һәм Хәсән Усмановтар (12+)

### БСТ
**07.00 "Сәләм!" (12+)**
**10.00 "Круизы в мир открытий" (16+)**
**10.30, 12.30, 14.35, 17.10, 02.10, 06.15 "Выборы-2013" (16+)**
**10.45 "Шатлык йыры"**
**11.00 "Книга сказок"**
**11.15, 17.00, 02.00 "Замандаштар" (6+)**
**11.30 "Отдел культуры" (12+)**
**12.00 "Ура, каникулы!"**
**12.40, 16.15 "Учим башкирский язык"**
**12.45, 06.45 "Весело живем"**
**13.00 "Уңған килен" (16+)**
**13.30, 18.30, 00.30 Новости (на башк. яз.)**
**13.40 "Байыҡ-2013"**
**14.45 "Автограф" (6+)**
**15.15 "Цирк в 13 метров"**
**15.30 "Гора новостей"**
**15.45 "Семәр"**
**16.00 "Городк АЮЯ"**
**16.30, 21.30, 03.00 Новости (на русск. яз.)**
**16.45 "Орнамент"**
**17.50, 02.15 "Эдера" (12+)**
**18.55 "Футбол. Первенство ФНЛ. Прямая трансляция"**
**21.00 "Жизнь замечательных людей"**
**21.15 "Деловой Башкортостан"**
**22.00 "Историческая среда"**
**22.30 "Аль-Фатиха"**
**23.00, 03.30 Художественный фильм (16+)**
**01.00 "Единое время" (12+)**
**06.30 "Полезные новости" (12+)**

## 29 АВГУСТА ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым" (12+)
13.45 "Истина где-то рядом"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Женский доктор-2". Сериал (16+)
16.10 "Последний герой" (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.45 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Террористка Иванова". Сериал (16+)
23.30 "Джо". Сериал (16+)
00.25 "Дневник Бриджит Джонс". Комедия (16+)
02.15, 03.05 "Кокон" (12+)
03.00 Новости

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан"
09.00 "От всей души"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Выборы-2013"
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50, 14.50 "Вести. Дежурная часть"
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.00 "Особый случай" (12+)
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
15.00 "Тайны института благородных девиц", 161-я серия. Сериал
16.00, 17.30 "Всегда говори "всегда-6". Сериал (12+)
17.10 "Местное время. Вести - Башкортостан"
18.30 "Прямой эфир" (12+)
19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Склифосовский-2". Сериал (12+)
23.45 "Рейс 007. Пассажирский разведывательный" (12+)
00.50 "Выгодный контракт"
02.10 "Закон и порядок-17" (16+)
04.00 "Комната смеха"

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Йырлап асыла күңел " (6+)
08.15 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
09.00 "Замандаштар". Нәҡиә Исҡужина (6+)
09.30 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.45 "Башҡортостандың ете мөғжизәһе". "Мораҙым тарлауығы" (6+)
10.05 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
11.30 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.45 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 Хәлит Фәтихов. Концерт (6+)
17.00 "Тылсымлы ҡурай". Әбйәлил районы (6+)
20.30 "Күңелемдең иләҫ-миләҫ сағы ". Зөһрә Фәйзуллина (12+)

### БСТ
**07.00 "Сәләм!" (12+)**
**10.00 "Круизы в мир открытий"**
**10.30, 12.30, 14.35, 17.10, 02.10, 06.15 "Выборы-2013" (16+)**
**10.45 "Каникулы НЕстрогого режима"**
**11.00 "Цирк в 13 метров"**
**11.15, 17.00, 02.00 "Замандаштар" (6+)**
**11.30 "История признания" (16+)**
**11.45 "Мир настоящих мужчин" (16+)**
**12.00 "Ура, каникулы!"**
**12.40, 16.15 "Учим башкирский язык"**
**12.45, 06.45 "Весело живем" (12+)**
**13.00 "Уңған килен"**
**13.30, 00.30 Новости**
**13.45 "Концерт" (12+)**
**14.35 "Автограф" (6+)**
**14.45 "Куласа" (12+)**
**15.15 "Ғәләмәт донъя"**
**15.30 "Гора новостей"**
**15.45 "Шәп арба"**
**16.00 "Йырлы кәрәҙ"**
**16.30, 21.30, 03.00 Новости**
**16.45 "Орнамент"**
**17.50, 02.15 "Эдера" (16+)**
**18.45 "Кубок Республики Башкортостан по хоккею. Прямая трансляция"**
**21.15 "Деловой Башкортостан"**
**22.00 "ФК "Уфа"**
**22.30, 03.30 "Художественный фильм" (16+)**
**01.00 "Единое время" (12+)**
**06.30 "Полезные новости" (12+)**

## 30 АВГУСТ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым (12+)
13.45 "Истина где-то рядом"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Женский доктор-2". Сериал (16+)
16.10 "Последний герой" (16+)
18.00 Вечерние новости
18.45 "Человек и закон" (16+)
19.50 "Поле чудес"
21.00 "Время"
21.30 "Один в один!"
00.30 "Рок-н-ролл в объективе:". Док. фильм (16+)
02.40 "С девяти до пяти". Комедия (12+)
04.45 "Замороженная планета" (12+)

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Местное время. Вести - Башкортостан"
09.00 "Ауаз"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50, 14.50 "Вести. Дежурная часть"
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.00 "Особый случай" (12+)
14.00 "Вести"
14.30 "Вести - Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
14.50 "Тайны института благородных девиц". 162-серия
16.00, 17.30 "Всегда говори "всегда-6". Сериал
17.00 "Вести"
17.10 "Вести - Башкортостан"
18.30 "Прямой эфир" (12+)
19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Шеф полиции". Сериал (16+)
00.45 "Хребет дьявола". Фильм ужасов (16+)
03.00 "Честный детектив" (16+)
03.40 "Горячая десятка" (12+)

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45"Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
09.15 "Моңло аҙан". Дини йырҙар (6+)
09.35 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (6+)
10.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
11.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
11.30 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.45 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Мөғжизәгә килә ышанғым". Вәхит Хызыров (6+)
17.00 "Һуңғы Ғәйнә". Спектакль (6+)
20.00 "Кис ултырып". "Юлдаш йыры". Концерт (12+)

### БСТ
07.00 "Сәләм!" (12+)
10.00 "Круизы в мир открытий" (16+)
10.30, 12.30, 14.35, 17.10, 17.40, 06.45 "Выборы-2013" (16+)
10.45 "Город АЮЯ"
11.00 "Ғәләмәт донъя"
11.15, 18.30 "Замандаштар" (6+)
11.30 "ФК "Уфа"
12.00 "Ура, каникулы!"
12.40 "Учим башкирский язык"
12.45 "Весело живем" (12+)
13.00 "Уңған килен" (16+)
13.30, 00.30 Новости (на башк. яз.)
13.40 "Солнечная мелодия" (6+)
14.45, 17.50 "Создай свое дело" (12+)
14.55, 18.45 "Кубок Республики Башкортостан по хоккею". Прямая трансляция. В перерывах: Новости
17.15 "Доброе сердце" (6+)
18.00 "Йома"
21.30, 03.00 Новости (на русск. яз.)
22.00 "Уфимское "Времечко" (12+)
22.30 "Отдел культуры" (12+)
23.00 "Дарман"
23.45 "Волшебный мир музыки" (12+)
01.00 "Смелая музыка"
05.15 "Художественный фильм" (16+)
06.30 "Полезные новости" (12+)

## 31 АВГУСТА СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости
06.10 "Мертвые воды Московского моря" (16+)
08.20 "Дисней-клуб"
08.45 "Смешарики. Новые приключения"
09.00 "Играй, гармонь любимая!"
09.45 "Слово пастыря"
10.00, 15.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Смак" (12+)
10.55 "Наталья Гундарева. Запомните меня такой" (12+)
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Идеалъный ремонт"
13.10 "Желаю Вам". Док. фильм к юбилею Роберта Рождественского)
15.10 "Одиноким предоставляется общежитие". Лирическая комедия (12+)
16.55 "Свадебный переполох" (12+)
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.15 "Певцы на час" (12+)
19.15 "Угадай мелодию"
19.50 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым"
21.00 "Время"
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым" (16+)
23.00 "Агент Джонни Инглиш: Перезагрузка". Комедия (12+)
00.55 "Под куполом" (16+)
01.50 "Расчет" (16+)
03.35 "Африканские кошки: королевство смелых" (12+)
05.15 "Контрольная закупка"

### РОССИЯ 1
06.00 "Аэлита, не приставай к мужчинам". Комедия
06.35 "Сельское утро"
07.05 "Диалоги о животных"
08.00 "Вести"
08.10 "Местное время. Вести - Башкортостан" (16+)
08.20 "Военная программа" Александра Сладкова"
08.50 "Планета собак"
09.25 "Субботник"
10.05 "Качество жизни"
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.20 "Вести. Дежурная часть"
11.55 "Честный детектив" (16+)
12.25, 14.30 "Нечаянная радость". Мелодраматический сериал (12+)
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести - Башкортостан"
16.50 "Субботний вечер"
18.50, 20.30 "Ради тебя". Мелодраматический сериал (12+)
20.00 "Вести"
23.10 "Маша". Мелодрама (12+)
01.00 "Схватка". Боевик (16+)
03.25 "Проект А-2" (16+)

### ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
08.20 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.35 "Тәмле" (12+)
09.15 "Ҡош юлы". Рамазан Йәнбәков (6+)
10.15 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (6+)
10.25 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн". Лилиә Биктимерова йырлай (6+)
11.00 "Онотолор тимә... ". Ретро (0+)
11.25 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.45 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 Әлфиә Юлсурина. Концерт (12+)
19.00 "Етегән". Хит-парад (6+)
21.00 "Форест Гамп". Фильм (12+)

### БСТ
**07.00, 19.30 Новости (на башк. яз.)**
**07.15 "Доброе утро!"**
**07.45 "Фильм детям"**
**09.00 "Көндәлек" (6+)**
**09.30 Мультфильм**
**10.00 "Сәләм+" (12+)**
**10.15 "Бәхетнамә"**
**10.45, 03.30 "Теплый дом"**
**11.30 "Аль-Фатиха"**
**12.00 "Следопыт"**
**12.30, 21.30, 03.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.45 "Здоровое решение" (12+)**
**13.15 "На соискание премии им. Ш. Бабича. Урал Аминев" (6+)**
**13.45 "Весело живем"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00, 04.15 "Арслан" (16+)**
**16.45, 06.45 "Выборы-2013" (16+)**
**17.00, 05.00 "Берегись автомобиля" (на башк. яз.) (16+)**
**18.30 "Хазина"**
**19.00 "Башкорттар"**
**20.00 "Сәңгелдәк"**
**20.15 "Еду я в деревню"**
**20.45 "Живое село" (12+)**
**21.15 "Деловой Башкортостан"**
**22.00 "Башҡорт йыры - 2013"**
**22.45 "Концерт Альфии Каримовой и звезд мировой оперы" (12+)**
**01.00 Художественный фильм (16+)**
**03.30 "Доброе сердце"**
**06.30 "Замандаштар" (6+)**

## 1 СЕНТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.35, 06.10 "Мертвые воды Московского моря" (16+)
06.00 Новости
07.45 "Служу Отчизне!" (16+)
08.15 "Дисней-клуб"
08.40 "Смешарики. ПИН-код"
08.55 "Здоровье" (16+)
10.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Непутевые заметки"
10.35 "Пока все дома"
11.25 "Фазенда"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Ералаш"
12.40 "Актеры. Жизнь после славы" (16+)
13.45 "Большая перемена". Лирическая комедия
18.50, 19.45, 21.15 "Голос". Лучшее (16+)
21.00 "Воскресное "Время"
22.30 "Клуб Веселых и Находчивых"
23.55 "Написано Сергеем Довлатовым". Док. анимационный фильм (16+)
02.55 "Беглый огонь". Боевик (16+)

### РОССИЯ 1
05.50 "Волшебная сила". Детектив
07.20 "Вся Россия"
07.30 "Сам себе режиссер"
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна"
08.50 "Утренняя почта"
09.30 "Сто к одному"
10.20, 14.20 "Вести - Башкортостан. События недели"
11.00 "Вести"
11.10 "Городок. Дайджест"
11.45 "Мой папа - мастер"
12.15, 14.30 "Обучаю игре на гитаре". Мелодраматический сериал (12+)
14.00 "Вести"
14.20 "Вести - Башкортостана"
16.20 "Смеяться разрешается".
18.20 "Наш выход!". Музыкальное шоу
20.00 "Вести"
20.30 "Счастливый маршрут". Мелодрама (12+)
22.30 "Мечты из пластилина". Мелодрама (12+)
00.15 "Малахольная". Мелодрама (12+)
02.25 "Затерянные в космосе" (16+)

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
09.15 "Замандаштар". Уйылдан Сәитов (12+)
09.45 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (6+)
10.50 "Йырлап асыла күңел" (6+)
11.30 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.45 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Айһылыуҙың айлы кистәре". Спектакль (6+)
19.00 "Йондоҙло сәғәт". "Дарман" проекты (6+)
20.00 "Бәхетле троллейбус". Фильм-концерт (0+)
20.30 Рәүилә Мәсәлимова. Концерт (12+)

### БСТ
**07.00 Новости (на башк. яз.)**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.30 "Йома"**
**09.00 "Еду я в деревню"**
**09.30 "Живое село"**
**10.00 "Бауырһаҡ"**
**10.15 "Городок АЮЯ"**
**10.35 "Шәп арба"**
**10.45 "Шатлык йыры"**
**11.00 "Байтус"**
**11.15 "Семәр повтор"**
**11.30 "Книга сказок"**
**11.45 "Алтын тирмә"**
**12.30 "Үткән ғүмер"**
**13.00 "Детский "Байыҡ-2013"**
**16.00 "Дорога к храму"**
**13.30 "Башкорттар"**
**16.30 "Замандаштар" (6+)**
**16.45, 02.10, 06.15 "Выборы-2013" (16+)**
**17.00 "Историческая среда"**
**17.30 "Мир настоящих мужчин" (12+)**
**17.45 "Орнамент"**
**18.00 "Любимое дело"**
**18.30, 21.30 "Новости недели"**
**18.55 1/32 Кубка России по футболу. Прямая трансляция**
**21.00 "Урал Лото 6 из 40" (16+)**
**21.15 "Бизнес-обзор"**
**22.00 "Байыҡ-2013"**
**23.00 "Вечер.com" (12+)**
**23.45 "Jazz, Folk, Rock" (12+)**
**01.00, 06.30 "Единое время" (16+)**
**02.15 Художественный фильм (16+)**
**04.00 М. Карим . "Долгое-долгое детство"**


*ИҒЛАН*

**31 август 23 сәғәттә** Өфө ҡалаһының "А-Кафе" клубында өр-яңы форматта башҡорт йәштәре өсөн **"Майҙан"** дискотекаһы үтәсәк. Кисәне МС Бурзой алып бара, музыкаль яҡтан Dj-Хан биҙәй. Махсус ҡунаҡ - Сәғиҙулла Байегет! Ойоштороусы - Dарман проекты. Хаҡы - 250 һум, сара көнөндә 350 һум. Бәйләнеш телефоны: **89656659565.**

✓ *Был кистә баш ҡаланың төрлө районында 15-тән артыҡ майҙан эшләйәсәк. "Башавтотранс" компанияһы автобустары "Театраль маршрут" буйынса хәрәкәт итеп, тамаша күрергә теләүселәргә уңайлыҡтар тыуҙырасаҡ.*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# ҒАФУРИ РАЙОНЫ



**Горизонталь буйынса:** 1. Ҙур яры ҡанатлы төнгө йәнлек. 11.Мәжит Ғафури исемен йөрөткән сәхнә. 12. Берәй йәнлек таралған урын. 13. Ҡан тамырындағы ойошҡан ҡан. 14. Бабамдан ҡалған иҫке тун, ябын да йылыһында ҡун.15. Ғәрәптәр уйлап сығарған математика. 18. Мәмерйәлә аҫылынып торған минераль ултырма. 28. Американан килгән никотин сығанағы. 29. Минлек тойғоһо; намыҫ, ғәр. 31.Иркен, киң урын. 34. Дөйөм берәй эш, кәрәк өсөн халыҡтан йыйылған ярҙам. 36. Оҫталыҡ дәрәжәһе. 37. Титестер уның төмен билдәләй. 39. Салғы ла ала алмаған ялан үләне. 42. Индеецтар ҡулланған ағыу. 47. Аҙна көнө. 50. Ағас һырты. 55. Сит ырыуға яһалған һөжүм. 56. Энәһе бар - тотоп булмай, энәһе менән тегеп булмай. 57. Таблица бағанаһы. 58. Яҡтылыҡ киҫәксәһе. 59. Берәй нәмәнең асылына хас нескәлек. 60. Сыбар һабаҡлы, ваҡ ҡына ялтыр орлоҡло, тарбаҡ һабаҡлы сүп үләне. 62. Ворошилов мәргәне.

**Вертикаль буйынса:** 2. Револьвер. 4.Масҡар тип аталған спортсы. 5. Мәҙрәсәлә уҡытылған логика дәресе. 7. Түбә таҡтаһы аҫтынан өйҙө уратып элгән тар шаршау. 9. Матурлыҡ бүлмәһе. 10. Ранчо нимә ул? 16. Азия сүллеге. 17. Япмалы бәләкәй бысаҡ. 19. Нил сәскәһе. 20. "Кәңәшле ил аҙмаҫ, киң (...) туҙмаҫ" . 22. Ҡатын-ҡыҙҙарға исемен биргән сәскә. 23. Өлөш, киҫәк. 24. "Башҡортостандағы иң ҙур башҡорт ауылы", тигән була уны Ғиниәт Ҡунафин. 27. Күңел аҙҙырғыс нәмә. 28. Караптағы һыу һаҡлау һауыты. 30. Бер нәмәнең төп мәғәнәһе. 32. "Бәхет ерҙән сыҡмаҫ, (...)ҙән сығыр". 33. "Яман аттың ялын һаҡлағансы, яҡшы ирҙең (...)ен һаҡла". 37. Теш ите. 38. Ваҡ ҡармаҡ. 40. Том Сойерҙың әҙәби "атаһы". 41. Америка таҙғараһы. 43. Ауылдан ситтәрәк урынлашҡан бер-нисә айырым йорт. 44. "Мең саҡрымлыҡ юл бер (...)дан башлана". 45. Төрлө нәмә бәйләү өсөн эйәрҙең ҡапталына тағылған ике армытлы бау. 46. Иғтибарлы, йылы мөғәмәлә. 48. Мәңге йәшел көньяҡ ҡыуағы. 49. Аристотелдең төп хеҙмәте - "Органон". 51. Башҡа төҫ өҫтөндәге аҡ тап. 52. Был үлән атҡа булған үсен һабандан ала икән. 53. Әйләнә. 54. Ҡан баҫымын төшөрә торған әсе емеш.

**Илдар Ғәбитов төҙөнө.**

**33-сө һандағы кроссворд яуаптары:**

**Горизонталь буйынса:** 1. Туйсина. 3. Мостафин. 6. Исҡужин. 11. Сәиди. 12. Күтер. 13. Рампа. 14. Талап. 15. Ветлуга. 18. Китапхана. 21. Пасьянс. 26. Максим. 28. Штанга. 29. Шар. 31. Журнал. 33. Һаҡмар (Лилиә Ҡәйепова). 34. Аҫаба. 35. Үтәбай. 36. Рельеф. 37. Вал. 39. Варвар. 42. Тәмәке. 45. Ғибәҙәт. 47. Градусник. 50. Дилбегә. 55. Әкиәт. 56. Теләк. 57. Ипкен. 58. Зарар. 59. Албаҫты. 60. Ҡамсығорт. 61. Хәмитов.

**Вертикаль буйынса:** 1. Түләков. 2. Носорог. 4. Оригами. 5. Никотин. 7. Скрипка. 8. Нонсенс. 9. Шилма. 10. Отель. 16. Танк. 17. Угги. 19. Артыш. 20. Хәмер. 22. Сорт. 23. Яхин. 24. Өмөтбаева. 25. Барлыбаев. 27. Мөжәүир. 28. Шәрәфәт. 30. Алаша. 32. Лай. 33. Һар. 37. Вәлид. 38. Лотос. 40. Ромб. 41. Ауыҙ. 43. Әжәл. 44. Әрке. 45. Ғәҙелша. 46. Әҙәбиәт. 48. Ротонда. 49. Интизар. 51. Иҫкәрмә. 52. Әхмәтов. 53. Киҫкә. 54. Клерк.

*ҠОТЛАЙБЫҘ!*

Ошо көндәрҙә **Баймаҡ районы Ҡарамалы ауылы**нда тыуып, хәҙерге көндә Ишмырҙа ауылында йәшәүсе ҡыҙыбыҙ, һеңлебеҙ **Монасипова Ләйсән Мирсәйет ҡыҙын** 25 йәше тулыу менән ысын йөрәктән ҡайнар ҡотлайбыҙ! Йәйҙең иң матур, уңыш йыйып алыу мәлендә тыуғанғамы, ул бай күңелле, изге йөрәкле, йомарт, уңған бала. Кейәүебеҙ Иҙел Мөхтәр улы менән ныҡлы, сәләмәт, тигеҙ бәхетле тормошта ҡыҙығыҙ Лилиәнең игелеген күреп, бәхет-шатлыҡҡа ғына күмелеп йәшәүегеҙҙе теләйбеҙ. Көндәрең ҡояшлы, төндәрең ай-йондоҙло, кистәрең ал шәфәҡле,таңдарың тыныс, күгең аяҙ, киләсәгең яҡты булһын.

*Аҡ, саф теләк урғый күңелдән,*
*Һине ҡотлап байрам көнөндә.*
*Бәхет, шатлыҡ булһын юлдашың,*
*Һүнмәй янһын йәшлек ҡояшың.*

**Ҡотлау менән барлыҡ туғандарың исеменән әсәйең, Өфөлә йәшәүсе апайың Рима, еҙнәйең Шайморат, һеңлең Гөлйөҙөм, ҡустыларың Ғайсар, Мортаза.**

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*

## ЙӘШ ТАЛАНТТАР САҠЫРА

**Көҙ миҙгеле башланыу менән республиканың мәҙәни тормошо ла ҡыҙыҡлыраҡ була бара. Европа өсөн традицион булған асыҡ һауалағы академик музыка концерты 5 сентябрҙә өфөләләр иғтибарына ла тәҡдим ителәсәк. Был көндө йәш йондоҙҙар Милли симфоник оркестр менән open air форматында ҙур концерт бирәсәк.**

Проекттың етәксеһе - Милли симфоник оркестрҙың художество етәксеһе һәм баш дирижеры Рөстәм Сөләймәнов әҙерләгән программаға популяр башҡорт, рус әҫәрҙәре, сит ил классикаһы ингән. Концертта Швейцария музыка академияһында белем алып йөрөүсе Сыңғыҙ Ханнанов (скрипка), уның ҡустыһы, Чайковский исемендәге Мәскәү дәүләт консерваторияһы эргәһендәге Үҙәк музыка мәктәбе уҡыусыһы Искәндәр Ханнанов (виолончель), Мәскәү дәүләт академия филармонияһының эксклюзив солисы Артур Назиуллин (кларнет), Германияла эшләүсе пианист Андрей Парфенов, Людмила Михайлова (гобой), Рөстәм Хәмиҙуллин (виолончель) һәм билдәле вокалистар, опера солистары, БР атҡаҙанған артистары Әлфиә Кәримова, Илһам Вәлиев, Юлиә Сукманова (Германия) һәм башҡалар сығыш яһаясаҡ. Шулай уҡ Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры хоры (етәксеһе Эльвира Ғәйфуллина) һәм Дәүләт академик хор капеллаһы (етәксеһе Алһыу Хасбуллина) сығышы көтөлә.

**Был сара өсөн тәбиғи "амфитеатр" - Конгресс-холл артындағы майҙан һайланған. Башлана 19.00 сәғәттә.**

*ҺЫЙЛАМАҒА ҺЫЙЫҢ БУЛҺЫН!*

## СӘЙГӘ... ТӘМ-ТОМ

**Кибеттән үҙегеҙ яраҡан киптерелгән емеш-еләк, сәтләүек һатып алығыҙ. Блендерҙа тәүҙә сәтләүектәрҙе ваҡлап, аҙаҡтан емеш-еләкте өҫтәгеҙ. Килеп сыҡҡан массанан шарҙар әүәләгеҙ. Был "кәнфит"тәрҙең составы менән төрлөсә тәжрибәләр үткәрегеҙ, уға көнбағыш, ҡабаҡ орлоҡтары, бал, корица, ваниль, кероб, какао, ҡуйыртылған һөт, кокос онтаҡтары, кунжут өҫтәргә була. Иң мөһиме - бындай тәм-том тәмле лә, файҙалы ла, уларҙы хәүефләнмәйенсә балаларға бирергә лә була.**

**1-се ысул.** 200 грамм кокос онтағына ярты банка ҡуйыртылған һөт өҫтәгеҙ һәм ҡуйырғансы болғатығыҙ. Бер ҡалаҡ тирәһе массаны усҡа алып, уртаһына миндаль сәтләүегеге һалып ҡалдырабыҙ һәм шар яһайбыҙ. Һуңынан уны кокос онтағында тәгәрәтеп алабыҙ. Массаға иҙелгән банан ҡушһаң, тағы ла йомшағыраҡ һәм тәмлерәк була. 30-60 минутҡа һыуытҡысҡа ҡуйып торғандан һуң, табынға бирергә.

**2-се ысул.** Финик, йөҙөм, күрәгә, инжирҙы ваҡ итеп турап, таҙартылған көнбағыш орлоҡтары, бер ҡалаҡ бал өҫтәргә, болғатып, шарҙар яһарға, кокос онтағында йәки кунжут орлоҡтарында әүәләргә. Һыуытҡысҡа ҡуйырға.

**3-сө ысул.** Ваҡланған әстерхан сәтләүеген ваҡланған ҡара емеш һәм йөҙөмгә ҡушып болғатабыҙ. Массаға әфлисун цедраһы, бер әфлисун һуты, талҡан өҫтәп, болғатып, ярты сәғәткә ҡалдырабыҙ. Һуңынан бешерелгән ҡуйыртылған һөт өҫтәп, шарҙар эшләргә.

**4-се ысул.** Иң ябайы һәм иң тәмлеһе. Таҙартылған көнбағыш йәки ҡабаҡ орлоҡтарын ҡуйыртылған һөт менән болғатып, шарҙар эшләп, көнбағыш орлоғонда әүәләп алырға.

**5-се ысул.** Киптерелгән һөт, шәкәр пудраһы, 50 грамм аҡ май, йөҙөм, арахис, әстерхан сәтләүеге йәки ҡыҙҙырылған миндаль, әҙ генә ваниль, һибеү өсөн кокос онтағы алығыҙ. Сәтләүектәрҙе иҙеп, барлыҡ ҡоро ингридиенттарҙы ҡушырға, болғатырға, һыу өҫтәргә. Шарҙар эшләп, кокос онтағында әүәләргә.

